ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

31-6
май - июнь
(һабанай - һөтай)

2024

№21 (1114)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙ башҡортса һөйләшәбеҙ,**

балаларыбыҙ ҙа башҡортса һөйләшәсәк!



8-9

**Хәйбулла килендәре...**

сәскә үҫтерә



12

**Зәйнулла Рәсүлев һәм суфыйсылыҡ**



13

**Телефонын онотторорлоҡ...**

ниндәй спектакль уйлап табырға?



15-16

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*"Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн 897 һум 06 тингә баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

*БЕР КӘЛИМӘ...*

# КИТАП БАШ ҠАЛАҺЫ

**24-26 майҙа баш ҡалабыҙ Өфөлә "Китап-байрам" гөрләп уҙҙы. Былтырғы сарала көндәр эҫе торҙо, шуға күрә лә өс көн буйына Шайморатов һәйкәле ҡаршыһындағы фонтанда балаларҙың сыр-сыу килеп һыуҙа ҡойоноуы иң иҫтә ҡалған зауыҡлы тамаша булды.**

КИТАП-БАЙРАМ
ХАЛЫҠ-АРА КИТАП ЙӘРМИНКӘҺЕ

Быйыл иһә тәбиғәт иркәләтмәне, хатта һуңғы көндә ямғыр яуып ҡуйҙы. Шуға күрәлерме, байрамға килеүселәр палаткалар, тирмәләр, биналар эстәренә һырыҡты, тематик сараларҙа күберәк ҡатнашты, тап шуның өсөн дә быйылғы "Китап-байрам" интеллектуаль тәрәнлеге менән дә былтырғыһынан айырылып торҙо. Күрәһең, тәбиғәт ғали йәнәптәре һуңғы йылдарҙа күп кенә сараларҙың шоуға әүерелеп барыуын иҫкәртеп, тап ошо көндәрҙә ер өҫтөнә һалҡын һауа, ямғыр ебәргәндер, тим.

Был уңайҙан тағы бер фекер: тажзәхмәт сире таралып, күп кенә кешеләр фатирҙарында бикләнгәндә, бер билдәле шәхесебеҙ электән йыйылып килгән күп һанлы китаптарын уҡып сығыуы хаҡында һөйләгәйне. Икенсенән, һуңғы йылдарҙа "Кешеләр хәҙер гәзит-журнал, китап уҡымай, бар диҡҡәте интернетта", тигән фекер нығынып өлгөргәйне. "Китап-байрам" был фекерҙе лә инҡар итте, йәғни тап ошо өс көндә кешеләр ябырылып китеп китап һатып алды. Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте китаптарының ғына быйыл ике меңдән ашыу данала һатылыуы шул турала һөйләй, былтыр иһә уларҙың баҫмалары аҙыраҡ һатылған булған.

"Китап-байрам" алдағы йылдарҙа ла тағы ҡыҙыҡлыраҡ, зауыҡлыраҡ итеп үткәрелер тип ышанғы килә. Башҡортостан баш ҡалаһы ысын мәғәнәһендә Китап баш ҡалаһына әйләнһен, тип теләйек!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Теманың дауамын 6-сы биттә уҡығыҙ).**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# УҢЫШ ҠАҘАНЫРҒА ӨЙРӘТӘ

**Гәзитте бөгөн күпселек өлкәндәр генә уҡый, тип кемделер бик ышандырырға тырышыусылар бар. Миңә, мәҫәлән, 38 йәш, ләкин мин гәзит уҡырға яратам һәм үҙемде әле өлкән быуын вәкиле тип иҫәпләй алмайым. Улыма 20 йәш һәм ул, эйе, һәр бер бөгөнгө интернет ҡоллоғонда йәшәгән быуын вәкиле булараҡ, гәзитте һирәк уҡый, маҡтана алмайым.**

Ләкин гәзитте генә түгел, ә, ғөмүмән, уҡыу ғәҙәте, уҡыуға ихтыяж, кеше шәхес булараҡ бер аҙ өлгөргәс, үҙенән-үҙе барлыҡҡа киләлер, тип уйлайым, сөнки тап ошо йәш тә түгел, ҡарт та түгел ваҡыттараҡ тормош мәғәнәһе, донъяуи хәлдәр, социум, хатта сәйәсәт менән ҡыҙыҡһыныу тыуа. Һәм был ҡыҙыҡһыныу ошо йәшәп ятҡан тормошобоҙҙоң айышына төшөнөү, үҙ-үҙлегенде аңлау, маҡсаттарыңды барлау, нәҫел тамырҙарыңды юллау, халҡың, тыуған яғың, ватаның тарихын өйрәнеү кеүек ихтыяждар менән бәйле була. Бының өсөн иһә төп эшеңдән бушап, китапхана, архивтарҙа ултырыу күп осраҡта мөмкин дә түгел. Интернетта ла хатта был материалдарҙың күбеһен табып та булмай әле.

Шуға күрә мин үҙебеҙҙең туған телебеҙҙә нәшер ителгән гәзит-журналдарҙы һайланым. Мәғлүмәт сығанағы булараҡ ҡына түгел, юҡ. Яңылыҡтарҙы уны мөйөш һайын радиоһы ла, телевизоры ла ярышып һөйләп тора, интернет та ысынлы-бушлы хәбәрҙәр менән тулы: ҡайһыһы дөрөҫ, ҡайһыһы хәҙер шулай тип аталған фейк - белмәҫһең.

Үҙебеҙҙең гәзиттәрҙән бөтәһен дә тип әйтерлек уҡып барам: эштәге китапханала бөтөн матбуғат баҫмалары ла бар, төшкө ялға туҡтағанда уҡып та сығам. Ә бына шулар араһынан "Киске Өфө"-нө, өйгә ҡайтҡас, яйлап, иркенләп уҡырға тип, ҡалдырып торам, сөнки мин уны өйгә почта аша яҙҙырып алдырам. Был гәзит минең күңелемде йылытып, донъяма нур өҫтәп торғандай. Юғиһә, ҡайһы бер баҫмаларҙағы рәсми тел, рәсми мәҡәләләр әллә ни үҙенә тарта алмай, үкенескә.



*Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә ошо китаптарҙы аласаҡ.*

"Киске Өфө - беҙҙең ғаилә гәзите тип әйтә алам, сөнки уны атайым менән әсәйем дә, тормош юлдашым да уҡыйҙар, тик ҡайһы саҡ яңы килгән һанын алдараҡ, тәүҙәрәк ҡулға эләктереү өсөн йылғырлыҡта көс һынашырға ла тура килгеләй. Миңә был гәзиттең "Заман башҡорто", "Тарихнамә", "Фани донъя", "Көн ҡаҙағы", "Ҡомар", "Ишеттегеҙме әле?" рубрикалары айырыуса оҡшай. Йәш кенә булыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙ эштәрен асып, ниндәйҙер уңыштарға өлгәшкән, донъяға үҙ ҡараштары, үҙ һүҙҙәре булған егеттәр һәм ҡыҙҙарға һоҡланыуым сикһеҙ. Улар хаҡында мәҡәләләрҙе хатта улым менән бергәләп тә уҡыйбыҙ, сөнки мин улының ана шундай йәштәрҙән өлгө алып, сәмләнеп уҡыуын, аҙаҡ был тормошта үҙ юлын табыуын бик теләйем. Ә бына ошондай яҡшы миҫалдар кешене һәр ваҡыт сәмләндерә, уның дәртен арттыра. "Киске Өфө" яҙған был егет һәм ҡыҙҙар ҙа бит бер ҙә күктән төшмәгән, минең балам һымаҡ ябай ғаиләлә тыуып, ябай мәктәптәрҙә уҡығандар, тик уларҙың үҙ алдарына аныҡ маҡсаттар ҡуйып, шуға ынтылып уҡыуҙары, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, тырышлыҡ сифаттары ана ниндәй һөҙөмтәләр биргән.

Иң мөһиме, маҡсатың булыуы һәм уға ынтылыш, тип уйлайым. "Киске Өфө" гәзитенә ошо матур, тырыш йәштәребеҙ - киләсәк быуын хаҡындағы рубрикаһы өсөн ҙур рәхмәтлемен. Ул йәштәребеҙгә үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫырға һәм һөнәр һайларға булышлыҡ итәлер, тип ышанам, әгәр улар һәм уларҙың ата-әсәләре ошо гәзитте уҡып барһалар, әлбиттә...

**Рәмилә ИСКӘНДӘРОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

12+

✓ *Ауылдан килгән бер ҡунағымдың заводта етештерелгән магазин һөтөн тәмләп ҡарап, уҡшып төкөрөнгәненә шаһитмын. Рәсәй баҙарында һөт һәм һөт ризыҡтары фальсификаты 12 процент тәшкил иткән.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ТАУЫШЫҢ ҮҘГӘРҺӘ...

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Наил ҒАБДУЛЛИН, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, медицина фәндәре кандидаты, танылған фониатор:*** Кеше, айырыуса беҙҙең халыҡ, һау сағында үҙенең һаулығын ҡайғыртырға бик өйрәнмәгән. Ул ауырый башлағас та табипҡа мөрәжәғәт итергә ашыҡмай әле, 1-2 аҙнаны өйҙә ятып дауаланып, халыҡ ысулдарын ҡулланып йүнәлергә тырышып, хәлен еңел генә үткәреп ебәрергә уйлай. Ә инде ул хәл көсөргәнешле, хроник төҫ алдынинә, һыҙланыу-ауыртыныуҙары көсәйгәс, кемдәрҙер хатта түшәккә яткас ҡына дауаханаға килә. Ындай ваҡытта күптәренә ярҙам итеүе лә ауырлаша. Сөнки табипҡа ни тиклем иртәрәк мөрәжәғәт итһәң, шул тиклем тиҙерәк дауаланыу ысулын билдәләп, һауыҡтырыуы еңел, һөҙөмтәлерәк тә була. Шуның өсөн "Һаулыҡ - ҙур байлыҡ", тигән әйтемде онотмай, ауырыуҙың беренсе билдәләрен һиҙеү менән табипҡа мөрәжәғәт итеп өйрәнергә кәрәк беҙҙең халыҡҡа.

Мин хәҙер күберәк тауышҡа бәйле ауырыуҙарҙы дауалау буйынса эшләйем. Тауыш - кешегә тәбиғәт тарафынан мәңгелеккә бирелгән, ул үҙгәрергә тейеш түгел, үҙгәрһә лә, үҙ хәленә тиҙ ҡайтырға тейеш, тип уйлайҙар. Ә ул тауыштың үҙгәреүе күп яман сирҙәрҙең беренсе сигналы булыуы ихтимал. Шуның өсөн тауыш бер 10-12 көндән дә оҙағыраҡ үҙгәреп, ҡарлығыу һаҡланған хәлдә кеше хафаланырға тейеш. Сөнки был йыш ҡына яман шеш сиренә бәйле була, ә был ауырыуҙы ваҡытында дауалау бик мөһим.

Тәмәке тартмағыҙ, спиртлы эсемлектәр эсмәгеҙ, тип һәр бағана һөйләй, тигән һымаҡ. Шулай ҙа мин дә ҡабатлап әйтәйем, быға ла иғтибар итергә кәрәк. Тәмәке тартҡанда кешенең тын юлдары үҙгәрә, хроник шешеү барлыҡҡа килә. Тауыш ҡылдарына ла насар йоғонто яһай. Тәмәкеселәрҙә тамаҡтың яман шеш ауырыуы башҡа сирҙәргә ҡарағанда 3-4 тапҡырға йышыраҡ осрай икәнен белегеҙ.

Хәҙер тауыш менән эш итеүселәр даирәһе киңәйә бара, һәр яңы һөнәр эйәһе кеше менән туранан-тура эшләй бит. Миңә йышыраҡ артистар, йырсылар һәм уҡытыусылар тауышы үҙгәреүенә зарланып мөрәжәғәт итә. Яңы эшкә башлаған йәш уҡытыусылар тауыштары өҙлөгөп килә, тамаҡ ауыртыуы, тауыш ҡарлығыуы, йүткертеүе тураһында ла әйтәләр. Был күпселек осраҡта танау һәм ауыҙ кешегә нимә өсөн бирелгәнлеген онотоп китеүҙән, танау аша тын алыу урынына ауыҙ аша һулауҙан килә. Ауыҙ менән тын алғанда һулаған һауала нимә генә юҡ - барыһы ла тура тамаҡҡа эләгә һәм ҡурылдайға төшә. Ә танау аша тын алғанда һауа унда таҙарына, йылына, еүешләнә. Дөрөҫ тын ала белеү тауышты һаҡларға ярҙам итә. Быны театр артистары, опера йырсылары дүртәр, хатта туғыҙар йыл өйрәнә. Ә шул уҡ аудитория менән эшләүсе уҡытыусыларға юғары уҡыу йортонда ындай төшөнсәләр бирелмәй, ҡыҙғаныска күрә. Шуның өсөн айырыуса яңы эшләй башлаған педагогтар тәнәфестәрҙә үҙҙәре өсөн мөмкин тиклем файҙалы үткәрергә тырышырға тейеш: тауыш ағзаларының мускулдарын ял иттереп, йылы ғына сәй эсеп, терелтеп алыу мөһим.

Шуны ла әйтеп китәйем: тауыш үҙгәрһә, теге йәки был дарыуҙы эсегеҙ, тигәнерәк рекламалар хәҙер бик күп. Табипҡа күренмәйсә, бер ниндәй ҙә дарыу һатып алырға кәрәкмәй. Сәбәбен асыҡламайынса, үҙаллы дауаланмағыҙ, ваҡытты һүҙып йөрөмәгеҙ. Сәләмәт булығыҙ!

БЫЛ АЙҘА...

**Көн торошо нисек кенә һыуытып, тап ауыл хужалығы эштәре мәлендә ҡар-ҡырауҙары менән ҡурҡытып алмаһын, тәбиғәт үҙенекен итте: тирә-яҡ саф йәшеллеккә сумды, ялан һәм туғайҙар күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә һутлы ыуыҙ үлән менән ҡапланды: бер тигәс тә, мал-тыуар кинәнә, туйынып бөтә алмайынса, хәтфәгә ҡаҙалды. Һөт төшә, һөт! Юҡҡа ғына һөтай тип атамаған халыҡ йәйҙең тәүге айы - июнде. Ауыл халҡын туйындырыусыларҙың береһе - һыйыр малҡайҙар кисләтеп кенә ҡырҙан, көтөүҙән хужаларын ҡыуандырып, елендәре тиртеп ҡайта. Уңған хужабикәләр еңдәрен һыҙғанып, аҡты эш итергә лә тотона: ҡаймағын айырта, майын танскай, ҡаҙан тултырып эркетен ҡайната, эремсек эшләй...**

# АШАҒАН БЕЛМӘҺӘ ЛӘ...

## "тураған" белә



Әйткәндәй, был ай бик тә мөһим һәм етди байрамдар, иҫтәлекле даталарға ғәйәт бай, әммә шулар араһында баҫалҡы һәм тормоштоң үҙе кеүек ябай ҙа, ҡатмарлы ла, үтә кәрәкле лә бер "һөнәри байрам" - Хужабикәләр һәм йорт хужалары көнө **(8)** рәсми рәүештә булмаһа ла күп илдәрҙә, шул иҫәптән Рәсәй календарында ла, лайыҡлы урынын алды. "Йорт хужабикәләре - йортта айырым бер йылылыҡ, яҡтылыҡ, изгелек нурҙары, унайлыҡ һәм ғаиләһе ағзалары өсөн йәшәү шарттары тыуҙырыусы, балаларын тәрбиәләүсе, иренә ярҙамсы һәм кәңәшсе булған мөһим категория ҡатындар улар. Хужабикәлек рәсми һөнәр иҫәпләнмәһә лә, уларҙың төп эше - ғаилә һәм йорт",- тиелә ошо көнгә ҡарата аңлатмала. Ирҙәргә лә, әлбиттә, ҡайҙалыр эшләп йөрөгән хәлдә лә, йорт хужалығын алып барыуҙа һәм балалар тәрбиәләүҙә ҡатындың беренсе таянысы бурыстарын башҡарыу йөкмәтелә. Был айҙағы Балаларҙы яҡлау, шулай уҡ Ата-әсәләр **(1)**, Халыҡ-ара атай **(16)** көндәре лә бит, юғиһә , әлеге лә баяғы хужабикәләр менән йорт хужалары, йәғни, атай, әсәй һәм ғаиләләге балалар, ошо өлкәләге тәрбиә, уларҙың социумдағы нигеҙ әһәмиәте, хеҙмәткә ихтирам мәсьәләләре менән туранан-тура бәйле икәнен күрәбеҙ. Ә бына һөт көнө **(1)**, тигәндән, бөгөн экологик таҙа ризыҡтың фәҡәт ана шул йорт хужалары өҫтәнлөгө булып, улар табынында ғына тороп ҡалыуын билдәләй алабыҙ, сөнки сәнәғәт юлы менән етештерелеүсе башҡа тәр бөтөн тип әйтерлек продукцияның бөгөн кеше һаулығына зыянлы химия-пестицидтар һәм теләһә ниндәй өҫтәмәләр, яһалма тәмләткес-буяуҙар ҡушып эшләп сығарылыуын һәм үҫтерелеүен яҡшы беләбеҙ, ләкин шулар менән туҡланыуҙы дауам итәбеҙ.

Әкуптәр, дөрөҫөн әйткәндә, был хаҡта артыҡ уйланмай ҙа магазин кәштәһендә булғанды һәм арзаныраҡты һатып ала. Ысынлап та, "Ашаған белмәй, тураған белә", тиҙәр бит. Был осраҡта "тураған"ды тырнаҡ эсенә алырға тура килә, сөнки ҡырҡ төрлө өҫтәмәләрҙән яһалма аҙыҡ-түлек етештереүселәр күбәйҙе һәм улар ошо өлкәләге бөтөн алдаҡ һәм хәйләләрҙе яҡшы белә. Ауылдан килгән бер ҡунағымдың заводта етештерелгән магазин һөтөн тәмләп ҡарап, уҡшып төкөрөнгәненә шаһитмын. Рәсәй баҙарында һөт һәм һөт ризыҡтары фальсификаты былтыр яртыйыл эсендә генә лә 12 процент тәшкил иткән. Рәсәй сифат һәм стандартлаштырыу дәүләт үҙәге тикшерелгән һөт составындағы пальма майы менән үҫемлек компоненттарының - 7,5, консерванттар - 6,6, антибиотиктарҙың 2,5 процент булыуын иҫәпләп сығарған.

Замана ризыҡтарының зыяны хаҡында күп яҙыла, хатта ки Аҙыҡ-түлек продукттарының бөтөн донъя хәүефһеҙлек көнө лә **(7)** уйлап сығарылған был айҙа, ә бына **2 июндә**... Сәләмәт туҡланыу көнө билдәләнә. Таҙа ризыҡ булмаған заманда ниндәй сәләмәт туҡланыуҙыр - аптыраҡ! Иң төп ризығыбыҙ икмәкте генә алайыҡ. Ғалим-табиптарҙың береһе, терапевт, диетолог, "АиФ" порталында сығыш яһаған биотехнолог Татьяна Солн-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Үзбәкстанға сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ташкенттағы технопаркта булды һәм уның эшен ойоштороу, был биләмәлә эшләгән производстволарҙың үҙенсәлектәре менән танышты. Сәнәғәт майҙансығының эш тәжрибәһен Ташкент өлкәһендә Башҡортостан-Үзбәкстан технопаркын сафҡа индереү өсөн файҙаланыу ҡуҙаллана. Бынан тыш, киләсәктә республикабыҙҙа ла ошондай майҙансыҡ булдырырға ниәтләйҙәр.

✓Үзбәкстандың "Ялла" дәүләт атҡаҙанған ансамбленең художество етәксеһе Фәрух Закиров "Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. Бүләкләү тантанаһы Сибайҙа "Урал арьяғы - 2024" Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйында уҙҙы.

✓Әзербайжан сигендә Иран Президенты Ибраһим Раиси ултырған вертолет ҡолаған, тип хәбәр итә Mehr агентлығы. Иран президенты, уны оҙатып йөрөүселәр, шул иҫәптән сит ил эштәре министры Хөсәйен Әмир Абдуллахиан һәләк булған. Ҡолаған вертолет тулыһынса янып бөткән. Mehr хәбәр итеүенсә, Раиси "Иран халҡы алдындағы бурысын үтәгәндә ғазаплы үлемгә дусар булған".

✓Башҡортостан уҡытыусыларының республика август кәңәшмәһе быйыл Стәрлетамаҡта уҙғарыла. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. Стәрлетамаҡ мэры Рөстәм Ғәзизов та ҙур кәңәшмәне ҡабул итергә әҙер булыуҙары хаҡында белдерҙе. "Бөтә объекттар ҙа ваҡытында әҙер булыр, беҙ ҙур теләк менән республика август кәңәшмәһен ҡабул итергә әҙер", - тип яуап бирҙе ул республика етәксеһенең сарага әҙерлек тураһында һорауына.

✓Өфөлә Башҡортостан Яҙыусылар союзының 90 йыллығына арналған саралар барышында әҙиптәрҙе бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Наградаларҙы "Китап-байрам" сараһы ваҡытында Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Николай Иванов тапшырҙы. Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай "Әҙәбиәттәге ҡаҙаныштары өсөн" почет билдәһе менән бүләкләнде. Салауат Әбүзәров, Зөһрә Бураҡаева һәм Гөлсирә Ғиззәтуллина Василий Шукшин миҙалын, Мөнир Вафин, Зөлфиә Ханнанова, Александр Шуралев һәм Миләүшә Ҡаһарманова (Хәбилова) иһә А.С.Пушкин миҙалдарын алды.

цеваны тыңлайыҡ әле: "Рәсәйҙә йыл һайын икмәк ризыҡтарының тәғәйен төрҙәренә тикшеренеүҙәр алып барыла. Былтыр тикшерелгән аҡ икмәк өлгөләрендә 5 процент хәүефле семикарбазид һәм броматтар өҫтәмәһе булыуы асыҡланды, - ти ул. - Семикарбазит, калий һәм кальций броматтары, ондоң, йәнәһе лә, "сифатын яҡшыртыу", йәғни унан бешерелгән икмәк ризыҡтарын "уңдырып", ҡабартып, һығылмалы итеп күрһәтеү өсөн өҫтәлә икән..."

Ғалимә әйтеүенсә, был өҫтәмәләрҙең рөхсәт ителгән исемлектә булмауы бер кемде лә борсомай, шуныһы ғәжәп! Ә һуң, улай булғас, ризыҡ сифаты өсөн яуаплы Роспотребнадзор хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре икмәк ашамайҙыр, бәлки? Ә, бәлки, улар һәм башҡа контроль органдар, депутаттар, ҙур-ҙур хужалар өсөн айырым технология буйынса, айырым мейестә бешерәләрҙер икмәкте? Бөтөн донъя аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге көнө бөгөн бөтөн төр ризыҡтарҙың сифат проблемаһына иғтибарҙы йәлеп итеп, зыянлы аҙыҡ менән туҡланыу сәбәпле килеп тыуған ағыулы һәм йоғошло сирҙәрҙе кәметеү һәм иҫкәртеү маҡсатында булдырылған. Был ризыҡ етештереү сылбырының бөтөн этаптарына ҡағыла: ерҙе, үҫентеләрҙе, ҡоротҡостарҙы химик эшкәртеүҙән алып, йыйылған уңышты дөрөҫ һаҡламау, әҙер продукция эшләп сығарыуҙа аҙыҡ технологияһын тупаҫ боҙоу һәм башҡа бик күп яуапһыҙлыҡ фактарҙы күберәк килем алырға тырышыуҙан килеп сыға.

Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, донъя күләмендә химик саралар һәм микроорганизмдар менән зарарланған аҙыҡ-түлек ҡулланыу арҡаһында 600 млн һәр төрлө сир, шул иҫәптән ағыуланыу, эс китеү, яман шеш осраҡтары теркәлгән, ошо сәбәпле йыл һайын 420 мең кешенең ғүмере өҙөлә. Был афәттең 40 проценты 5 йәшкә тиклемге балаларҙы ағыулай, шунлыҡтан йыл һайын 125 мең бала һәләк була. Әйтеүе лә ауыр: был бәләне туҡтатыу түгел, кәметеү генә лә мөмкин микән хәҙер? Исмаһам, Рәсәй кимәлендә. Улай тиһәң, хәҙер беҙгә бик күп аҙыҡ-түлек, айырыуса йәшелсә, емеш-еләк сит илдәрҙән килтереп һатыла һәм аҡса өсөн уны үҫтереүсе һәм етештереүселәр пестицидты ла, үҫеш гормондарын да, башҡа төр "уңыш" сараларын да йәлләмәй, әлбиттә. Сик санитар таможнялары, Роспотребнадзорҙың талапсанлығы, намыҫында ҡала беҙҙең хәүефһеҙлек. Ризыҡ етештереүҙә технология тәртибен боҙоуҙар, йәғни фальсификаттар эшләп сығарыу ҡурҡынысы беҙгә, бәлки, күберәк үҙ илебеҙҙә янайҙыр ҙа, сөнки аҙыҡ-түлек тармағында сифатһыҙ һөт, колбаса, икмәк продукттары, консервалар, алкоголь һәм спиртһыҙ эсемлектәр, хатта бөртөклө сәй төрөүгә тиклем алдаусы предприятиелар хаттин ашты, ә ҡулланыусыны төп башына ултыртыусы был етештереүселәргә иң күбе ни бары 150-300 мең һум штрафтан тыш бер ниндәй яза ла ҡаралмаған. Дөрөҫ, Дәүләт Думаһы депутаттары күптәнән бирле яһалма һәм ялған һөт, ит ризыҡтары етештереүселәргә ҡарата енәйәт яуаплылығы хаҡында һүҙ алып бара, ләкин был ҡоро һүҙ бутҡаһы булып ҡала килә.

Был айҙың байрам кәйефен бер аҙ боҙорға тура килһә лә, ни ашағаныңды белеп аша, мөмкинлек бар икән, исмаһам, картуф-йәшелсәне үҙең үҫтер, ауылда йәшәйһең икән, мал-тыуар, ҡош-ҡорт аҫра, тип кенә әйтергә ҡала. Ә байрамдар - алда әле...

Балаларҙы һаҡлау, Бөтөн донъя ата-әсәләр, Бөтөн донъя һөт, Һыу яткылыҡтарын халыҡ-ара таҙартыу көндәре **(1)**, шулай уҡ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы съезы асылған көн (1995 йыл), Сәләмәт туҡланыу **(2)**, Агрессия ҡорбандары - Халыҡ-ара ғәйепһеҙ балалар **(4)**, Эколог, Бөтөн донъя тирә-яҡ мөхит (5) көндәре, Рус теле, Рәсәйҙә Пушкин көндәре (Бөйөк рус шағиры А.С. Пушкиндың тыуыуына - 225 йыл (1799-1837), Бөтөн донъя аҙыҡ-түлек продукттарының хәүефһеҙлек көнө **(7)**, Халыҡ-ара йорт хужабикәһе һәм йорт хужаһы көнө **(8)**, Халыҡ-ара архивтар, Халыҡ-ара дуҫтар көндәре **(9)**, Башҡортостанда Салауат Юлаев көндәре **(10-20)**, Рәсәй көнө. РФ дәүләт суверенитеты тураһында Декларация ҡабул ителгән көн , Башҡортостандың баш ҡалаһы - Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуға (1574 й.) - 450 йыл **(12 июнь)**, Миграция хеҙмәтендә эшләүселәр, Башҡортостан матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре, Халыҡ-ара блогерҙар көндәре **(14)**, Ҡорбан байрам, Медицина хеҙмәткәрҙәре, Халыҡ-ара атай көндәре **(16)**, башҡорт халҡының милли батыры, шағир-импровизатор Салауат Юлаевтың тыуыуына - 270 йыл **(16 июнь, 1754-1800)**, Нәфрәт теле менән халыҡ-ара көрәш **(18)**, Бөтөн донъя ҡасаҡтар (20) көндәре, Рәсәйҙә Хәтер һәм ҡайғы көнө, йәғни Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн **(22 июнь, 1941 йыл)**, Художестволы халыҡ кәсепселеге **(23)**, 1945 йылғы Бөйөк Еңеү парады көнө **(24)**, Наркотик саралар һәм уның законһыҙ әйләнеше менән шөғөлләнеүселәргә ҡаршы халыҡ-ара көрәш көнө **(26)**, Микро-, бәләкәй һәм урта предприятиелар, Бөтөн донъя балыҡсылыҡ **(27)** көндәре, Рәсәй йәштәре, Корабль төҙөүселәр көндәре **(29)**.

**Һөтайҙа тыуғандар:**

**1 -** ҡурайсы, мәғрифәтсе, башҡорт ауыҙ-тел ижадын йыйыусы, сәйәсәт һәм дин эшмәкәре, 1917 йылғы улыс-ара башҡорттар съезын ойоштороусы, 1918-1919 йылдарҙа Башҡортостан Диниә назараты Бөрйән-Түңгәүер кантонының бүлек мөдире **Әбүбәкер Хөсәйеновтың тыуыуына - 165 йыл** (1859-1937).

**2 -** гигиена белгесе, БДМУ-ның кафедра мөдире, медицина фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Нәзирә Шәрәфетдиноваға - 75 йәш** (1949).

**9 -** актриса, педагог, профессор, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Фәрдүнә Ҡасимоваға - 90 йәш** (1934).

**11 -** режиссер, актриса, 1992-2008 йылдарҙа Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры режиссеры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Гөлдәр Ильясоваға - 70 йәш** (1954).

**15 -** ғалим-филолог, филология фәндәре докторы, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан һәм "Октябрь Революцияһы", "Почет билдәһе" ордендары менән наградланған **Әхнәф Харисовтың тыуыуына - 110 йыл** (1914-1977).

**-** Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы, 1980-1989 йылдарҙа Хәйбулла район прокуратураһы тәфтишсеһе, 1997-2009 йылдарҙа Өфө ҡалаһы Киров район суды рәйесе булып эшләгән **Айтуған Вәлиевҡа - 70 йәш** (1954).

**20 -** педагог, журналист, философия фәндәре докторы, профессор **Самат Мөхәмәтйәновҡа - 75 йәш** (1949).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ЕВРОПАЛА РИЗАҺЫҘЛЫҠ АРТА



**Планетаның тыныс граждандары нисек кенә теләмәһен, Ер йөҙөндә һуғыш һәм ыҙғыштар һис туҡтарға уйламай. Әле бында, әле тегендә ҡанатлы тактик ракеталар, снарядтар, дрондар шартлай.**

26 майға ҡарай төндә Рәсәй хәрби-космос көстәре Украина объекттарын көслө утҡа тотто һәм ул Киев, Житомир, Кировоград, Винница, Хмельницкий, Ивано-Франковск, Днепропетровск, Полтава һәм Львов биләмәләрендәге хәрби объекттарға төбәлде. Рәсәй армияһы был осраҡта ҡанатлы ракеталар, "Кинжал" аэробаллистик ракеталар комплексы, осоусы аппараттар ҡулланды. Украина сығанаҡтары хәбәр итеүенсә, был һөжүм һөҙөмтәһендә Староконстантинов ҡалаһының ҡанатлы ракеталар йөрөтөүсе СУ24М бомбардировщиктары урынлашҡан аэродром тулыһынса электр энергияһыҙ ҡалған һәм ҡыйратылған. Был аэродромды ҡеүәтле утҡа тотоуҙың тағы бер сәбәбе шул: унда Украинаның Вашингтондан теләнселәп алған F16 истребителдәре лә йәшереп тотолоуы ихтимал ине, тип фаразлана. Украина сәйәсмәндәре уйынса, Рәсәй Ҡораллы Көстәре фронтты көҙгә тиклем һуҙып, АҠШ президентлығына һайлауҙарҙан һуң ысынтылап һөжүмгә күсәсәк, имеш. Ә бөгөн, әгәр Рәсәй Харьков йүнәлешендә хәрәкәтте дауам итһә, Балтик буйы илдәре менән Польша Украинаға ғәскәрҙәрен индерәсәк, тип яҙа Der Spiegel. Бындай аҙымдан һуң НАТО Украина яғында һәм Рәсәй менән асыҡтан-асыҡ ҡаршылыҡҡа киләсәк.

Етмәһә, Владимир Зеленский һаман да булһа француз коллегаһы Эммануэль Макрондың Украинаға ғәскәр ебәреүен зарығып көтә. Шул уҡ ваҡытта Зеленский АҠШ президенты Джо Байден менән Ҡытай лидеры Си Цзиньпинды июнь урталарында Швейцарияла үтәсәк тыныслыҡ саммитына саҡырып мөрәжәғәт итте, һәм унда АҠШ делегацияһы ҡатнашырға ризалыҡ бирҙе, ә Си Рәсәйҙән башҡа ҡатнашырға теләмәүен белдерҙе. Ул сараға шулай уҡ Бразилия, Көньяҡ Африка Республикаһы, Италия ла килмәйәсәк. Италия вице-премьеры Сальвини Көнбайыш ҡоралын Рәсәйгә ҡаршы файҙаланған өсөн НАТО-ның генеральный секретары Столтенбергҡа Рәсәй алдында ғәфү үтенергә йә булмаһа отставкаға китергә саҡырҙы. Германия канцлеры Олаф Шольц та был ваҡытта Украина тарафынан Көнбайыш һәм АҠШ ҡоралын Рәсәйгә ҡаршы ҡулланыуға ҡырҡа ризаһыҙлыҡ белдереп сығыш яһаны. АҠШ-тың вәкилдәр палатаһы комитеты башлығы Майкл Маккол да Америка ҡоралын Рәсәйгә ҡаршы файҙаланыуға тыйыу һалыу кәрәклеген белдерҙе. Ә Америка быны ишетә, ләкин киреһен эшләй. Әлеге Столтенберг альянс илдәрен Көнбайыш ҡоралы менән Рәсәй территорияһын утҡа тотоусы Украинаға сикләүҙәрҙе юҡҡа сығарырға ҡушты.

Әйткәндәй, АҠШ Тайвань йөҙөндә "икенсе Украина"ны үҙ тәрбиәһенә алырға йыйына һәм Ҡытайға булған үсен әлеге бик уңайлы объект - Ҡытайҙан айырылып, үҙаллылыҡҡа ынтылған Тайвань "ҡулы менән" атҡармаҡсы. Ошо маҡсаттарҙа, күрәһең, был көндәрҙә АҠШ делегацияһы Тайвань утрауына килде. Былай ҙа ябайҙан булмаған үҙ-ара мөнәсәбәттәрен ҡатмарлаштырып, Ҡытай менән Тайвань араһына 2022 йылда уҡ әле АҠШ-тың вәкилдәр палатаһы спикеры Нэнси Пелоси "таяҡ тығып" киткәйне инде. Ә хәҙер был төбәктә лә ут сығарып ебәреү АҠШ-ҡа бер ни тормасаҡ. Американың Wall Street Journal гәзите яҙып сығыуынса, АҠШ Ҡытай менән конфликт ихтималлығына әүҙем әҙерлек алып бара, ә Пекин, үҙ сиратында, ситтән ҡыҫылыуҙарға ҡарамаҫтан, Тайвань менән мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыу өсөн көрәшәсәге тураһында белдерә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Китап йәрминкәһенең барышында яҙыусы һәм драматург Наил Ғәйетбаев Халыҡтар дуҫлығы ордены менән наградланды. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Айгиз Баймөхәмәтов һәм Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипова Салауат Юлаев орденына лайыҡ булды. "Хеҙмәт ҡаһарманлығы өсөн" миҙалын Башҡортостандың Милли архивы директоры урынбаҫары Ниязбай Сәлимов, республиканың Яҙыусылар союзы ағзалары Игорь Фролов һәм Ғәлим Хисамов алды.

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең 2024 йылдың 14 майындағы 162-се ҡарары менән "берҙәм тәҙрә" режимында республиканың күп функциялы үҙәктәрендә күрһәтелгән хеҙмәттәр исемлеге киңәйтелде. Атап әйткәндә, льготалы газ үткәреү хоҡуғына эйә граждандар шул рәүешле газ ҡулланыу ҡорамалын һатып алыу һәм ҡуйыу, шулай уҡ республика биләмәһендә социаль газ үткәргәндә ер участкалары сиктәрендә технологик тоташтырыу буйынса эштәр башҡарыу өсөн субсидия алырға мөмкин.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров 2025 йылда Ураҙа һәм Ҡорбан байрамдары тураһында ҡарарға ҡул ҡуйған. Документтан күренеүенсә, 30 март - Ураҙа, ә 6 июнь Ҡорбан байрамы уңайынан ял итәбеҙ. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Башинформ" быйыл Башҡортостан халҡын июндә өҫтәмә ял көндәре көтөүе хаҡында яҙғайны. 12 июнь - Рәсәй көнө, 16 июндә иһә Ҡорбан байрамы.

✓2024 йылдың беренсе кварталында йылдам үҫеш биләмәләре резиденттары Башҡортостан иҡтисадына ярты миллиард һумдан ашыу аҡса һалған. Башҡортостанда биш йылдам үҫеш биләмәһе эшләй: Бәләбәйҙә, Күмертауҙа, Благовещенда, Нефтекамала һәм Белоретта, тип хәбәр итте республика Башлығы Радий Хәбиров. Уларҙа - 126 резидент, инвестицияларҙың план күләме - 38 миллиард һум. Шуның 10 миллиард һумы төбәк иҡтисадына инвестицияланған, 6 меңдән ашыу яңы эш урыны булдырылған.

✓Рәсәй Федерацияһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығының бойороғо буйынса, киҫкен респиратор вирус инфекцияһын дауалағанда антибиотиктар ҡулланылмай. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына билдәле булыуынса, Һаулыҡ һаҡлау министрлығының яңы стандарттарына ярашлы, антибиотиктар ОРВИ-ҙы дауалау өсөн Рәсәй биләмәһендә теркәлгән дарыуҙар исемлегенән алып ташланған. Шуның менән бергә исемлек башҡа препараттар, мәҫәлән, кагоцел иҫәбенә киңәйтелгән.

*✓ "Һыу ҡайтҡас, уны лабораторияға алып барып тикшертергә, таҙартырға, дезинфекция үткәрергә кәрәк, шунан һуң ғына эсергә мөмкин, сифатты муниципалитеттар менән берлектә контролдә тотабыҙ", - ти Анна Казак.*



ҠЫҪҠАСА

# КҮП БАЛАЛЫЛАРҒА...

**Рәсәйҙә ипотеканы ҡаплау өсөн күп балалы ғаиләләргә ярҙам программаһының оҙайтылыуы ихтимал.** Тейешле закон проекты Дәүләт Думаһына индерелгән, тип хәбәр итте парламент рәйесе Вячеслав Володин. Закон проекты советтың алдағы ултырышында ҡарала һәм артабан пленар ултырышта өҫтөнлөклө тәртиптә фекер алышыуға сығарыла, тип билдәләне спикер. "Закон проекты Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһен тормошҡа ашырыу маҡсатында әҙерләнгән. Дәүләт башлығы өсөнсө йәки артабанғы балалары тыуған ишле ғаиләләрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн дәүләттән 450 мең һум аҡса алыу мөмкинлеген булдырырға ҡушты, - тине Вячеслав Володин. - Дәүләт Думаһы балалы ғаиләләргә ярҙам сараларын киңәйтеү өҫтөндә эҙмә-эҙлекле эшләй. Программаны йәнә ете йылға оҙайтыу - мөһим ҡарар, был күп балалы ғаиләләр өсөн торлаҡ алыу кимәлен күтәрергә тейеш".

✓ **Башҡортостанда 16 июндә милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуған көнөнә ҡарата "Салауат ере" тарихи-мемориаль паркын асыу һәм "Салауат йыйыны" республика фольклор байрамын уҙғарыу планлаштырыла.** Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы белдерҙе. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев Салауат районында "Салауат ере" мемориаль паркының әҙерлеге хаҡында һөйләне: "Бер аҙна элек урында подрядсы менән бергә ойоштороу комитеты ултырышын үткәрҙек. Яҡшы итеп әҙерләнеп өлгөрөрбөҙ, тигән ышаныс бар. Юлы ла, урыны ла һәйбәт. "Аҡса бүлдек, туристар өсөн күркәм урын барлыҡҡа килә. Иң мөһиме - геройыбыҙҙың тыуған ерен хөрмәтләп иҫкә алабыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓ **Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Анна Казак белдереүенсә, пляж миҙгеле рәсми рәүештә асылғанға тиклем һыу инеү хәүефле.** "Һыуға һәм ҡомға экспертиза, лаборатор тикшереүҙәр үткәрелгәс кенә республиканың барлыҡ пляждарына Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығынан һәм Роспотребнадзорҙан рөхсәт ҡағыҙҙары тапшырыла. Ҡырағай урындарҙа һыу инеү йоғошло сирҙәр, эсәк инфекцияларын ҡуҙғытыусылар һәм паразиттар менән "осрашыу" хәүефе менән янай", - тип иҫкәртте ведомство етәксеһе.Эксперт һүҙҙәренсә, яҙғы ташҡын осоронда һыу аҫтында ҡалған шәхси ҡоҙоҡтар, скважиналар һәм башҡа объекттарҙағы һыуҙы ла көнкүрештә ҡулланырға ярамай. "Һыу ҡайтҡас, уны лабораторияға алып барып тикшертергә, таҙартырға, дезинфекция үткәрергә кәрәк, шунан һуң ғына эсергә мөмкин, сифатты муниципалитеттар менән берлектә контролдә тотабыҙ. Әгәр бындай мөмкинлек юҡ икән, граждандарға һыуҙы ҡайнатып эсергә һәм файҙаланырға кәңәш ителә", - ти Анна Казак.

✓ **Рәсәй һанлы үҫеш, бәйләнеш һәм киң мәғлүмәт саралары абоненттарға реклама менән шылтыратыуҙарҙы тыйыусы закон проекты әҙерләгән.** Был турала Мәскәүҙә үткән "Телеком Будущего" конференцияһының пленар ултырышында ведомство башлығы Мәҡсүт Шадаев белдерҙе. Уның билдәләүенсә, рәсәйҙәр былай ҙа бындай шылтыратыуҙарға кире ҡарашта, шуға ла уларҙы тыйыуҙы законлаштырыу мөһим. Һүҙ роботтар тарафынан яһалған спам-шылтыратыуҙар тураһында бара. Апрель башында Рәсәй Президенты Владимир Путин спам-шылтыратыуҙар һәм тулы хаҡы күрһәтелмәгән кредиттар рекламалаған өсөн яза ҡаралған законға ҡул ҡуйғайны. Уға ярашлы, юридик шәхестәргә штраф күләме 1 миллион һумға (элек 500 мең һум) етеүе ихтимал. Физик шәхестәргә штраф күләме 10 меңдән 20 меңгә, вазифа биләүсе шәхестәргә 20 меңдән 100 мең һумға тиклем етәсәк.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫ БӘЙЛӘНЕШТӘР



**Ташкентта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Үзбәкстандың премьер-министры Абдулла Арипов менән осрашты. Яҡтар артабан берлектәге эш йүнәлештәрен тикшерҙе.**

Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында ике яҡлы тауар әйләнешенең тарихта иң яҡшыларҙың береһе булыуын билдәләне. Үзбәкстан Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнешендә бишенсе урынды биләй. "Шул уҡ ваҡытта үҫеш өсөн ҙур мөмкинлек бар икәнен күрәбеҙ, - тип өҫтәне Башҡортостан Башлығы. - Сауҙа мөнәсәбәттәрен үҫтереү менән бер рәттән, сәнәғәт кооперацияһын формалаштырырға ынтылабыҙ. Ташкент өлкәһендә берлектәге технопарк асырға йыйынабыҙ. Уны ойоштороу форматтарының береһе - Үзбәкстан биләмәһендә үҙебеҙҙең "Алға" махсус иҡтисади зонаһы филиалын асыу. Бизнес эшенә лә булышлыҡ итәсәкбеҙ. Үзбәк эшҡыуарҙары Благовещенда автомобиль транспорты өсөн газ баллондары етештерә башларға ниәтләй. Газ-мотор яғыулығы баҙарының үҫеүенә бәйле был продукцияға ихтыяж ҙур. Беҙ республика делегацияһы составына Үзбәкстан баҙарына сығырға әҙер булған компания етәкселәрен дә индерҙек".

Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, уҙған ике йылдағы әүҙем эш Үзбәкстан менән мөнәсәбәттәрҙең яңы этабын үҫтереү өсөн яҡшы база әҙерләне. Ташкентҡа сәфәр йомғаҡтары буйынса республика үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе нығытыу буйынса яңы килешеүҙәргә өлгәшә алыр, тип ышана Башҡортостан Башлығы.

# ИНВЕСТОРҘАР АҠСАҺЫНА...

**Сибайҙа үткән VI "Урал Аръяғы-2024" бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы барышында 103 миллиард һумдан ашыу инвестиция күләме менән 50 килешеү төҙөлгән.**

Бөгөн был әлегә пландар һәм ниәттәр генә, әммә иртәгә ҡултамғалар менән нығытылған проекттарҙың күбеһе тормошҡа ашырыла башлаясаҡ. Ә был тәү сиратта төбәктә яңы эш урындары булдырыу, хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы һәм, әлбиттә, республика бюджетына өҫтәмә керемдәр. "Республикала ер тик торорға тейеш түгел. Уны файҙаланырға, унда предприятиелар, заводтар төҙөргә кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, бынан алда Рәсәй Президенты Владимир Путин ил төбәктәренең санкциялар шарттарында ниндәй көскә таянырға тейешлеген күрһәтте. Уңышлы үҫеш өсөн субъект башлыҡтарына бизнес менән әүҙемерәк эшләргә һәм уларҙы сит илдәрҙә түгел, ә Рәсәйгә аҡса һалырға этәрергә кәрәк, тине дәүләт башлығы. Бының өсөн урындағы властарҙың эшҡыуарҙар һәм инвесторҙар алдындағы йөкләмәләрен нығытыусы инвестиция стандарты индерелде.

Беҙҙең республика, ысын мәғәнәһендә, тиҙлек менән алға бара. Үткән биш йыллыҡта инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингында беҙ 12 позицияға ҡырҡа алға киттек һәм бөгөн илдә дүртенсе урынды биләйбеҙ.

Стратегик инициативалар агентлығы етәксеһе Светлана Чупшева билдәләүенсә, Башҡортостан инвестиция күләме буйынса Рәсәйҙең 15 Топ-төбәгенә ингән. Мәғлүмәт өсөн: 2019-2023 йылда республикаға 2 трлн 300 миллиард һумдан ашыу капитал һалынған.

Пленар ултырышта сығышында Радий Хәбиров төрлө илдәр менән хеҙмәттәшлек булдырыу мөһимлеген, Төркиә, Үзбәкстан, Ҡытай һәм Беларусь Республикаһы менән иҡтисади мөнәсәбәтте һыҙыҡ өҫтөнә алды.

"Рәсәй Президенты Владимир Путиндың май указдарын анализлап, күп йүнәлештәр буйынса республикала яҡшы нигеҙ һалыныуын күрәбеҙ. Һәм Башҡортостан үҙендә кисергән инновациялар һуңынан башҡа төбәктәргә лә уңышлы таратыла. Был - тормош өсөн иң яҡшы төбәк һәм юлдың дөрөҫ һайланғанына тағы бер дәлил", - тип йомғаҡ яһанылар булып үткән сарала.

# ЯНҒЫН ХӘҮЕФЕ БАР

**Башҡортостандың янғын хәүефе янаған райондары билдәләнде, улар Урал аръяғының урман зонаһында урынлашҡан. Атап әйткәндә, Белорет һәм Әбйәлил райондары. Был турала "Башинформ" агентлығында йәйге миҙгелгә әҙерләнеүгә арналған матбуғат конференцияһында белдерҙеләр.**

Мартта тикшереү үткәрелгәндән һуң республика янғын йәһәтенән хәүефле миҙгелгә әҙер тип табылды. Уттың тиҙ таралыу хәүефенә бәйле айырыуса иғтибар талап иткән 186 ауыл билдәләнде. Уҙған миҙгелдә Башҡортостанда ут менән һаҡһыҙ эш итеү буйынса өс енәйәт эше һәм 2 меңдән ашыу административ эш ҡуҙғатылған. Сүп-сар яндырған туристар, балыҡсылар, хатта участка хужалары закон боҙоусылар булып иҫәпләнә, тип билдәләне Рәсәй Граждандар оборонаһы эштәре, ғәҙәттән тыш хәлдәр һәм стихиялы бәлә-ҡаза эҙемтәләрен бөтөрөү эштәре министрлығының Башҡортостан буйынса баш идаралығы етәксеһенең беренсе урынбаҫары Эдуард Иҙрисов. "Сәбәптәре һәр саҡ асыҡлана. Ғәйеплеләрҙе табабыҙ. Ҡаралтылар янған осраҡта енәйәт эшен ҡуҙғатыу өсөн зыян күләме 200 мең һумдан ашыу тәшкил итергә тейеш, - тине спикер. - Әгәр күршегеҙҙең йәки яллаған эшсегеҙҙең ғәйебе менән зыян килтерелһә, суд тәртибендә мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Хәүеф артыуға бәйле штрафтар ҙа арта. Уҙған миҙгелдә бөтәһе 10 миллион һум штраф һалынған. Башҡортостанда июль аҙағы, август янғын буйынса хәүефле айҙар иҫәпләнә".

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан шахматсыһы Ләйлә Табермакова халыҡ-ара мастер статусын яуланы. Донъя шахмат федерацияһы Өфөнөң "Толпар" клубы спортсыһына "Ҡатын-ҡыҙ ФИДЕ мастер" тигән абруйлы исем бирҙе. Ләйлә Табермаковаға 15 йәш, яҡташыбыҙ - Башҡортостан тарихында юғары халыҡ-ара статусҡа эйә булған иң йәш шахматсы. Яңыраҡ Ләйлә Табермакова йәштәр араһында Рәсәй беренселегендә еңеүсе булды. Шулай уҡ спортсы ҡыҙҙар араһында уҙған Азия чемпионатында беренсе урынды яуланы. Бынан тыш, быйыл Ләйлә Табермакованы илдең иң яҡшы спортсылары иҫәбенә индерҙеләр.

✓"ЛизаАлерт" эҙәрмәндәр отряды ирекмәндәре быйыл апрелдә юғалған һәм табылған кешеләр буйынса статистика мәғлүмәттәрен баҫтырып сығарҙы. Ирекмәндәр мәғлүмәте буйынса, бер ай эсендә отрядҡа республика буйынса юғалған кешеләрҙе эҙләүгә 63 ғариза килгән. Уларҙың 43-ө тере, 5-һе һәләк булған. "Әлегә табылмағандарҙы эҙләү дауам итә: ориентирҙар таратыла, дәлилдәр тикшерелә. Әгәр яҡынығыҙ юғалһа, ваҡытығыҙҙы юғалтмағыҙ, полицияға һәм бушлай "ЛизаАлерт"тың 8(800)700-54-52 ҡыҙыу линия телефонына (тәүлек әйләнәһенә) мөрәжәғәт итегеҙ", - ти эҙләүселәр.

✓Рәсәй банкы "Хеҙмәт батырлығы ҡалалары" серияһында яңы 10 һумлыҡ тимер аҡсалар сығарҙы. Серияны Пермь, Һамар, Һарытау һәм Томск ҡалалары һүрәтләнгән тәңкәләр тулыландыра. Хәбәр ителеүенсә, 2024 йылда Өфөнөң 450 йыллығына - көмөш, ә 2025 йылда Өфөгә хеҙмәт батырлығы ҡалаһы булараҡ бағышланған ҡиммәтле булмаған металдарҙан эшләнгән тәңкәләр сығарыу планлаштырыла.

✓Рөстәм Хәмитов Өфөнөң Орджоникидзе районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Быға са ул ҡаланың коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығын етәкләне. Был хаҡта Өфө мэры социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ошо көндәрҙә 2022 йылдан Орджоникидзе районы хакимиәтен етәкләгән Альберт Маликовтың үҙ вазифаһын ҡалдырыуы билдәле булды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ ***"Үткәндәр тураһындағы хәтеребеҙҙе һаҡлап ҡына беҙ балаларыбыҙҙы киләсәктең ысын ватансылары итеп тәрбиәләй аласаҡбыҙ", - тип һығымта яһаны Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы директоры Ришат Сабитов.***



*ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!*



## САҠРЫМДАРҒА ҺУҘЫП...

**Быйыл "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проектын ғәмәлгә ашырыу барышында, шулай уҡ Башҡортостандың юл фонды субсидиялары иҫәбенә Өфөлә 50 саҡрым күләмендә юлдар ремонтланасаҡ.**

Был хаҡта үҙенең телеграм-каналында баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев хәбәр итте: "Ремонтлана торған участкалар теҙмәһе былтыр уҡ билдәләнгәйне, әммә Радий Хәбировтың булышлығы менән тағы ла 5 ремонт талап ителгән участкаға - Октябрь һәм Салауат Юлаев проспекттары, Цюрупа, Баҡалы һәм Маршал Жуков урамдары өсөн өҫтәлмә финанс бүленде. Яҡын арала подряд ойошмаларын билдәләйбеҙ һәм эштәрҙе башлап ебәрәбеҙ.

## ЯБЫП ТОРАЛАР

**БР Транспорт һәм юл хужалығы министрлығы хәбәр итеүенсә, Өфөлә 31 июлгә тиклем Сочи урамынан Пугачев урамына төшөү юлының ябылып тороуы оҙайтыла.**

Был төшөү юлы 10 апрелдә ябылып, 26 майҙа асылырға тейеш булған. Әммә юлды ремонтлауҫы подряд ойошмаһы технологик процестар көткәндән оҙағыраҡҡа ваҡыт аласағын асыҡлаған. Транспорт хәрәкәте был арауыҡта элегерәк раҫланған схема буйынса башҡарыла. Әле һүҙ барған юл участкаһында сикләүҙәр, Өфө ҡалаһының 450 йыллығына әҙерлек эштәре сиктәрендә, "Көньяҡ ҡапҡа" инфраструктура проектын ғәмәлгә ашырыу маҡсатында индерелгәйне. Элек хәбәр итеүебеҙсә, Генерал Рыленко урамы төҙөкләнделә, Пугачев урамына реконструкция уҙғарыла, ә был урамдар киҫешкән урында транспорт үткәргесе төҙәлә.

## КӘРӘКЛЕ ХЕҘМӘТ

**Өфө эргәһендә "Затон" яңы көнкүреш хеҙмәтләндереү комплексы төҙөлә. Инвестицияларҙың дөйөм күләме - 310 миллион һум. Проект өҫтөнлөклөләр исемлегенә индерелгән. Уны бойомға ашырыу өсөн инвестор ерҙе сауҙаһыҙ ҡуртымға алырға мөмкин.**

Яңы комплекс Өфө районының Михайловка ауылы янында, М-7 "Волга" федераль трассаһы буйында. Проекттың инициаторы - "Альянс-Р" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт. Комплекста химик таҙартыу, мебель һәм йорт кәрәк-яраҡтарын ремонтлау, бөҙрәхана, матурлыҡ салондары хеҙмәттәрен күрһәтеү ҡаралған. Бында шулай уҡ көнкүреш тауарҙары магазиндары, дарыухана, дөйөм туҡланыу пункты, еңел һәм ауыр йөк машиналары өсөн туҡталҡа, комплексҡа килеүселәр өсөн ял итеү урындары һәм электр автомобилдәрен заправкалау пункты эшләйәсәк. Проекты тормошҡа ашырыу Михайловка ауылында 15 яңы эш урыны булдырырға мөмкинлек бирәсәк. Компания төҙөлөштө 2026 йылда тамамларға ниәтләй, тип хәбәр итте республиканың сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев.

## ВАТАНСЫЛАР ШУЛАЙ ТӘРБИӘЛӘНӘ

**Өфө сауҙа-иҡтисад колледжында "Бөйөк Ватан һуғышында Башҡортостандың яу ҡаһарманлығы" тигән II Асыҡ фәнни-ғәмәли конференция уҙғарылды. Ул Советтар Союзы Геройы Георгий Ветошников иҫтәлегенә арналды.**

Конференция эшендә 120-нән ашыу кеше ҡатнашты. Бында дәүләт һәм муниципаль власть органдарынан, мәҙәниәт учреждениеларынан, юғары һәм урта профессиональ белем биреү ойошмаларынан вәкилдәр килгәйне. "Беҙ проектҡа Башҡортостан Фәндәр академияһы, БР Архив эштәре идараһы, Республиканың Хәрби Дан музейы, Рәсәй хәрби-тарихи ойошмаһының республика бүлексәһе, БР мәғарифының ветерандар Советы, БР Милли музейы, Хәрби хәрәкәттәр ветерандарының Башҡортостан союзы, БР Мәғарифты үҫтереү институты, Ә.-З. Вәлиди ис. Милли китапхана, Өфө фән һәм технологиялар университеты, Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжы, Өфө технология һәм дизайн колледжы, Сибай күп профилле колледжы, Стәрлетамаҡ күп профилле һөнәри колледжы, Өфө фән һәм технологиялар университеты колледжы вәкилдәренең конференция эшендә әүҙем ҡатнашыуы өсөн бик шатбыҙ", - тип белдерҙе ойоштороусылар.

Конференцияла ҡатнашыусылар сараға юғары баһа бирҙе. "Бөгөнгө докладтар һәм фекер алышыуҙар беҙгә ватандаштарыбыҙҙың Ватан азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон һаҡлағанда күрһәткән ҡаһарманлығын һәм фиҙаҡәрлеген тәрәнерәк аңларға һәм баһаларға ярҙам итер, тип ышанысลы рәүештә әйтә алам", - тине Өфө ҡалаһы ҡала округы советы рәйесенең беренсе урынбаҫары Александр Мельников. БР Архив эштәре идаралығы начальнигы Илһам Фәтҡуллин әйтеүенсә, "Катнашыусылар тарафынан тәҡдим ителгән тикшеренеү эштәре батырҙар ҡаһарманлығын мәңгеләштереүгә булышлыҡ итәсәк, артабанғы ғилми тикшеренеүҙәргә илһамландырасаҡ".

Сығыштарҙа Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарының фронттағы ҡаһарманлығы, хеҙмәтсәндәрҙең тылдағы фиҙаҡәрлеге хаҡында мәғлүмәттәр килтерелде, һуғыш ваҡытында һөнәри белем учреждениеларының эшмәкәрлеге тураһында бөйөн ителде. Архив хеҙмәткәре, билдәле тарихсы Азат Ярмуллиндың "Шайморатовсылар - легендар 112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙары" халыҡ проекты хаҡындағы сығышы ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. "Үткәндәр тураһындағы хәтеребеҙҙе һаҡлап ҡына беҙ балаларыбыҙҙы киләсәктең ысын ватансылары һәм үҙ иленең тоғро граждандары итеп тәрбиәләй аласаҡбыҙ", - тип һығымта яһаны Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы директоры Ришат Сабитов.

*"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ*

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## ТИМЕРҒАЗИН ҠАДИР РӘХИМ УЛЫ

Ҡ.Р. Тимерғазин - нефтсе-геолог. Башҡорттарҙан тәүге геология-минералогия фәндәре докторы, йәмәғәт һәм дәүләт эшмәкәре. Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы рәйесе.

Ҡадир Тимерғазин 1913 йылдың 5 февралендә Пермь губернаһы Шадринск өйәҙе Аҡсыуаш ауылында (хәҙерге Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Сабаҡкүл (Аҡсабаҡ) ауылы) ярлы крәҫтиән ғаиләһендә туғыҙынсы бала булып тыуған. 14 йәшендә ата-әсәһенән ҡасып китеп, Арғаяштағы интернат-мәктәпкә уҡырға инә.

1930-1935 - Ҡаҙан университетының геология факультетында уҡый.

1935-1937 - Башнефтекомбинаттың Үҙәк фәнни-тикшеренеү лабораторияһының эксперименталь промысла геологияһы лабораторияһында эшләй.

1937-1941 - "Башнефть" берекмәһенең Үҙәк фәнни лабораторияһының геология кабинеты начальнигы.

1941-1943 - Ҡыҙыл Армия сафтарында: Монголияла Байкал арьяғы фронтының артиллерия взводы командиры, Ашхабад ҡалаһындағы ике йыллыҡ Хәрби-юридик академия курсанты.

1943-1946 - 1-се Беларусь фронтының 397-се уҡсылар дивизияһы составында Белоруссияны, Балтик буйын, Польшаны азат итеүҙә, Көнсығыш Германияны алыуҙа, Берлинды штурмлауҙа ҡатнаша. Германияла Совет Армияһы сафтарында хеҙмәт итә.

1946-1947 - "Башнефть" Үҙәк фәнни- тикшеренеү институты директоры (һуңынан Өфө нефть фәнни-тикшеренеү институты тип атала). 1947-1950 - Өфө нефть фәнни-тикшеренеү институтының литология һәм геохимия лабораторияһы мөдире.

1950-1951 - Өфө нефть фәнни-тикшеренеү институтының геология бүлеге начальнигы.

1951-1953 - СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тау геологияһы институты директоры, һуңынан ошо институттың нефть һәм газ лабораторияһы мөдире.

1958 йылда геология-минералогия фәндәре буйынса докторлыҡ диссертацияһын яҡлай.

1959-1963 - БАССР Юғары Советы депутаты һәм уның Президиумы рәйесе.

1960 йылдан профессор. 70 фәнни хеҙмәт авторы.

1963 йылда РСФСР Юғары Советы депутаты итеп һайлана.

1963 йылдың 4 апрелендә Мәскәүҙә вафат була.

Наградалары: II дәрәжә Ватан һуғышы, "Ҡыҙыл йондоҙ", ике тапҡыр "Почёт билдәһе" ордендарына, " Варшаваны азат иткән өсөн", "Берлинды алған өсөн", "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Германияны еңгән өсөн", "Фиҙаҡәр хеҙмәт өсөн" миҙалдары менән бүләкләнә. РСФСР-ҙың атҡаҙанған фән һәм техника эшмәкәре. Өфө ҡала округының Нуғай ауылы урамына Ҡадир Тимерғазин исеме бирелгән.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Атеросклероз

❖ Атеросклероздан 100 грамм таҙартылған һәм ҡырғыстан үткәрелгән һарымһаҡҡа 6 лимон һутын ҡушып, шешәгә ҡойорға һәм ауыҙына бөкө тығырға. Һалҡын урында һаҡларға, көнөнә 1-әр балғалағын 1 стакан йылы һыуға ҡушып эсергә.

❖ Ҡырғыстан үткәрелгән 1 лимон һәм 1 баш һарымһаҡҡа 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. Ауыҙы ябыҡ һауытта 2 тәүлек төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Ярты лимон һутына 1/4 стакан ҡайнатылған һыу, 1 балғалаҡ бал ҡушып, көн һайын йоҡлар алдынан бөтөргәнсе эсергә.

❖ 1-әр балғалаҡ лимон һуты, бал һәм көнбағыш майын ҡушып, ас ҡарынға эсергә.

### Ҡауаҡ

❖ Сәс ҡойолһа, баш ҡауаҡлаһа ҡыҙыл көртмәле емеше бешкән йылымыс һыуҙа башты сайырға. Баш тиреһенең ҡысыуын баҫа һәм ҡауаҡты бөтөрә.

### Йоҡоһоҙлоҡ

❖ 1 стакан ҡайнатылған йылымыс һыуға 1 лимон һуты һәм 2 балғалаҡ бал ҡушырға. Йоҡлар алдынан эсергә.

### Йөрәк һәм нервы

❖ Берәр өлөш валериана тамырын, арыҫлан ҡойроғо үләнен, аҡ әнис (тмин) орлоғон, фенхель орлоғон бергә ҡушырға. Йыйылманың 2 ҡалағына 2 стакан (400 грамм) ҡайнар һыу ҡойоп, һыуынғансы төнәтергә. Төнәтмәне нервылар ҡуҙғыһа, йөрәк дөпөлдәп типкәндә, йоҡлай алмай яфаланғанда көнөнә 3 тапҡыр 50-шәр мл эсергә. Бер нисә көн эсеү ҙә хәлде яҡшырта.

### Ауыҙ боҙолғанда

❖ Ауыҙ боҙолғанда (стоматит, пародонтоз осраҡтары) 10 грамм киптерелгән ҡыҙыл көртмәле япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, быуҙа тағы ла 30 минут ҡайнатырға һәм һыуытып һөҙөргә. Баштағы күләменә еткергәнсе һыу өҫтәп ҡойорға. Ауыҙҙы 2-3 сәғәт һайын сайҡатырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Был байрамға Әбйәлилдән махсус килдем. Китап уҡырға яратыусы булараҡ та, билдәле шәхестәрҙең сығыштарын тыңлау ниәтенән дә ялдарымды ошо йәрминкәлә үткәрҙем.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡор ҡарсығаһы

**(Тетеревятник)**



Ҡор ҡарсығаһы менән беҙ ҡарсығалар төркөмөн башлап ебәрәбеҙ. Ҡарсығалар эре һәм уртаса ҙурлыҡтағы ҡоштар, ҡойроғо оҙон, түшендә буй-буй һыҙаттары менән айырылып тора. Ғәҙәти ҡош, тик йәшерен йәшәү рәүеше алып барғанлыҡтан, бик күренеп бармай.

Ҡор ҡарсығаһы ҡарғанан саҡ ҡына ҙурыраҡ. Арҡаһы ҡара күкһел, ҡойроғоноң аҫты ҡара, түше буй һыҙатлы. Ҡашы - аҡ, тәпәйҙәре һәм күҙҙәре һары. Осоп барғанда ҡанаттарының киңлеге яҡынса 1 метр. Тауышы сағыу, көслө, "ҡъяҡ, ҡъяҡ, ҡъяҡ" тип ишетелә.

Башлыса ҡоштар - тумыртҡалар, күгәрсендәр, селдәр, ағуналар, сыйырсыҡтар, шулай уҡ ваҡ кимереүселәр, тейендәр, ҡуяндар менән туҡлана.

## Ваҡ ҡарсыға

**(Перепелятник)**



Күгәрсен кеүек ҙурлыҡта. Ата ҡоштоң арҡаһы күкһел, муйынында аҡ таптары бар, аҫтан ҡарағанда ул аҡһыл, көрән йә ерән һыҙатлы булып күренә, сикәләре - ерән. Инә ҡоштоң ҡашы һәм муйыны аҡ. Тауышы көслө, "кик-кик-кик" тип һыҙғыра.

Рәсәйҙең күпселек урманлы һәм урманлы-парк өлөшөндә осрай, ҡайһы берҙә ауыл һәм ҡалалар тирәһендә лә күренә. Ваҡ ҡоштар, эре бөжәктәр, кимереүселәр менән туҡлана. Өфөнөң "Йәшел сауҡалыҡ" микрорайонында ваҡ ҡарсығаның йорт балкондары эргәһендә турғай тотҡанын күҙәтергә мөмкин. Иғтибарлап ҡараһағыҙ, уның үҙен ҡарғалар тауышланып баҫтырғанын да күрерһегеҙ.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Ысынлап та шулай тип аптырарлыҡ булды шул Өфөлә үткән икенсе Халыҡ-ара "Китап-байрам" йәрминкәһе ваҡытында. Өс көн буйы барған был сараға халыҡ эркелеп килде, баш ҡаланың Совет майҙаны гөж килеп торҙо. Китаптар һатылған төрлө павильондарҙа сираттар пәйҙә булды.**

# АҺ-АҺ, БЕҘҘЕҢ ХАЛЫҠ...

## китап уҡый икән дәһә!



Быйыл был байрам баш ҡаланың 450 йыллыҡ юбилейына арналды һәм күп төрлө сараларға бай булыуы менән айырылып торҙо. Ысын мәғәнәһендә халыҡ байрамына әйләнгән "Китап-байрам"да республиканан һәм Рәсәйҙән генә түгел, ә Беларусь, Әзербайджан, Үзбәкстан, Тажикстан, Ҡаҙағстан һәм Ҡырғыҙстан илдәренән 230-ҙан ашыу нәшриәт, китап магазины, шәхси букинист ҡатнашты. Сараны яҙыусылар менән осрашыуҙар, сәнғәт белгестәре һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәренең матур, йөкмәткеле сығыштары биҙәне, ә кистәрен тамашасылар иғтибарына төрлө нәфис фильмдар һәм билдәле артистарҙың моноспектаклдәре тәҡдим ителде.

Әлбиттә, "Китап-байрамдың" төп геройы - китап. Уларҙың ниндәй генә төрө булманы байрамда - балалар өсөн тәғәйенләнгәне, әҙәби китаптар, психологияға арналғаны, аш-һыу менән таныштырғаны, финанс серҙәрен асҡаны һәм башҡалар. Ғөмүмән, йәнең теләгән китапты һайлап алыу мөмкинлеге биреүе менән мәртәбәле сара булды "Китап-байрам".

- Был байрамға Әбйәлилдән махсус килдем. Китап уҡырға яратыусы булараҡ та, билдәле шәхестәрҙең сығыштарын тыңлау ниәтенән дә һәм, иң мөһиме, киләһе уҡыу йылына балаларға ташламалы хаҡтар менән уҡыу әсбаптары алырға теләп, ялдарымды ошо йәрминкәлә үткәрҙем. Сара шул тиклем матур ойошторолған. Ауылда телевизор экрандары аша ғына ҡарап ултырған үҙебеҙҙең башҡорт яҙыусылары менән аралаштым, автографтары менән китаптарын һатып алдым, яңы әҙәби әҫәрҙәренең презентацияларында булдым, ғөмүмән, рухи яҡтан байып, йәшәү дәрте алып ҡайттым, - тип үҙенең тәьҫораттары менән бүлеште Сания Хәбибуллина.

Йәрминкәлә балаларға тәғәйенләнгән, улар өсөн нәшер ителгән, кескәйҙәргә аңлайышлы тел менән яҙылған әҙәбиәттең етерлек булыуы шатландырҙы. Айырыуса башҡорт телендәге китаптарҙың төрлө булыуы һөйөндөрҙө. Башҡорт халыҡ әкиәттәре тупланмалары, ижекләп уҡыу өсөн тәғәйенләнгән һәм буяу өсөн китаптары, төҫтәр, һандар, йәнлектәр, ағастар һәм башҡа әйберҙәрҙе һәм күренештәрҙе өйрәнеү китаптары һәм башҡаларын тәҡдим иткән өҫтәлдәр эргәһенән халыҡ өҙөлмәне. Бигерәк тә балаларын эйәртеп килгәндәрҙең китап кәштәләре янынан буш ҡул менән китә алмауын, балаларының теге йәки был китапты тотоп, ҡыҙыҡһынып асып ҡарап, атай-әсәйҙәрен уларҙы һатып алырға өндәүен күҙәтеп тороу күңелле ине.

Бер нисә сәхнәлә өҙлөкһөҙ барған әҙәби сағыу сығыштар, төрлө оҫталыҡ дәрестәре, башҡорт әҙәбиәтенең сағыу йондоҙҙары, донъя кимәлендә билдәлелек яулаған яҙыусылар, артистар менән осрашыуҙар байрамды йәнләне һәм йәмләне. Оҫталыҡ дәрестәренең мәктәп уҡыусыларына ғына түгел, ә кескәйҙәр өсөн генә тәғәйенләнеп ойошторолоуы, төрлө йәштәге балаларға ҡыҙыҡлы итеп үткәрелеүе айырым маҡтауға лайыҡ. Ә балалары ҡул эше менән булған йәки өҫтәл уйындарында ҡатнашҡан арала атай-әсәйҙәр психолог менән осрашыу, балаларға финанс тәрбиәһе биреү семинарҙарында ҡатнашыу, концерт ҡарау мөмкинлегенә эйә булды. Ғөмүмән, сара балаларға ла, ололарға ла берҙәй ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс һәм файҙалы итеп ойошторолоуы менән айырылып торҙо.

Быйылғы "Китап-байрам"дың илһөйәрлек тойғоһо менән һуғарылған булыуы асыҡ сағылды. Совет майҙанындағы меңәрләгән китап араһында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға арналған әҙәбиәттең күплеге, шулай уҡ һалдаттарға оҙатыу өсөн китап йыйыуҙы ойоштороу һәм байрамда ҡатнашыусылар тарафынан хәрбиҙәргә изге теләктәр менән һуғарылған хаттар яҙыуҙы ойоштороу тап ошоно дәлилләне.

Байрам сиктәрендә баш ҡалала беренсе тапҡыр Николай Иванов етәкселегендә Рәсәй Яҙыусылар союзының "Халыҡтар дуҫлығы - әҙәбиәттәр дуҫлығы" пленумы уҙҙы. Шулай уҡ милли нәшриәттәр менән һәм "Әҙәби бәйләнештәр: Башҡортостан - Беларусь" түңәрәк өҫтәлдәре, "Зәйнулла Рәсүлев мираҫы - Башҡортостан һәм Дағстан халыҡтары араһында хеҙмәттәшлекте тәрәнәйтеү" ғилми-ғәмәли конференцияһы, "Берҙәмлектә - көс!" әҙәби сәғәте һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзының 90 йыллығын байрам итеү ойошторолдо.

Сара сиктәрендә республика музей һәм китапханалары байрамға килеүселәргә төрлө темаға арналған күргәҙмәләр тәҡдим итте. Мәҫәлән, Башҡортостан Милли музейының "Өфө: 450 бит тарих" күргәҙмәһендә баш ҡаланы өйрәнеүселәрҙең биографияһы менән танышырға, шулай уҡ ошо теманы яҡтыртҡан ҡулъяҙмаларҙың төп нөсхәләрен һәм һирәк осрай торған китаптарҙы күрергә мөмкин ине. Күргәҙмә алдағы көндәрҙә лә үҙ эшен дауам итә.

Икенсе "Китап-байрам" 170 меңдән ашыу кешене йыйған. Был, ысынлап та, китап йәрминкәһенең халыҡ тарафынан көтөп алынған һәм йылы ҡабул ителгән сара икәнлеген иҫбатлай. Ул уҙған аҙнаның ғына түгел, ә тотош йылдың иң ҙур һәм киң ҡоласлы мәҙәни байрамы булып тарих биттәренә яҙылды.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ҠЫҢҒЫРАУ СЫҢЛАТЫП...



**Уҙған аҙнала Башҡортостан район һәм ҡалаларында "Һуңғы ҡыңғырау" байрамдары уҙҙы. Быйыл республикала 11-се синыфты 15,5 мең уҡыусы тамамланы, шуларҙың 4385-е - Өфөлә. Һуңғы ҡыңғырау һәр мәктәп уҡыусыһы өсөн мөһим һәм тулҡынландырғыс ваҡиға. Бер үк ваҡытта моңһоу ҙа, шатлыҡлы ла байрамды һәр уҡыусы көтөп ала, сөнки уларҙы төрлө һынауҙар һәм мөмкинлектәр менән тулы киләсәк көтә.**

Мәктәп менән хушлашыусы егет һәм ҡыҙҙарҙы республика Башлығы Радий Хәбиров ҡотланы: "Һеҙ оло тормош юлына аяҡ баҫаһығыҙ һәм үҙегеҙҙең яҙмышығыҙ өсөн үҙегеҙ яуаплылыҡ алаһығыҙ, ләкин беҙҙең өсөн һәр ваҡыт балалар булып ҡаласаҡһығыҙ. Ошо йылдар эсендә атай-әсәйҙәрегеҙ һәм уҡытыусылар һеҙгә төплө белем бирергә тырышты. Алда һеҙҙе дәүләт имтихандары көтә, уларҙы уңышлы итеп тапшырыуығыҙҙы һәм тормошоғоҙҙа барыһы ла яҡшы булыуын теләйем", - тине ул Өфөнөң "Ватан" паркында уҡыусылар алдында сығыш яһап.

Сығарылыш уҡыусыларына ата-әсәләр һәм уҡытыусылар ҙа үҙҙәренең изге теләктәрен еткерҙе. Дәрестәр һәм тәнәфестәр, контроль һәм өйгә эштәр менән үрелеп барған ун бер йыллыҡ уҡыу марафонына нөктә ҡуйған "Һуңғы ҡыңғырау" байрамы 11-се синыф сығарылыш уҡыусылары өсөн традицион вальс менән тамамланды. Ә был аҙнала иһә кисәге уҡыусылар Берҙәм дәүләт имтихандары тапшыра башланы. Имтихандар өсөн республикала 165 пункт ойошторолған.

24 май һуңғы ҡыңғырау шулай уҡ 9-сы синыфты тамамлаған 46 меңдән ашыу уҡыусы өсөн дә яңғыраны. Матур һәм ҡупшы кейемдәрҙәге ҡыҙҙар һәм егеттәр тыуған мәктәптәренә һәм уҡытыусыларына арнап йырҙар йырланы, шиғыр һөйләне. Һәр уҡыусының тормошонда ҙур һәм мөһим этаптың тамамланыуын символлаштырған байрам һағышлы ла, шатлыҡлы ла булды, тиҙәр улар. Кемдер көҙөн мәктәпкә кире ҡайтып, артабан уҡыясаҡ, ә ҡайһы берҙәре икенсе уҡыу йорттарында белем алыуҙарын дауам итәсәк. Ә әлегә - улар алдында ла имтихандарын уңышлы тапшырыу бурысы тора.

Һуңғы ҡыңғырау - яҡты хәтирәләр ҡалдырған иҫтәлекле байрам, тулҡынландырғыс тантана. Сығарылыш уҡыусыларының алдағы юлдары ла ошо байрам кеүек сағыу, эштәре - уң, аҙымдары ышаныслы булһын, тигән теләктә ҡалабыҙ.

6

# Мәғариф

31 май - 6 июнь
(һабанай - һөтай)
2024 йыл
№21 (1114)

"Киске Өфө"гәзитенең махсус бите

МӘҒАРИФ ХӘБӘРҘӘРЕ



## ТУҠЛАНЫУ ҘА МӨҺИМ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала мәктәп туҡланыуы системаһын үҙгәртеп ҡороу тураһында һөйләне. Республиканың мәктәп туҡланыуын ойоштороу тәжрибәһе бер нисә тапҡыр илдә иң яҡшы тәжрибә булараҡ танылды, тип билдәләне ул.**

"Беҙ был эште үҙгәртеүгә ирештек. Ләкин тынысланырға ярамай - мәсьәлә бик мөһим. Һөҙөмтәләрҙек эшләү өсөн беҙ республиканың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы ҡарамағында социаль туҡланыу идарылығын булдырҙыҡ. Идаралыҡ мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында, дауаханаларҙа туҡланыуҙы, шул иҫәптән халыҡтың мөрәжәғәттәре буйынса пландан тыш тикшереү үткәреү өсөн яуаплы. Ошондай тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, проблемалар бар әле. Әммә динамика бик яҡшы. Бер йыл эсендә ашнаҡсыларҙың ризыҡ әҙерләү технологияһын боҙоу осраҡтары һиҙелерлек кәмене", - тип яҙа ул социаль селтәрҙә.

Радий Хәбиров шулай уҡ аккредитацияланған лабораторияның эше тураһында иҫкә төшөрҙө. Беренсе кварталда унда социаль учреждениеларҙың ашханаларынан 1087 өлгөнө анализлағандар. "Беләм, ялыуҙар бар. Ҡайһылары аныҡ башҡарыусыларҙың, туҡланыуҙы ойоштороусыларҙың йәки ашхана хеҙмәткәрҙәренең эшләп еткермәүенә бәйле. Ҡайҙалыр баланың теләгенә тап килтерә алмайбыҙ, бында барыһы ла индивидуаль, - тине республика етәксеһе. - Иң мөһиме, бындай осраҡтар һирәк".

## КЛАСС ЕТӘКСЕҺЕНӘ...

**Республикаға класс етәкселәренә һәм кураторҙарға түләү өсөн 274 миллион һум аҡса бүленә.**

Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостанға мәктәптәрҙә класс етәкселәренә айлыҡ түләү өсөн 255,8 миллион һум һәм 100 меңдән аҙыраҡ халыҡ йәшәгән тораҡ пункттарҙағы техникумдарҙа һәм колледждарҙа төркөм кураторҙары өсөн 18,5 миллион һум бүлә. Ошо хаҡтағы бойороҡҡа Рәсәй Федерацияһы премьер-министры Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Ил төбәктәренә шуның өсөн бөтәһе 8 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелә.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 1 марттан түләү 5 меңдән 10 мең һумға тиклем арттырылды. Бындай ҡарар ил Президенты Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса ҡабул ителде.

## ТАШЛАМА КЕМГӘ?

**Рәсәйҙә халыҡ-ара турнир чемпиондарына юғары уҡыу йортона ингәндә льгота бирелә.**

Дәүләт Думаһы депутаттары икенсе уҡыуҙа халыҡ-ара ярыштарҙа еңеүселәргә юғары уҡыу йорттарына ингәндә льготалар биреү тураһында закон проектын ҡабул итте. Был хаҡта Дәүләт Думаһының физик культура һәм спорт буйынса комитетының телеграм-каналында хәбәр итә.Турнирҙар исемлеген Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте раҫлай. Закон проекты әлеге ваҡытта халыҡ-ара ярыштарҙа сығыш яһай алмаған илебеҙ спортсыларына ярҙам итеүгә йүнәлтелгән. Бынан тыш, документ спортсыларҙың карьераһын тамамлағандан һуң социаль яраҡлашыуын гарантиялай.

## УҠЫТЫУСЫЛАР ЕТЕШМӘЙ

**Луганск Халыҡ Республикаһының бөләкәй ауылдарында уҡытыусылар етешмәй. Шуға бәйле төбәктә тәүге тапҡыр "Ауыл уҡытыусыһы" проектын бойомға ашырыу башланды, унда Луганскиҙан тыш, Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәренән белгестәрҙе ҡатнашырға саҡыралар.**

Луганск Халыҡ Республикаһының мәғариф һәм фән министры вазифаһын башҡарыусы Евгений Мирошниченко билдәләүенсә, әле 200-ҙән ашыу ғариза килгән, улар иҫәбендә Башҡортостан уҡытыусылары ла бар. "Беҙ программала ҡатнашырға теләгән педагогтарҙың географияһы киң булыуын күрәбеҙ: Башҡортостан Республикаһы, Төньяҡ Осетия - Алания, Силәбе, Курск, Свердловск, Түмән һәм Иванов өлкәләре. Проекттың сайтында вакансиялар исемлеге баҫылған. Ауыл мәктәптәрендә тәү сиратта рус теле һәм әҙәбиәте, тарих, математика, физика, химия уҡытыусыларын көтәләр. Проектты тормошҡа ашырыу барышында 1 миллион һум күләмендә компенсация түләү ҡаралған", - тине Евгений Мирошниченко.

Луганск Халыҡ Республикаһы хөкүмәте хәбәр итеүенсә, проектта ҡатнашыу өсөн ғаризалар 2024 йылдың 31 майына тиклем ҡабул ителә.

## АЛТЫН, КӨМӨШ МИҘАЛДАР

**2024 йылда республика мәктәптәрен тамамлаусыларҙы мөһим яңылыҡ көтә:Башҡортостандың сығарылыш уҡыусыларына алтындан тыш, көмөш миҙалдар ҙа тапшырыла башлай.**

Мәғариф һәм фән министрының беренсе урынбаҫары Светлана Антипина хәбәр итеүенсә, һүҙ тик "бишле" билдәләренән торған аттестат алған уҡыусылар хаҡында бара. Эксперт мәғлүмәттәре буйынса, быйыл республикала бөтәһе 51 мең туғыҙынсы һәм 15,5 мең ун беренсе класс уҡыусыһы дәүләт аттестацияһына әҙерләнә.

## ИҒТИБАР БҮЛ!

**2023 йылдың сентябренән Башҡортостан мәктәптәрендә "Мин янында. Мин ярҙам итермен" проекты тормошҡа ашырыла. Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, проект уҡыусыларҙың һәм уҡытыусыларҙың шәкәр диабеты менән сирләү тураһында мәғлүмәтлелек кимәлен күтәреүгә, 1-се типтағы шәкәр диабеты менән сирләгән балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең психоэмоциональ торошон яҡшыртыуға булышлыҡ итеүгә һәм улар өсөн мәктәптә хәүефһеҙ йәшәү шарттары булдырыуға йүнәлтелгән.**

Проектта 800-ҙән ашыу уҡыусы, шул иҫәптән республиканың 30 мәктәбенән һәм өҫтәмә белем биреү учреждениеларынан 42 шәкәр диабеты менән сирләгән бала ҡатнашты. Унда "Диабет тураһында һөйләйем" темаһына лекция, "Дуҫыңа ярҙам ит" ролле уйындары, "Мин беләм" квиздары, кеше тәненең эске төҙөлөшөн, ашҡаҙан аҫты биҙе эшен күрһәткән саралар. Мәктәп уҡыусылары шәкәр диабетының нимә икәнен, уның төп билдәләрен генә түгел, ә гипогликемия менән бәйле хәлә насарайған класташына нисек ярҙам итергә кәрәклеген дә белде. Шулай уҡ улар педагогтар һәм ата-әсәләр менән бергә үткәрелгән саралар һөҙөмтәһендә алған белемдәре тураһында плакат-гәзит сығарҙы. Плакаттар мәктәптең һаулыҡ мөйөштәрендә урынлаштырылды.

"Быйыл, Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләрҙе хәстәрләү йылында, төрлө сәбәп менән һаулығы ҡаҡшаған кешеләр тураһында һөйләйәсәкбеҙ. Беҙ йәмғиәтебеҙҙә эргәбеҙҙә коляскала ултырған, насар ишеткән, һуҡыр кешеләр барлығына көйләйәсәкбеҙ. Беҙҙең бер йыл эсендә хәл ителмәгән мәсьәләләр бар, әммә уларҙы хәл итеү өсөн ниндәйҙер этәргес бирәсәкбеҙ. Ә артабан инерция буйынса барыһын да эшләйәсәкбеҙ, - тип һөйләне Радий Хәбиров блогерҙар менән осрашыуҙа. - Беҙ уларға уңайлы шарттар булдырыу менән шөғөлләнәсәкбеҙ. Был иң ябай ҡарарҙар. Мәҫәлән, беҙҙә пандустар булмаған подъездар байтаҡ. Беҙ подъездарҙы ремонтлағанда тап ошо маҡсатҡа билдәле бер сумма бүлеү тураһында һөйләшеп килештек. Шулай уҡ ҡыҙыҡлы саралар үткәрергә планлаштырабыҙ. Беҙҙең төп бурыс - беҙҙең эргәлә йәшәгән кешеләргә иғтибар йәлеп итеү".

## УҠЫУ ЙОРТТАРЫ КӨТӘ

**Юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү кампанияһы 20 июндә башлана, тип хәбәр иттеләр Рәсәй Хөкүмәтендәге кәңәшмәлә. Быйыл вуз абитуриенттарының дөйөм һаны 1 миллион кешенән күберәк булыуы ихтимал.**

"Беҙ уҡырға инеү өсөн бар шарттар булдырырға тейешбеҙ. Быйыл бюджет урындары 620,5 меңдән ашыуыраҡ. Абитуриенттар конкурсының уңайлы һәм асыҡ системаһын тормошҡа ашырыу мөһим. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн төп инструмент - "Вузға онлайн уҡырға ин" суперсервисы. Шулай уҡ айырым квота сиктәрендә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың һәм уларҙың ғаилә ағзаларының юғары уҡыу йорттарына инеүгә хоҡуғын бойомға ашырыуҙы контролдә тоторға кәрәк", - тип белдерҙе Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Дмитрий Чернышенко.

Рәсәйҙең Һанлы үҫеш, элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығы етәксеһе Мәксүт Шадаев билдәләүенсә, суперсервисты ҡабул итеү кампанияһына әҙерләү эше штат режимында бара. "Быйыл абитуриенттар дәүләт хеҙмәттәре порталы ярҙамында эш биреүсе менән маҡсатлы уҡыу килешеүен төҙөй аласаҡ", - тип өҫтәне ул. Былтыр абитуриенттар сервис ярҙамында вуздарға 2,2 миллион ғариза биргән. 2024 йылда был күрһәткес артырға тейеш. 2024/2025 уҡыу йылына юғары уҡыу йорттарына 621 321 бюджет урыны бүленгән, шуның 29 304-е - яңы төбәктәрҙең университеттарына, тип белдерҙеләр Хөкүмәттә.

## СТУДЕНТҠА - СТИПЕНДИЯ

**2024 йылдың 1 сентябренән Рәсәйҙә уңышҡа өлгәшкән студенттар өсөн бер нисә персональ стипендия арттырыла. Дмитрий Лихачёв, Анатолий Собчак һәм Егор Гайдар исемендәге стипендиялар күләме 5-тән 15 меңгә тиклем еткерелә, тип хәбәр ителә Министрҙар кабинеты сайтында.**

Документ тексынан күренеүенсә, ай һайын Рәсәйҙең дәүләт һәм дәүләткә ҡарамаған юғары уҡыу йорттарынан ун студентҡа Дмитрий Лихачев исемендәге персональ стипендия тапшырыла. Стипендиаттар конкурс нигеҙендә һайлап алына. Төп шарт - дөғүәселәрҙең сәнғәт фәне, тарих, культурология, лингвистика, әҙәбиәт гилеме, педагогика һәм философия өлкәһендәге уңыштары һәм ҡаҙаныштары. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Дмитрий Сергеевич Лихачёв исемендәге персональ стипендиялар 2002 йылда президент указы менән булдырылғайны. 2024 йылдың мартында дәүләт башлығы хөкүмәткә ошондай стипендия тәғәйенләү ҡағиҙәләрен раҫларға, шулай уҡ түләүҙәр күләмен һәм алыусылар һанын билдәләргә ҡушты. Андрей Вознесенскийҙың, Владимир Тумановтың, Александр Солженицындың һәм Юрий Маслюковтың персональ стипендияларын арттырыу тураһында ошондай уҡ ҡарарҙарға ҡул ҡуйыу әҙерләнәләр.

Хәбәр ителеүенсә, Путин студенттар өсөн Президент стипендияһын 30 мең һумға тиклем күтәрҙе.

*✓ Үҙебеҙҙе ысын ир-егет итеп тоябыҙ. Егет кешенең яңы һөнәр үҙләштерергә теләге булырға тейеш. Сөнки яҡшы өлгәшеү өсөн ошо сифаттар бик мөһим. Ә инде сәләмәт тормош һәм спорт һөйөү тураһында әйтеп тә тормайым.*



# БЕҘ БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘБЕҘ,

## балаларыбыҙ ҙа башҡортса һөйләшәсәк!

**Быуындар араһында бәйләнеш булыуы, һаҡланыуы бик мөһим. Ә быны өсөн өлкәндәр һәм йәштәрҙең бер-береһен тыңлай һәм ишетә белеүе шарт. Үҫеп килгән быуын өлкәндәр һүҙенә ҡолаҡ һаламы, уларҙың уй-хыялдары, ынтылыштары һәм донъяға ҡараштары ниндәй? Был һорауҙарға яуапты Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө Башҡорт лицей-интернаты (директоры Гөлшат Әхмәтова) уҡыусылары Артур ДАУЫТОВ, Айтуған МӨХӘМӘТЙӘНОВ, Айназ МОРАТШИН һәм Ғәлим МӨХӘМӘТЙӘНОВ менән әңгәмәбеҙҙә табырһығыҙ.**

**Тәүҙә үҙегеҙ менән таныштырып китәйек гәзит уҡыусыларҙы. Һеҙ был белем усағында күптән уҡыйһығыҙмы?**

**Артур:** Үҙем сығышым менән Ейәнсура районы Иҙәш ауылынанмын, лицей-интернатҡа быйылғы уҡыу йылында 10-сы класҡа килдем. Былтыр Өфөлә үткән бер олимпиадала дуҫымды осраттым һәм ул үҙе уҡыған ошо Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө Башҡорт лицей-интернаты тураһында һөйләне, бында саҡырҙы. Йәйге каникулдарҙа уйланып йөрөнөм дә, ризалашырға хәл иттем һәм дөрөҫ эшләгәнмен. Әле бына бер йыл ғына уҡыйым, әммә лицей-интернат бик күп мөмкинлектәргә ишектәр асты, бында уҡыуы мауыҡтырғыс, төрлө йүнәлештәрҙә тәрән белем бирелә. Иң мөһиме, олимпиадала ҡатнашыусылар бик күп, шундай аҡыллы һәм белемле тиҫтерҙәрем менән аралашып йәшәү мине лә бер башҡа үҫтерҙе. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, химия, математика фәндәренән олимпиадаларҙа ҡатнашам.

**Айназ:** Мин үҙем Стәрлетамаҡ ҡалаһынан һәм бында етенсе класҡа уҡырға килдем. Бында тик малайҙар ғына уҡый, пансионда йәшәйбеҙ. Быйыл унынсы класты тамамлайым, шуға йәйге каникул осоронда уҡытыусыбыҙға ярҙам итеп, робот техникаһы буйынса проект эштәре әҙерләгән бәләкәйерәк класс уҡыусылары менән шөғөлләнеүҙе түҙемһеҙлек менән көтәм. Тиҫтерҙәрем менән командаға ойошҡанбыҙ һәм төрлө проекттар ҙа эшләгәнебеҙ бар. Мәҫәлән, тажзәхмәт ныҡ таралған осорҙа ауырыуҙың һаулыҡ торошон тикшерә торған ҡорамал төҙөнөк: йөрәк тибешен үлсәгесте программалаштырып, тағы ла кешенең ҡан баҫымын, тән температураһын һәм бүлмә температураһын да билдәләй торған итеп үҙгәрттек. Ҡорамал ошо күрһәткестәрҙе үлсәй, мәғлүмәтте берләштерә һәм медицина хеҙмәткәренең йәки ауырыуҙың яҡындарының телефонына ебәрә. Ошо проектыбыҙ менән күп кенә ярыштарға йөрөп, юғары урындар ҙа яуланыҡ, баһаланылар.

**Айтуған:** Мин дә Стәрлетамаҡтың үҙенән, быйыл һигеҙенсе класты тамамлайым. Был белем усағында тик малайҙар ғына уҡыуы, уҡытыу кимәленең юғары булыуы йәлеп итте. Биология, химия, экология, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадаларҙа ҡатнашып йөрөйөм. Бынан тыш, футбол, волейбол түңәрәктәрендә шөғөлләнәм, башҡорт теленә арналған һәр төрлө ярыштарҙа ихлас ҡатнашам. "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсын һис ҡалдырмайым. Күптән түгел Башҡортостан юлдаш телевидениеһы ойоштorған "Диктор тауышы" тигән конкурста Гран-при яуланым.

**Ғәлим:** Ейәнсура районы Баһйыш ауылынанмын, 7-се класта уҡыйым. Лицей-интернатта уҡыуы бик оҡшай: уҡытыусылар ҙа көслө, дуҫтар менән бергә йәшәйбеҙ, ваҡыт уҙғарабыҙ, төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнергә һәм һәләттәреңде үҫтерергә була. Бейеү һәм ҡурай түңәрәктәренә йөрөйөм, шахмат уйнайым. Бында бөтә нәмәгә лә өлгөрөр өсөн ваҡытты дөрөҫ бүлә белергә лә кәрәк.

**Ә уҡыуҙан буш ваҡытығыҙҙы нисек үткәрәһегеҙ? Телефон йәки компьютер уйындары менән мауығаһығыҙмы?**

**Айназ:** Лицей-интернатта ваҡытыбыҙ сәғәтләп тиерлек бүленгән. Иртәнге сәғәт 7-лә йоҡонан уянабыҙ ҙа көндәлек эштәргә сумабыҙ. Иң тәүҙә йоҡлаған урынды тәҫләп йыйып ҡуйыу шарты бар, шунан иртәнге аш, дәрестәр. Һуңынан кемдер төрлө түңәрәктәргә китә, ә кемдер үҙе йәшәгән бүлмәлә иҙән йыуырға, сүп-сар ташларға ваҡыт таба. Үҙаллы әҙерлек ваҡытында өйгә эштәрҙе әҙерләйбеҙ. Иптәштәр менән саф һауаға сығырға ла ваҡыт бар. Ә инде киске сәғәт 10-да йоҡларға ятабыҙ. Бында уҡып ҡына ҡалмайһың, тулы ҡанлы тормош менән йәшәйһең дә, дуҫтар табаһың.

**Артур:** Миңә башта ошо көн тәртибенә өйрәнеп китеүе ауырыраҡ булды. Әсәй наҙлап уятмай, тәрбиәселәр әйткәненә буйһоноп карауатыңдан тораһың. Шулай ҙа өйрәнеп киттем яңы шарттарға. Мин спорт яратам, былтыр ваҡыт күберәк ҡала ине һәм ГТО нормаларын тапшырып, алтын миҙал алғайным. Быйыл иғтибарымды уҡыуға күберәк бүләм.

**Айтуған:** Уйнарға ла тәғәйен ваҡытыбыҙ бар. Кискеһен тышта футбол ҡумтаһында туп тибәбеҙ, йәки баскетбол, волейбол буйынса тренировкаға барырға була. Кемдәр теләй, шахмат һәм шашка түңәрәктәренә йөрөй. Робот техникаһы, программалаштырыу, уҡ атыу буйынса "Мәргән уҡсы" түңәрәктәрендә лә ваҡыт күңелле уҙа. Пансиондың һәр ҡатында теннис өҫтәлдәре тора. Телефонды ҡулға алырға ваҡыт та юҡ.

**Ғәлим:** Дәрестәрҙән һуң мин саф һауала йөрөргә, турникта төрлө күнекмәләр яһарға, футбол уйнарға яратам. Телефондарҙы кискеһен, барлыҡ мөһим эштәребеҙ тамамланғас ҡына кире таратып бирәләр. Унда ла уйнарға ваҡыт табыла, ләкин мин файҙалыһын - "Өң" ("Берлога") тигәнде генә уйнайым. Унда үҙең программалаштырыу талап ителә.

**Айназ:** Эйе, был "Өң" милли киберфизика майҙансығын 2023 йылдан алып Башҡортостанда ла бойомға ашыралар һәм беҙҙең белем усағы нигеҙендә түңәрәк эшләй. Республикала уның буйынса төрлө турнирҙар үтеп тора, яңыраҡ ҡына Өфөлә сираттағы ярышта командабыҙ менән икенсе урын яулап ҡайттыҡ. Унда Өфө, Нефтекама, Стәрлетамаҡ һәм башҡа район-ҡалаларҙан уҡыусылар килде. "Өң" уйынында һиңә умарталыҡ бирелә, шуны ҡырмыҫҡа, айыу, һағыҙаҡтарҙан һаҡлау өсөн ярҙамсыларҙы үҙең программалаштырырға тейешһең. Мәскәүҙә ВДНХ-ла үткән Бөтә донъя йәштәр фестивалендә, Сочи ҡалаһындағы бер сарала ла республикабыҙҙы танытып ҡайттыҡ. Бына пинжәгемдең яғаһындағы тамғаларҙа ла шул уйын геройҙары. Был бик файҙалы уйын, ул балаларҙы техник киләсәккә әҙерләй, робот техникаһына, программалаштырыу серҙәренә төшөндөрә.

**Артур:** Компьютер йәки телефонда уйнауҙың файҙаһы юҡ. Мәҫәлән, олимпиадаға оҙаҡ әҙерләнеп, еңеү яулағандан үҙеңде бәхетле тойоу өсөн тырышлыҡ кәрәк булһа, компьютер уйынында "сысҡан"ға баҫҡыслап ҡына ултырып, еңеүҙән шатлыҡ кисереү әллә ниндәй ҡаҙаныш түгел. Күпселек уйындар шуға ҡоролған: баш мейеңде эшләтеү кәрәк түгел, етмәһә, күҙҙәрҙең күреү һәләте лә боҙола. Шулай булғас, насар йоғонто яһаған нәмә менән булышыу кәрәкмәй инде.

**Тик егеттәр генә уҡыған белем усағында һеҙгә ниндәй тәрбиә бирәләр? Ысын ир-егет ниндәй булырға тейеш?**

**Артур:** Беҙҙең тәрбиәселәр барыһы ла ҡатын-ҡыҙҙар, уҡытыусылар араһында ла улар күберәк. Шулай ҙа үҙебеҙҙе ысын ир-егет итеп тоябыҙ. Егет кешенең яңы һөнәр үҙләштерергә теләге һәм дисциплинаһы булырға тейеш. Сөнки яҡшы өлгәшеү өсөн ошо сифаттар бик мөһим. Ә инде сәләмәт тормош һәм спорт һөйөү тураһында әйтеп тә тормайым, был - мотлаҡ. Лицейҙа беҙҙе хеҙмәт яратырға, эште "ҡыҙҙарҙыҡы" йәки "егеттәрҙеке"нә бүлмәй генә урынеренә еткереп башҡарырға өйрәтәләр. Был тормошобоҙҙа һәр саҡ кәрәк буласаҡ, сөнки ялҡауланмаҫҡа өйрәнәһең бит.

**Ғәлим:** Уянғас та урыныбыҙҙы матур, бөхтә итеп йыйыштырып ҡуябыҙ. Ашханала ла шулай һәр кем үҙе артынан йыйып сығырға, бүлмәлә иҙән йыуырға, сүп-сар сығарырға ла, башҡа эштәргә лә өйрәтәләр. Бер бүлмәлә өс кеше йәшәйбеҙ һәм сиратлап дежурҙа булабыҙ. Тәрбиәселәр көн һайын бүлмәләрҙең торошон баһалай, йә маҡтайҙар, йә эшкә өйрәтәләр. Был беҙҙе, буласаҡ ир-егеттәрҙе, тырышлыҡҡа өйрәтә. Ә, ғөмүмән, егет кеше ҡатын-ҡыҙҙарға урын бирергә, үҙенең өҫ-башын тәртиптә тоторға, көслө һәм белемле булырға тейеш. Ҙур үҫкәс, улын тәрбиәләргә, ағас ултыртырға һәм өй төҙөргә лә бурыслы.

**Айтуған:** Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр. Шуға, ҡыҙҙар-малайҙар эшенә бүлешеп тороу юҡ бында, нимә әйтәләр, шуны эшләп тә ҡуяһың. Эшкә шулай мәктәп йәшенән өйрәнеү, хеҙмәт тәрбиәһе алыу артабан тормошта бик кәрәк буласаҡ.

**Айназ:** Директорыбыҙ әйтмешләй, егет кешенең тышҡы ҡиәфәте, тәрбиәһе һәм аң-белеме мөһим.

**Һеҙҙең белем усағында башҡорт теленә лә ҙур иғтибар бүленә бит инде. Туған телебеҙҙең киләсәге ниндәй буласаҡ тип уйлайһығыҙ?**

**Айназ:** Бәләкәй саҡта ололар әйткәнде тиҙ генә һеңдереп, иҫтә ҡалдыраһың. Шуға беҙ әле башҡорт телендә һөйләшәбеҙ, уны ҡәҙерләйбеҙ икән, балаларыбыҙ ҙа уны беләсәк һәм телебеҙ һаҡланып ҡаласаҡ. Туған телебеҙҙе үҫтерер өсөн башҡорт йәнһүрәттәрен, телефондар өсөн башҡортса уйындар, ҡушымталар күберәк эшләргә кәрәк. Ғөмүмән, башҡорт телен таныулыраҡ итергә тырышырға кәрәк. Мәҫәлән, тирә-яҡтағы алтаҡталарға, юл күрһәтмәләренә башҡортса яҙыуҙарҙы өҫтәргә була. Кешеләр күреп йөрөр һәм хәтерҙәрендә ҡалдырып, башҡортса аңлай башлар, бәлки.

**Айтуған:** Атай-әсәйем өйҙә гел башҡортса һөйләште, шуға мин ҡала малайы булһам да, туған телемде беләм. Әлбиттә, бәләкәйерәк саҡта башҡортса яҡшыраҡ һөйләшә торғайным, хәҙер ҡайсаҡ урыҫ һүҙҙәрен дә ҡыҫтырып ебәрәм. Беҙ бында туған телебеҙҙе тәрәндән өйрәнәбеҙ, туған мөхитебеҙҙә уҡыйбыҙ. Башҡорттар үҙ туған телен камил белергә тейеш, тип уйлайым. Әлбиттә, Стәрлетамаҡ ҡалаһында барыһы ла урамда үҙ-ара русса аралаша, бәлки, башҡортса һөйләшергә оялаларҙыр...

**Ғәлим:** Беҙҙең ауылда барыһы ла башҡортса һөйләшә, шуға мин бала саҡтан туған телемдә уҡырға-яҙырға өйрәндем. Башҡорт теленән оялырға кәрәкмәй, ул һинең туған телең һәм атай-әсәйең һөйләшкән тел бит. Русса белмәйһең, тип көлһәләр көлһөндәр, әммә үҙ телеңдә һөйләш. Беҙҙең лицей-интернатта уҡыған төрлө милләт балалары ла бейеү түңәрәгенә йөрөй һәм барыһын да уҡытыусыбыҙ башҡортса бейергә, баш-



✓ ***Бөгөн бәләкәй балаларҙы телефон, компьютерҙағы насар йоғонто яһаған уйындарҙан араларға кәрәк. Улар атыш, үлтерешкә ҡоролған йәки башҡа төрлө мәғәнәһеҙ, файҙаһыҙ уйындар уйнамаһын.***



ҡорт һүҙҙәренә өйрәтә. Ә бит башҡорт теле уҡытылмаған йәки аҙнаһына бер сәғәт кенә уҡытылған мәктәптәр ҙә бар. Унда башҡорт балалары, әлбиттә, туған телен яҡшы өйрәнә алмай.

**Артур:** Беҙ бында башҡорт телен дауам итеп һәм башлап өйрәнеүселәр төркөмдәренә бүленеп уҡыйбыҙ. Сөнки башҡорт лицей-интернаты тип йөрөтөлһә лә, бында икенсе милләт вәкилдәре лә уҡый. Башҡортостаныбыҙ күп милләтле республика һәм балаларҙың башҡорт телен белмәүе милләт-ара никахтарға, тиҙ үсешкән заман технологияларына ла бәйле. Ауылдарҙа ла хәҙер балалар телефон һәм телевизорҙы күп ҡарап, башҡортса һөйләшеп бармай. Ата-әсәләре уларҙы ошо йәһәттән контролдә тотмай һәм туған телен оноттора. Бында уйланырға урын барҙыр.

**Бер нисә йылдан лицей-интернатты, юғары уҡыу йортон да тамамлаһығыҙ. Ниндәй һөнәр кешеһе булырға теләйһегеҙ һәм йәмғиәткә кемдәр кәрәк буласаҡ? Һөнәрҙәр өлкәһе нисек үҙгәрәсәк?**

**Артур:** Мин үҙемде табип йәки иҡтисад өлкәһендәге белгес итеп күрергә теләйем. Был һөнәрҙәр һәр ваҡыт йәмғиәткә кәрәк буласаҡ. Киләсәктә ябай эшселәргә ҡытлыҡ кисерәсәкбеҙ, тип уйлайым. Эшсе һөнәрҙәренә уҡыған оҫта ҡуллылар әле лә һанаулы ғына, яҡын киләсәктә тағы ла күберәк талап ителәсәктәр.

**Айназ:** Беҙҙең лицей-интернатта химия-физика, химия-биология, физика-математика йүнәлештәре буйынса тәрәнәйтеп белем бирәләр. Мин физика-математика йүнәлешендә уҡыйым һәм киләсәктә инженер һөнәрен үҙләштерергә ниәтләйем. Робот техникаһы, микросхема, микроконтроллер менән эшләй белеү бик ҡыҙыҡһындыра. Әйткәндәй, бөгөн йәмғиәтебеҙгә нәк программистар, робот техникаһы менән эшләй белеүселәр талап ителә. Ләкин был тенденция оҙаҡ дауам итмәйәсәк һәм 5-6 йылдан мәңгелек һөнәрҙәр - уҡытыусы, врачтар һәм башҡа шундай һөнәр кешеләре кәрәк буласаҡ барыбер. Шулай ҙа киләсәктә илебеҙ ҙур үсеш кисерер һәм күп кенә эштәрҙе роботтар ярҙамында башҡарырбыҙ, тип уйлайым. Мәҫәлән, таксистар кәрәк булмаҫҡа мөмкин - әле үк үҙйөрөшлө автомобилдәр бар, әйбер йәки ашарға ташыусылар урынына пилотһыҙ осоу аппараттары, дрондар менән идара итеп кенә эшләрҙәр, бәлки. Бындай техника менән идара итә белгән, боҙолғанда төҙәтә алған белгестәр генә талап ителәсәк, ләкин улар күп булмаясаҡ. Беҙҙең ысынбарлыҡ шулай үҙгәрә алырына ышанам мин.

**Айтуған:** Юҡҡа сығасаҡ һөнәрҙәр араһында бухгалтер, урам һепереүсе лә булыуы ихтимал. Сөнки әле үк бухгалтерҙың эшен компьютерҙағы махсус программалар иҫәпләй, эш хаҡын да теүәл һанап бирә, отчеттар яҙа. Ә инде урам һепереүгә килгәндә, бында ла махсус машиналар төҙәлә. Мин үҙем, Артур кеүек, медицина өлкәһенә тартылам. Кешеләрҙе дауаларға, ярҙам итергә теләйем һәм хирург һөнәрен үҙләштерергә хыялланам. Кешенең һаулығы һағында торған белгестәр һәр ваҡыт кәрәк буласаҡ.

**Ғәлим:** Мин химия-физика йүнәлешендә уҡыйым. Химия фәнен 8-се класта ғына уҡытырға тейеш булһалар ҙа, мин уны быйыл уҡ өйрәнә башланым. Әле һөнәр һайламаһам да, Өфө дәүләт нефть техник университетында уҡырға хыялланам, уны тамамлағас, шунда ректор булып ҡалғым килер ине...

**Барлыҡ эштәребеҙҙе роботтарға тапшырып ҡуйһаҡ, нисек булыр икән?**

**Айтуған:** Көнкүрешебеҙ еңеләйер, әммә насар эҙемтәһе лә булмай ҡалмаҫ: кеше ялҡауланасаҡ. Әле үк офиста йәки өйҙә тик кенә ултырып эшләүселәр күп, был һаулыҡҡа ла зыян килтерә.

**Айназ:** Роботтар һәм башҡа төрлө заман техникаһы программаға ҡоролған һәм улар дөрөҫ эшләһен өсөн кешеләр ҡарап торорға тейеш була. Һәр урында ла кешене тулыһынса алмаштыра алмаясаҡтар инде ул.

**Артур:** Бындай үҫеш кешене тағы ла нығыраҡ ялҡауға әйләндереүе лә бар. Сөнки әле үк төрлө гаждеттар арҡаһында кешеләр баш мейеһен эшләтмәй башланы. Мәҫәлән, калькулятор булғас, үҙе һанап тормай. Йәки ниндәйҙер мәғлүмәтте хәтерҙә ҡалдырыу кәрәкмәй: интернет ҡул аҫтында. Бына шул ҡурҡыныс кеше өсөн.

**Ә берәй ваҡыт интернет юҡһа сыҡһа, кешелек ни ҡылыр?**

**Айназ:** Күп кеше эшһеҙ ҡалыр. Сөнки блогерҙар, фрилансерҙар, ситтән тороп эшләгәндәр байтаҡ. Ә блогерҙар һәм фрилансерҙарҙың күбеһе махсус белемһеҙ ҙә бит.

**Айтуған:** Китап уҡып өйрәнгән кеше өсөн генә бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк. Бында беҙҙең китапхана бик бай һәм башҡорт, рус, инглиз телдәрендә китаптар бар. Ҡыҙыҡлы ғилми әҙәбиәт тә етерлек.

**Тиҙҙән июнь айы, ысын йәй башлана һәм уның беренсе көнөндә - Балаларҙы яҡлау көнө билдәләнә. Һеҙҙе нимәнән яҡларға һәм һаҡларға кәрәк?**

**Айназ:** Бөгөн бәләкәй балаларҙы телефон, компьютерҙағы насар йоғонто яһаған уйындарҙан араларға кәрәк. Улар атыш, үлтерешкә ҡоролған йәки башҡа төрлө мәғәнәһеҙ, файҙаһыҙ уйындар уйнамаһын. Был йәһәттән атай-әсәйҙәр тарафынан да, мәктәптә лә контроль булыуы яҡшы. Бында беҙҙең телефондарҙы йыялар һәм көнө буйы уларҙы ҡулға ла алмайбыҙ, тик кискеһен бер нисә сәғәткә генә ҡулланырға рөхсәт ителә. Унда ла әле тышта уйнап, башҡа эш менән шөғөлләнеп, онотоп ҡалабыҙ һәм был бик яҡшы.

**Артур:** Балаларҙың хоҡуҡтарын яҡларға кәрәк, минеңсә. Өлкәндәр "Һин бала ғына әле" тип, балаларҙың фекерҙәренә, һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмай. Тағы ла насар эштәргә өйрәткән, насар хәлдәргә юлыҡтырған өлкәндәр ҙә була, бына шуларҙан балаларҙы һаҡлау мөһим.

**Айтуған:** Әлбиттә, Артур әйткәнсә, балаларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалырға кәрәк. Әммә үҙҙәрен әллә кем итеп тойған һәм өлкәндәрҙе тыңламаған балалар ҙа бар, улай һауалы булыу ярамай. Беҙ барыбыҙ ҙа бер төрлө һәм эргә-тирәләгеләргә ярҙамсыл булыу, һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгәндәргә мәрхәмәтлек күрһәтеү мөһим. Ә атай-әсәй беҙҙе ярата һәм бөтә нәмәнән дә ҡурсый инде ул, хатта ҡайһы саҡта һин бик үк хаҡлы булмаһаң да башҡаларҙан ҡыйырһыттырмай.

**Ғәлим:** Мин әле үҙем бәләкәй, шуға был һорауға яуапты бик белеп етмәйем. Шулай ҙа атай-әсәйҙәр балаһының ҡайһы бер теләктәренә ҡолаҡ һалһын ине, тим: ниндәй һөнәр һайлағыһы, ниндәй түңәрәккә йөрөгөһө, йәки сәсен нисек ҡырҡтырғыһы килә - уның ошондай фекерҙәре һанланырға тейештер ул. Мине былай ирекһеҙләмәй атай-әсәйем. Бында мин үҙем теләп бейеүгә һәм ҡурайға йөрөйөм, ата-әсәйем маҡтап, күтәрмәләп кенә тора. Шулай булырға тейештер.

**Егеттәр, ә илһөйәрлек һеҙҙең өсөн нимәне аңлата?**

**Айтуған:** Тыуған илде яратыу, туған телеңде белеү һәм уларға зыян иткән һәр нәмәнән яҡлау. Ватан өсөн барыһын да эшләргә тырышыу.

**Ғәлим:** Туған телеңде яҡлау, маҡтау, белеү һәм унан оялмау ҙа илһөйәрлектең бер сифаты. Тағы ла минең ҡартатайым, атайым һәм бөтә ағайҙарым да армияла хеҙмәт итте, мин дә Ватан алдында үҙ бурысымды үтәйәсәкмен. Шул да илһөйәрлек ул.

**Айназ:** Беҙҙә хәҙер аҙна һайын дүшәмбе көн иртәнсәк Рәсәй һәм Башҡортостандың гимндары уйнатыла, флагтарҙы күтәрәбеҙ. Аҙна аҙағында флагты төшөрөп ҡуйырға ла йыйылабыҙ. "Мөһим нәмә тураһында һөйләшеү" тигән дәрестәрҙә төрлө иҫтәлекле даталарға арналған мауыҡтырғыс дәрестәр үтәбеҙ, өлкәндәрҙең һөйләгәнен тыңлайбыҙ. Был яңылыҡтарҙы ыңғай ҡабул иттек һәм илһөйәрлек тәрбиәләү өсөн бик кәрәк икәнен дә тоябыҙ. Үҙ республикаң һәм Рәсәй менән ғорурланырға, уның тарихын яҡшы белергә өйрәтәләр. Сит илдәрҙә йөрөгәндә туған илеңде һәм халҡыңды башҡаларға матур яҡтан таныта алыу ҙа - илһөйәрлек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уҡыуҙа ла, йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем, үҙҙәре ҡыҙыҡһынған өлкәләрҙә уңышҡа өлгәшкән һәм тырыш был балалар менән тағы бик күп темаларға һөйләшергә булыр ине. Шулай ҙа егеттәрҙең һәр һүҙе Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө Башҡорт лицей-интернатында балаларға рухи һәм донъяуи белемдәр биреүҙе берҙәй хәстәрләүҙәрен сағылдырҙы. Бында һәр уҡыусы шулай телһөйәр, илһөйәр һәм алдынғы ҡарашлы, ә уларҙың ата-әсәләре - халҡыбыҙҙың киләсәген хәстәрләгән замандаштарыбыҙ, уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр - үҙ һөнәренең оҫтаһы, хәстәрлекле икәнен күрҙек.**

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**әңгәмәләште.**

ТӘРБИӘЛЕ БАЛА

# ЙӘНГӘ - ШАТЛЫҠ, ЙӨҘГӘ - АҠЛЫҠ

**Ата-әсә өсөн тәрбиәле баланан да ҙур байлыҡ булмаҫ. Тәрбиәле бала донъяла йәнгә шатлыҡ килтерһә, әхирәттә йөҙгә аҡлыҡ килтерер.**

- Тәрбиәле баланы һәр кем яратыр, әммә тәрбиәһеҙ баланы бер кем дә яратмаҫ, хурларҙар йә кәмһетерҙәр.
- Тәрбиәле бала булыу шундай ҙур хазина булһа ла, уға өлгәшеү бик еңел. Атам-әсәм шатланһын, кешеләр ҙә миңә рәхмәт әйтеп, мине яратһын, тигән һәр бер баланың тәрбиәле бала булырға көсө етә.
- Тәрбиәле бала әллә ҡайҙан күренеп тора, сөнки уның һөйләгән һүҙе, эшләгән эше быны күрһәтеп тора.
- Тәрбиәле бала ниндәй булырға тейеш һуң? Быға яуапты ҡулыңдағы ошо китаптан уҡып бел һәм үҙеңә тәрбиәле балаларҙың күркәм сифаттарын ҡабул ит.
- Тәрбиәле бала иң тәүҙә ошолай булыр: ул иртән йоҡоһонан оло кешеләр менән бергә торор. Башҡалар тороп бөткәс тә йоҡлап ятҡан балаға ялҡау, йоҡо сүлмәге тиерҙәр. Йоҡоһонан торғас та ул бәҙрәфкә барып килер һәм һалҡыныраҡ һыу менән тәһәрәт алыр. Тәрбиәле баланың үҙенә айырым бит, ҡул һөртә торған һөлгөһө, шулай уҡ тарағы булыр. Үҙенең һөлгөһөнә һөртөнөр һәм үҙ тарағы менән генә сәсен тарар.
- Тәрбиәле бала үҙенә ҡуйолған сәйҙе әҙәпле генә ултырып эсер, икмәкте лә ҡәҙерләп кенә ашар. Аяҡ өҫтө ашап йөрөгән кешенең икмәк валсыҡтары ергә ҡойолор һәм улар аяҡ менән тапалып, һине гонаһлы итер. Шуның өсөн тәрбиәле бала һис бер ваҡытта аяҡ өҫтө ашап йөрөмәҫ.
- Тәрбиәле бала үҙ кейемен үҙе һалған урындан алып кейенер, бысраҡтарын үҙе таҙартыр.
- Иртәнге сәйҙән һуң ваҡыт ҡалһа, мәктәпкә барғансы, бер ситкә ултырып, үҙенең дәрестәрен ҡарар. Һабағын аңлап, күңеленә һалыр.
- Тәрбиәле бала мәктәпкә барырға сыҡҡас та әҙәп, инсаф менән йөрөр. Ҡаршы осраған кешеләргә сәләм бирер.
- Мәктәптә балалар өсөн ял итергә һәм уйнарға ла бер аҙ ваҡыт була. Шул ваҡытта балалар уҡытыусыларының рөхсәте менән уйнар, ял итер. Ләкин тәрбиәле балалар тейешһеҙ уйын уйнамаҫ. Уйнаған ваҡыттарында иптәштәрен рәнйетмәҫ.
- Тәрбиәле бала ручка-ҡәләм, төрлө буяла торған нәмәләр менән уйнамаҫ. Шулай уҡ шырпы, бысаҡ, ҡаҙаҡ, ураҡ, салғы, бәке кеүек нәмәләр менән, быяла һәм таш һауыт киҫәктәре, туҙан-тупраҡ һәм балсыҡ менән һис ҡасан уйнамаҫ. Ағастарҙы һындырмаҫ, гөлдәрҙе йолҡмаҫ, сәскәләрҙе өҙөп ташламаҫ.
- Тәрбиәле бала иптәштәренең сумкаларын, китап-дәфтәрҙәрен аҡтармаҫ, йыртмаҫ. Уларҙың да, үҙенең дә әйберҙәрен бысратмаҫ, юғалтмаҫ.
- Балаларҙың барлыҡ эштәрен уҡытыусылары белеп, күҙәтеп тора. Шуның өсөн тәрбиәле бала үҙенең иптәштәренең ғәйептәрен белһә лә, уҡытыусыға ошаҡлашмаҫ. Һәр ваҡыт үҙ эше менән генә шөғөлләнер. Башҡалар эшенә ҡыҫылмаҫ.
- Мәктәптән ҡайтҡанда ла үҙен әҙәпле тотор. Ҡайтып ингәс, ата-әсәһе һәм башҡа туғандары менән иҫәнләшер, мәктәптәге уңыштары менән уртаҡлашып, уларҙы ҡыуандырыр, рәхмәтен алыр.
- Тәрбиәле баланың китап, дәфтәр , башҡа кәрәк-яраҡтарын ҡуйыр билдәле урыны булыр. "Китабым, дәфтәрем ҡайҙа?" тип, башҡаларҙан ҡысҡырып һорап йөрөмәҫ.
- Дәрестәрен әҙерләп бөткәс, өй эсендә ярҙамлашыр, өлкәндәрҙең ҡушҡанын эшләр. Буш ваҡытында иптәштәре, дуҫтары менән уйнап алыр.
- Тәрбиәле баланың яҡшы холҡо ҙурҙар һәм бәләкәйҙәр менән аралашыуҙа ла күренер. Мәҫәлән, ул үҙенән бәләкәйҙәргә ҡарата миһырбанлы, уларға һәр ваҡыт "Туғаным" тип өндәшә, шулай уҡ үҙенән өлкәндәргә - уҡытыусыға, ата-әсәһенә, тәрбиәселәргә хөрмәт күрһәтә, уларҙың хәтерен ҡалдырмаҫҡа тырыша.
- Тәрбиәле бала ата-әсәһенең хәтерен ҡалдырыр ҡылыҡ ҡылмаҫ, ата-әсәһе тыйған эште эшләмәҫ. Йомошо булғанда ипләп кенә яндарына барып, асыҡ итеп һорар. Улар ҡушҡанды теләп башҡарыр. Үҙенә һорау бирһәләр, асыҡ йөҙ менән яуап ҡайтарыр. Ҡунаҡ килһә, ата-әсәһе ҡушҡанса ҡунаҡҡа хөрмәт күрһәтер.

(Дауамы 10-сы биттә).

✓ *Аҡыллы кеше - аҡыллы күренергә тырышҡан, трибуналарҙан оран һалған кеше түгел, ә үҙ аҡылын үҙе тотҡан кеше. Үҙ әҫәрендә уҡырлыҡ та ейән-ейәнсәрҙәрең ҡалмаған, кемгә кәрәк һинең әҫәрҙәрең?*



ТӘРБИӘЛЕ БАЛА

# ЙӘНГӘ - ШАТЛЫҠ, ЙӨҘГӘ - АҠЛЫҠ

**(Башы 9-сы биттә).**

● Баланың тәрбиәле булыуы ашарға ултырғанда бигерәк тә нык беленә. Ул өлкәндәр күрһәткән урынға ултырыр, терһәктәре менән өҫтәлгә таянмаҫ, ашарға биргәндәрен сабыр ғына көтөр. Нимә бүлеп бирһәләр, шуны ашар, кәрәк булғанды тыныс ҡына һорар. Аҙ-аҙ ҡабып, яҡшылап сәйнәп ашар. Ололар һүҙенә ҡыҫылмаҫ.

● Тәрбиәле бала ашағанда ашыҡмаҫ. Икмәк валсыҡтарын алдына һәм иҙәнгә ҡоймаҫ. Ашты ашъяулыҡҡа ла, кейеменә лә түкмәҫ.

● Әгәр башҡалар менән бер табаҡтан ашарға тура килһә, ул саҡта ҡулын башҡалар алдына түгел, ә үҙ алдына ғына һуҙыр, аҡрын ғына ашар. Бындай балаларҙы һәр кем яратыр һәм маҡтап һөйләр.

● Тәрбиәле бала аш янынан торғас, майлы ҡулы менән бер нәмәгә лә тотонмаҫ, ҡулын кейемдәренә һөртмәҫ. Бәлки, яҡшылап һабынлап йыуыр, ауыҙын сайҡар. Ололар бар ваҡытта уларҙың йыуынып бөткәнен, үҙенә сират еткәнен көтөр.

● Аш ашағас, тәрбиәле бала ололар эргәһендә ултырмаҫ. Үҙ эштәре менән мәшғүл булыр.

● Йоҡлар ваҡыт еткәс, тәрбиәле бала ололарға хәйерле йоҡо теләп, урынына ятыр. Көндөҙгө кейемдәрен сисеп, уларҙы рәтләп элеп ҡуйыр.

● Тәрбиәле бала яңылыш эш ҡылһа, уның яңылыш булыуын ололарҙың күҙ ҡарашынан уҡ аңлап алыр. Кемдер бераү уға өгөт һүҙе әйтһә, уны һис һүҙһеҙ тыңлар, "Был эшемдең насар икәнен үҙем дә белә инем, башҡаса бындай ҡылыҡ ҡылмам, рәхмәт өгөтөгөҙгә", тип әйтер. Тәрбиәһеҙ бала иһә үҙенең хатаһын аңламаҫ, кәмселектәрен төҙәтеү түгел, хатта үҙенә өгөт биреүсегә яман һүҙҙәр менән яуап бирер.

● Тәрбиә, әҙәп кеүек, кешеләргә һөйөклө күренгән башҡа нәмә донъяла юҡтыр. Шулай уҡ тәрбиәһеҙлек, әҙәпһеҙлек кеүек дошман күренгән нәмә лә юҡтыр. Тәрбиәле бала йәмһеҙ булһа ла, уны һәр кем яратыр һәм хөрмәт итер. Әммә тәрбиәһеҙ бала ни ҡәҙәр матур булһа ла, уны бер кем дә яратмаҫ, ул үҙенең кейеме йәки матурлығы менән генә кешеләрҙең иғтибарын яулай алмаҫ. Тәрбиәле баланың үҫкән һайын хөрмәте арта ғына барыр, ә тәрбиәһеҙ бала ни ҡәҙәр ҙур үҫһә лә, ҡәҙер-хөрмәте булмаҫ, бәхетһеҙлеге көндән-көн артыр.

● Тәрбиәле һәм әҙәпле булыу ир балалар өсөн ни ҡәҙәр мөһим булһа, ҡыҙ балалар өсөн ул бигерәк тә мөһим. Сөнки ҡайһы бер кәмселектәр ир балаларҙа бик ныҡ күренмәһә лә, ҡыҙ балаларҙа улар бик ҙур ғәйепкә һаналыр. Мәҫәлән, кейем-һалымы керле һәм йыртыҡ булыуы ир балалар өсөн дә ғәйеп, ҡыҙ балалар өсөн бигерәк тә ғәйеп эш булыр. Шуның өсөн, сафлыҡ, таҙалыҡ, бөхтәлек ҡыҙҙарға бигерәк тә тейеш нәмә. Үҙенең өҫ-башын яҡшы ҡарамаған ҡыҙ баланы һәр кем тәрбиәһеҙ тиер.

● Уйын уйнау тәңгәлендә лә ҡыҙ балаларҙың ир балаларҙан айырмалары бик ҙур. Мәҫәлән, туп уйындары ир балалар өсөн яҡшы булһа ла, ҡыҙ балалар өсөн бик уҡ яҡшы түгел.

● Ҡыҙ балаларҙың үҙҙәренә генә хас булған уйындары була: ҡурсаҡтар, бәҡсәлар яһап уйнау, шунда уҡ аш-һыу әҙерләү. Әсәйҙәр үҙҙәренең ҡыҙҙарына энә, еп һәм ситса киҫәктәре бирер ҙә, ҡыҙҙар үҙҙәренең ҡурсаҡтарына күлдәктәр, баш кейемдәре тегеп кейҙерер.

● Тәрбиәле малайҙар оятһыҙ, әҙәпһеҙ һүҙҙәр һөйләмәҫ, ә ҡыҙ балаларға ундай һүҙҙәр бөтөнләй ят булыр.

● Ҡайһы ваҡытта ҡыҙ балалар әсәләренә эйәреп, ҡунаҡҡа, мәжлестәргә баралар. Ҡыҙ балаларҙың тәрбиәлеһе һәм тәрбиәһеҙе шунда беленә. Тәрбиәле ҡыҙҙарҙың әсәләре балалары өсөн шатланып торор, әммә тәрбиәһеҙ ҡыҙҙар башҡалар алдында әсәләренең йөҙөн ҡыҙартыр.

● Ир балалар менән уйнау, һүҙ әйтешеү, йүгерешеп, ҡыуышып йөрөү ҡыҙ балаларға һис тә килешмәҫ. Тәрбиәле ҡыҙҙар бындай аралашыуҙан һаҡланыр.

● Тәрбиәле балалар яҡшы менән яманды айыра белер, яҡшы холоҡ һәм яҡшы эштәрҙе үҙҙәренә ғәҙәт итерҙәр, ә яман холоҡ менән яман эштән йыраҡ булыр. Сөнки бөгөн һиҙгеҙ-ун йәшендә булған балалар ете-һигеҙ йылдан һуң ҙур кеше була. Бала сағында алған тәрбиәне сәсе ағарғансы уның артынан ҡалмаҫ. Бала сағында алынмаған тәрбиәне һуңынан бөтөн донъя халҡы ла өйрәтә алмаҫ.

АҒИНӘЙ АҠЫЛЫ

# НИНДӘЙ БАЛАЛАР ҮҪТЕРҘЕҢ?

1966-1980 йылдарҙа телевидение һәм радио өсөн төрлө темаларға тапшырыуҙар әҙерләгән саҡта коллегаларыма мөрәжәғәт итергә тура килгеләй ине.

Яҙыусылар исемлеге, телефон номерҙары яҙылған китаптағы телефондарҙан шылтыратам. Күп ваҡыт телефонды балалары йәки ейән-ейәнсәрҙәре ала. Башҡортса өндәшәм. Телефондан яуап биреүсе шунда уҡ кемде һорағанымды аңлап ала һәм өйҙәгеләргә ҡысҡырып өндәшә: "Это тебя к телефону, на твоем языке спрашивают". Ҡулдан телефон трубкаһы төшөп китә яҙа...

Ике йөҙҙән ашыу яҙыусы араһынан ғаилә теле башҡорт теле булғандарын һанаһам, ике ҡул бармағы ла тулмай. Уларҙы әйтешкә саҡырып килә ине.

*"Халҡым!" - тиеп ораң һалаһың…*
*Шәжәрәңде ишәйтерлек,*
*Тарихыңа һоҡланырлыҡ,*
*Атың-затыңа тоғоро*
*Балалар үҫтерҙеңме?*
*"Телем!" - тиеп янып-көйәһең…*
*"Урал батыр"ҙы башҡортса*
*Уҡып хайрандар ҡалырлыҡ,*
*"Халҡым - сәсән" тип әйтерлек,*
*"Рәхмәт һиңә, туған телем,*
*Рәхмәт, атай-әсәйем,*
*Шундай ҡиммәттәрҙән мине*
*Айырмағаның өсөн", - тип,*
*Ҡыуанып күҙенә бағырлыҡ*
*Балалар үҫтерҙеңме?*
*"Шәжәрәм", тип, һоҡланаһың…*
*"Мин - дауамың, зат сылбырын*
*Ыҫҡындырмай ялғаусыңмын,*
*Олатайҙар аманатын*
*Тап төшөрмәй һаҡлаусыңмын,*
*Был донъяға килеүҙәрең,*
*Халҡым, тиеп, телем, тиеп,*
*Яныуҙарың-көйөүҙәрең*
*Алдаҡ түгел, бушҡа түгел…*
*Минең дә хас һинекендәй,*
*Олатайҙар аманатын:*
*Илен, телен ҡурсаларҙай,*
*Үҫер әле балаларым,*
*Дауам итер шәжәрәбеҙ,*
*Тип әйтерлек*
*Балалар үҫтерҙеңме?*

Кемдәрҙән кемдәр ҡала? Аҡыллы кеше - аҡыллы күренергә тырышҡан, трибуналарҙан оран һалған кеше түгел, ә үҙ аҡылын үҙе тотҡан кеше. Үҙ әҫәрендә уҡырлыҡ та ейән-ейәнсәрҙәрең ҡалмаған, кемгә кәрәк һинең әҫәрҙәрең? Үҙ өйөндә: "На твоем языке" тип торған ейәнең үҫә икән, кем өсөн яҙаһың әҫәрҙәреңде?

Туған телеңде белеү, халҡыңа һөйөү, халҡың моңон үҙ итеү мәктәптә лә, урам мөхитендә лә, дәүләт хәстәрлеге аша ла түгел, фәҡәт ғаиләлә һалына. Ғаилә ҡанундарына бер кем дә ҡыҫыла алмай. Ғаилә ҡанундары атай-әсәйҙең аҡылына, зиһен тәрәнлегенә, аң кимәленә бәйле. Ә балалар, ейәндәр - халҡыбыҙҙың киләсәге - атай-әсәйҙең зиһен өлгөргәнлегенең көҙгөһө. Халыҡ бит ул ниндәйҙер абстракт төшөнсә түгел, ә әсәй итәгендә, атай етәгендә үҫкән һинең балаң.

Ҙурайғас, рус телен яҡшы белмәйәсәк, тип, күп ғаиләләр башҡортса ла, русса ла һөйләшә шалай. Тик тора-бара башҡорт теле үтә ябай, көнкүреш теленә генә әйләнә. Ә инде фәлсәфәүи йәки ҡатмарлы, юғары төшөнсәләр хаҡында һөйләшкәндә руссаға күсәләр. Бындай ғаиләләрҙә, башҡорт телен ихтирам итмәй, тип тә әйтеп булмай. Тик бындай ғаиләләрҙә башҡорт матбуғатын инҡар итеү, балаларға башҡортса китап уҡымау күҙәтелә. Ошонан башлана, башҡорт теле ҡатмарлы фекерҙәрендә, тойғо-кисерештәрендә еткереүгә эшкинмәй торған тел, тигән фекер. Икмәктоҙлоҡ башҡорт теленән моң һеңмәй, телгә һөйөү уянмай. Был ғаиләләрҙә, рухһыҙ, тип әйтеп булмай, әммә тел таҙалығы - иң мөһим шарт, балаларың менән башҡортса уйлау ҡеүәһен дә үҫтерергә кәрәк. Тик һуңламаҫҡа кәрәк.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ӘКИӘТ ҺӨЙЛӘЙЕК, КҮРҺӘТӘЙЕК!



**Элек оҙон-оҙон әкиәттәр һөйләй белеүселәр була торғайны. Уларҙы кисен әкиәт һөйләтер өсөн саҡыра инек. Беҙ интернатта йәшәгәндә юғарыраҡ класта уҡыған Зөлфиә апайҙы бүлмәләр буйлап саҡырып әкиәт һөйләттек. Ул "Ел-ел, арбам", "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу", "Заятүләк менән Һыуһылыу" кеүек эпостарҙы һөйләй ине. Тыңлаусыларҙың ишетеп аңлау һәләтен, телмәр байлығын, зиһенен үҫтереүҙә был әһәмиәтле тәрбиәүи алым булғандыр, тип уйланыла хәҙер.**

Ә бөгөн иһә кескәй балаларға әкиәт һөйләүселәр бик һирәк. Телевизорҙан йәнһүрәт ҡуйып бирәләр, йә смартфон тотторалар. Интернет кинлектәрендә рус телендә йәнһүрәттәр һанап бөткөһөҙ шул, балалар теләгәнен һайлап ҡарай ала. Ҙур студиялар менән бер рәттән, һәүәҫкәрҙәр йәнһүрәттәре лә, сит ил йәнһүрәттәре тәржемәләре лә Ютубҡа системалы рәүештә һалына. Башҡортостанда ла йәнһүрәттәр төшөрөлә башланы башлауға. "Аҡбуҙат" редколлегияһының "Урал батыр", "Нурбостан", "Муха" студияһының "Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәттәре бик матур, ләкин улар өлкәнерәк балалар өсөн тәғәйенләнгән. Ә бит хәҙер балалар 1-2 йәштән, хатта ҡайһылары 5-6 айҙан уҡ йәнһүрәт ҡарай башлай һәм ҡушылып йырларға, бейергә өйрәнәләр. Һайлап ҡына ҡараған йәнһүрәттәре араһында руссаһы күберәк булғас, телдәре лә русса асыла. Шулай итеп бала тыуғандан алып туған тел мөхитенән ситләшә, туған тел үҙ ролен юғалта.

Был хәлде нисек тә булһа яҡшыртыу өсөн балаларыбыҙҙа тәьҫир итеүсе көслә сара - йәнһүрәттәрҙе башҡортса күпләп төшөрөү мотлаҡ. Һәр бер йәнлек, һәр бер бөжәк, үҫемлек, уйынсыҡ, ғаилә ағзалары, әҙәп-әхлаҡ, йыуыныу-гигиена, юл, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре, транспортта, өйҙә, мәктәптә, һыу буйында үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре буйынса, һәр бер матур йыршиғырға арнап төшөрөргә була йәнһүрәтте. Был эштәрҙе тик бер дәүләт киностудияһы ғына башҡарып сыға алмауы аңлашыла. Барлыҡ энтузиастарҙы йәлеп итергә кәрәктәр. Төрлө бәйгеләр өсөн балалар баҡсалары педагогтары пластилин йәнһүрәттәре, йәки сәхнәләштереүҙәр төшөрә бит. Тик уларҙың сифаты яңы компьютер программалары менән төшөрөлгән заманса рус йәнһүрәттәренән күпкә ҡалыша һәм балаларҙы ылыҡтырмай. Ошо мәсьәләне хәл итеү маҡсатында педагогтарҙы, программалаусыларҙы, сәнғәт өлкәһендәге белгестәрҙе әҙерләгән уҡыу йорттарында, педагогтарҙың өҫтәмә белем биреү үҙәктәрендә рәсем төшөрөү, тауыш яҙҙырыу, музыка иҡаҙ итеү, йәнһүрәт эшләү программаларына өйрәткән дәрестәр ойоштороп булыр ине, шулай уҡ һәр теләгән кешегә бындай программаларҙы өйрәтеүсе үҙәктәр булдырырға кәрәк. Мин дә ошо йүнәлештә үҙаллы өйрәнеп, эшләп ҡарағаным бар. Әммә уҡытыусым булһа, эш тағы ла алға китер ине, һис шикһеҙ.

Ҡулдарынан гаджеттары төшмәгән йәш-елкенсәктең дәртен дә файҙаға йүнәлтеү маҡсатыбыҙға ярашлы булыр ине. Рәсем, йыр, хеҙмәт дәрестәрендә компьютер технологияларына өйрәтеү һәм төрлө тамғалар, алтаҡталар, фото һәм видео эшләү серҙәренә һ.б. төшөндөрөү кәрәк. Хеҙмәт дәресендә 3D-проекциялар, йыр дәресендә Final, Sibelius кеүек программалар, ноталарҙың электрон варианттарын үҙләштерһендәр. Хәҙер бит берәй музыкаль аранжировка эшләтәйем тиһәң, был бурысты атҡарғандар юҡ тиерлек. Шул уҡ ваҡытта балаларыбыҙ интернеттан кемдер эшләгән әҙер нәмәне генә ҡарай, ә компьютерҙы тик баҫыу машинкаһы урынына ғына ҡуллана. Ә үҙҙәре шундай уҡ "текә" уйындар, йәнһүрәттәр, һүрәттәр эшләй белһәсе! Бер ни тиклем килем дә алырҙар, туған телебеҙҙе популярлаштырыуға үҙ өлөштәрен дә индерерҙәр ине лә баһа.

Компьютер программаларына уҡытыу үҙәктәре асып, туған телебеҙҙә кескәйҙәргә башҡортса цифралы мөхит тыуҙырыуға һәр кемебеҙ өлөш индерәйек, милләттәштәр. Бөтә нәмә аҡса менән генә үлсәнмәй, был эшмәкәрлекте лә ирекмәндәр эше булараҡ йәйелдерәйек.

**Вәғизә ҠУЖАГИЛДИНА.**
**Хәйбулла районы.**

***✓ Ниңә МХО башланмаҫ элек мең тәңкә торған рюкзактың хаҡы ике көн эсендә 10 мең һумға барып баҫты? 4 меңлек берцы 20 меңгә, 10 меңлек йоҡо тоғо 50 меңгә күтәрелде?***





# ГЕРОЙҘАР ВАҠЫТЫ

**Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА**

**(Хикәйә)**

*Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һәм һәләк булған батырҙарға арнайым.*

* * *

Арттағы бәләкәй Н. ҡалаһына ялға ебәрҙеләр. Урындағы мунсаға барып йыуынып-таҙарынып, бөҙрәханаға инеп сәс алдырып, ҡырынып, яңы кейем һатып алып кейенеп, ҡәҙимге тыныс тормошҡа ҡайтҡандай булып йөрөнө яугирҙар. Яҡында ғына һуғыш бара, снарядтар шартлай тимәҫһең дә: кешеләр шулай уҡ йәшәй, эшкә бара, автобус көтөп туҡталышта тора, ана, егет менән ҡыҙ бер кемдән дә тартынмай, бер-береһенә һырылышып, үбешәләр... Әйтерһең, һуғыш юҡ, әйтерһең, һалдаттар һәләк булмай! Зарифтың йөрәге ниңәлер өҙөп-өҙөп һулҡылдай башланы! Беҙ бит улар шулай тыныс йәшәһен өсөн көрәшәбеҙ! Эшкә барғандай көн дә утҡа инәбеҙ! Ә улар! Бер ни булмағандай көләләр, шаяралар, байрам итәләр, туйҙар яһайҙар!

Ә нимә эшләргә тейеш һуң улар? Бикләнеп ултырырғамы? Көлмәҫкәме? Быға башы етмәй егеттең! Әммә улай булырға тейеш түгел! Фронттағылар ҙа, тылдағылар, өйҙәгеләр ҙә бергә уҡмашып, бер йоҙроҡҡа төйнәлеп алмайынса, туҡтатып булмаҫ башкиҫәрҙәрҙе! Нимә тигән әле рус шағиры: "Из одного металла льют медаль за бой, медаль за труд!" Ә миҙал бирерлекме бөгөнгө эшселәргә? Улар Тыуған ил хаҡына эшләйме? Әллә кеҫәләрен тултырыу өсөнмө? Ниңә МХО башланмаҫ элек мең тәңкә торған рюкзактың хаҡы ике көн эсендә 10 мең һумға барып баҫты? 4 меңлек берцы 20 меңгә, 10 меңлек йоҡо тоғо 50 меңгә күтәрелде? Үҙҙәренең, иленең именлеге өсөн көрәшкән яугирҙарға арзаныраҡҡа һатырға, хатта бушлай бирергә тырышып торорға тейеш түгел инеме ошо сауҙа үҙәктәре хужалары? Ә улар уңайлы мәлдән файҙаланып, байып ҡалырға маташа! Ҡайҙа бында дөрөҫлөк? Ғәҙеллек? Элекке фиҙаҡәрлек? Ни өсөн кемдер һәләк булырға, кемдер теттереп йәшәргә тейеш?"

Ошондай уйҙар ҡайнаны Зарифтың башында. Хәйер, бер уныҡында ғына түгел, ялға ҡайтып килгән һәр егет үҙ ҡалаһындағы, үҙ ауылындағы халыҡтың тормошон күреп, йәне эсенеп килде. Бигерәк тә үҙҙәренең йәштәштәре, иптәштәре ҡунаҡ булышып, йә эшләмәй, йә ил һаҡламай өйҙә ятыуына, улай ғына ла түгел, уларҙы, мобилизация менән киткәндәрҙе ғәйепләп маташыуы нәфрәт тыуҙырҙы. "Алйоттар бара инде МХО-ға! Кем көсләп ебәрҙе! Бармаҫҡа ине! Һеҙ нимәне һаҡлайһығыҙ! Рәсәйҙе һаҡларға кәрәкме ни? Әйҙә, хәрбиҙәр һаҡлаһын! Һалдаттар һаҡлаһын! Беҙ үҙ ваҡытында бер йыл (ике йыл) ғүмеребеҙҙе йәлләмәй, армия хеҙмәтен үттек. Шул еткән! Дурактар булғанда, ил һаҡлаусылар ҙа бөтмәҫ! За то аҡсалы ҡайтырһығыҙ! Бай йәшәрһегеҙ! Беҙҙең эш тә юҡ, аҡса ла юҡ!"- тип асыҡтан-асыҡ мыҫҡыллаусылар ҙа осраны... Яуап бирә алманылар! Йоҙроҡтар төйнәлде, ҡул үҙенән-үҙе автомат торған ҡулбашҡа үрелде лә, буш иңбашты тойоп, хәлһеҙ аҫҡа һәленде. Эх, яу яланында осрап әйтһә ине ошо һүҙҙе сволочь! Белер ине ни эшләтергә!

Ялдан егеттәр кәйефһеҙ килә, иңдәре төшкән... Улар был хәлде аңлай алмай. Күптәре кире рюмкаға үрелә. Ҡайһылары - ныҡлы ихтыярлылары, көслөләре аяуһыҙға әйләнә. Улар "укроптар"ҙан да, тегендә ҡалған сволочтарҙан да берҙәй үс алыу тойғоһо менән ажарланып автоматҡа тотона. Ваҡыт үтер, заман бөтәһен дә үҙ урынына ҡуйыр. Кем хаҡлы, кем хаҡлы түгел - ваҡыт хаким. Кем герой, кем тыл ҡомағы - ил таныр! Кеше күҙенә тура ҡарай алырһыңмы, өйҙә ҡалған иптәш? Йоҡоң тыныс булырмы? Намыҫың, выжданың яуап торорға өндәмәҫме? Кешелеклектән яҙған булһаң, әлбиттә, бер нәмә лә үҙгәрмәҫ...

* * *

Айырым, ярым-ярты йөрөргә ярамағас, һалдаттар ҡала буйлап өсәр-дүртәрләп таралышты. Берәүҙәр аҙыҡ-түлек магазинына китте, кемдер кафе тирәһенә, ике иптәше - "Боксер" һәм "Художник" менән - "Лев" ҡаланы күрергә тип йәйәүләп урам буйлап атланы. Матур, төҙөк ҡала булған икән, бөтөн ерҙә асфальт түшәлгән, иркен генә тротуар ҙа бар. Бына бик матур бина, театр-фәләндер, моғайын. Алдында колонналары, фасады семәрле биҙәкле. Унан ары ике ҡатлы оҙон бина, бик күп оло тәҙрәләр теҙелеп киткән. Мәктәптер, күрәһең, алдында һары төҫтәге автобус тора. Бына уның ҙур ишегенән йүгерешеп балалар сыҡты, шаярышып, эткеләшеп, автобусҡа тығылыша башланы. Был тыныслыҡ күренешенән егеттәрҙең күңеленә лә һиллек килде. Мәктәп, уҡыуҙар бара икән, тимәк, бөтәһе лә яҡшы! Бөтәһе лә яҡшы буласаҡ! Һалдаттар яй ғына атлап, урамдың икенсе яғынан бара, уҡыусы балаларҙың шат тауыштарына кинәнә.

Ҡапыл егеттәрҙең күҙенә хәрби формалағы кешеләр салынды. Улар ҙа өсәү ине. Автоматтарын арҡаларына көбәктәрен аҫҡа ҡаратып аҫҡандар. Бер мәлгә генә Зариф уларҙың рәсәйҙекеләр түгел икәненә төшөндө. "Укроптар" - тине ул ярым бышылдап. - Автоматығыҙҙы әҙерләгеҙ!" Егеттәр уның әйткәнен аңлағансы, ул бер һикереүҙә янындағы йорттоң асыҡ торған подъезд ишегенә ышыҡланды.

- Руки вверх! - тип ҡысҡырҙы үҙе бар тауышына. - Оружия на землю!

"Боксер" урамдағы колонка артына ышыҡланып ятты, икенсеһе Зариф эргәһенә ынтылды. Бер секундҡа ғына албырғап ҡалған "укроптар" ҙа йәһәт кенә хәрәкәткә килде. Береһе йүгереп, асыҡ автобус ишегенә инде һәм ҡулына граната алды! Теге икәүһе тәүҙә ҡулын күтәрҙе, йәнәһе, беҙ атышырға йыйынмайбыҙ!

- Оружия на землю! Иначе я взорву всех детей! - тине автобустағыһы. Зарифтың аңы томаланғандай булды: "Ни эшләргә? Ни эшләргә? Бер автобус баланы һәләк итә алмай ҙа баһа улар!"

- Оставьте детей! Пусть автобус отъезжает! Я сдамся! Возьмите меня в заложники! - тип ҡысҡырҙы "Лев" ишек артынан сығып. - Мы вас не тронем! Уходите!

- Зариф! Һин нимә! "Укроптар"ға бирелмәксеһеңме? Беләһеңме улар пленныйҙарҙы нимә эшләтә! - тип ҡысҡырҙы эргәһендәге "Художник".

- Ә мин эләкмәйем пленға! Мин улар эргәһенә барыу менән баш ҡағам һәм кинәт кенә ергә ҡолайым. Шул секундта һеҙ уларҙы атып йығырға тейеш! Атырға! Пуля миңә эләккән хәлдә лә атырға! Яраланырмын, әммә пленға эләкмәм! Тик бер секунд эсендә атып өлгөрөгөҙ! - "Лев" автоматын аяҡ аҫтына һалды һәм дошмандары яғына атланы. Граната тотҡан әзмәүерҙәй "укроп" автобустан сыҡты һәм үҙҙәренең иптәштәре яғына йүгерҙе. Автобус шул секундында уҡ ҡуҙғалып та китте. Зариф юрый һәлмәк, яй ғына атлап, нацистар яғына бара. Кем белә, бәлки, был уның ерҙәге һуңғы аҙымылыр? Һуңғы һулышылыр! Юҡ, ул йәшәргә тейеш! Ул ошо башкиҫәрҙәрҙе юҡ итергә тейеш!

Иҫтәренә килгән ике нацист автоматтарын ҡулдарына алып, "Лев"ҡа төбәне. Уртаса буйлы, киң яурынлы Зарифтан бер башҡа оҙон ине дошмандары. Береһе, беҙҙең телдә "негр" тип йөрөтөлгән афро-американецы, шунда уҡ ынтылып, Зарифты ҡармап алды һәм үҙе артынан һөйрәй башланы. Йорттоң артына алып инһәләр - бөттө! Зариф йән көсөнә тартылып, иптәштәре яғына боролоп баш ҡаҡты һәм ергә ҡоларға маташты. Тик ҡыпһыуыр шикелле эләктергән көслө ҡара ҡулдар уны ысҡындырманы, ә, киреһенсә, үҙенә тартып, йән көсөнә "Лев"тың арҡаһына һуҡҡандай булды. Нимәлер арҡа менән күкрәген өтөп алды. Шул мәлдә үк атыу тауыштары яңғыраны. "Укроптар" менән бергә Зариф та ергә ауҙы. "Бөттө! - тигән уй йәшен тиҙлегендә үтте егеттең башынан. - Ошонда булған икән минең һуңғы аҙымым!"

* * *

Зарифҡа ҡапыл шундай рәхәт булып китте! Бер ере лә ауыртмай, һыҙламай! Кәүҙәһе лә еп-еңел, атлап түгел, хатта шыуышып түгел, осоп барғандай! Ул йән рәхәтлеге менән йылмайып ебәрҙе лә күҙҙәрен асты: аҫта ап-аҡ ҡар! Ап-аҡ ҡар өҫтөндә төрлө ҡиәфәттә дүрт кеше ята. Өсәүһе уларҙың дошмандары кейемендә, бөгәрләнеп алға ҡолағаны Рәсәй һалдаты. Арҡаһында кәүҙәһен үтәнән-үтә тишеп сыҡҡан штыкноҗдың һабы ялтырап күренеп тора. Күкрәк тәңгәлендә генә ниҙер ҡыҙарып күренгәндәй. Зариф һалдатҡа яҡыныраҡ барҙы, битен күреп булмай, йөҙтүбән ауған. Текләберәк ҡараны: кем һуң? Танырға тейеш бит ул иптәшен, ярҙам итергә! Зариф эйелеп, һалдатты күтәреп алырға теләне. Әммә ул, бушлыҡты һәрмәгәндәй, иптәшенә ҡағыла алманы. Ә ҡар өҫтөндәге, түш тәңгәлендәге кескәй генә ҡыҙыл тап ҙурайғандан-ҙурайҙы, йәйелгәндән - йәйелде...

- Позыйной "Лев"! Позывной "Лев"! Зариф! - ҡысҡыра-ҡысҡыра йүгереп иптәштәре килеп етте, ерҙәге һалдатты әйләндереп һалды. Зариф эйелеп егеттең күҙҙәренә төбәлде һәм үҙен күрҙе... Үҙе! Үҙе ята ла баһа ҡан эсендә!

Зариф, өнөмдәме был, төшөмдәме, тигәндәй, семетеп ҡарарға теләп, уң ҡулы менән һул ҡулының усына ҡағылды... Әммә ҡағыла алманы... Ҡулдары ғына һауаны йыртып, берберeһе аша, күләгәне үткәндәй, үтеп китте... "Тимәк... Тимәк, мин үлгәнмен! Үлгәнмен! Әммә ... Юҡҡа түгел бит! Ул бит бер автобус тулы балаларҙы ҡотҡарҙы! Күпме иптәштәрен һаҡлап алып ҡалды! Күпме неофашисты, илебеҙҙе юҡ итергә яҫҡынған илбаҫарҙы юҡ итте! Тимәк, ул бушҡа ғына үлмәгән! Бушҡа ғына йәшәмәгән! Уҡытыусыһы әйткәнсә, батырлыҡҡа бөгөн дә урын бар, тимәк! "Батыр булып тыумайҙар, Хамматов! Батыр булып үләләр!"... Һәм ул батырҙарса китте түгелме был донъянан! Ҡурҡып-боҫоп ятманы! Мобилизациянан ҡасып, сит илгә сығып китмәне! Ил саҡырғас, уны яҡлап һаҡҡа баҫты! Тол әсәһенә, йәш кәләшенә, кескәй улына япһарып, улар ышығына боҫоп ҡалманы! Улы, Замиры... Ярай әле бәләкәй генә улы бар! Уның фамилияһын йөрөтөүсе, уның нәҫелен дауам итеүсе улы бар! Тимәк, йәшәй әле Азаматовтар был ерҙә! Йәшәйәсәк!"

... Зариф Арыҫлан улы Азаматовтың йәне ошо уйҙан йылынып, ҡанатланып, ап-аҡ фәрештәләр менән бергә, күккә күтәрелде...

**(Аҙағы. Башы 16-20-сы һандарҙа).**

*ӨЛӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ*

# БӘХЕТЕҢДЕ СӘСМӘ!



**Күптәр өсөн мөһим тойолмаған, йәки иғтибар итмәгән ҡайһы бер күренештәр ҙә элек ололарҙың тәрбиә һабаҡтарында телгә алынған. Бына, мәҫәлән, йәмәғәт урындарында ҡул йыуыу, киптереү тәртибенә ҡарата бер һабаҡ.**

Ғәҙәттә, күп кеше йөрөгән урындарҙа ҡул йыуғыстарҙың тирә-яғына гел һыу сәсрәп бөткән була, ә иғтибарһыҙланып торһаң, үҙеңде лә баштан-аяҡ ҡойондороп китеүҙәре ихтимал. Сөнки күптәр ҡулдарын йыуғандан һуң яҡындағы һауа өрҙөргөс аҫтына ҡуйыр, йәки ҡағыҙ таҫтамалға һөртөр урынға, уларҙы һелкеп "киптерә". Ҡулда ҡалған тамсылар төрлө яҡҡа сәсрәп китә. Ошолай итеүселәрҙе күргән һайын өләсәйемдең: "Ҡулыңды һелкеп киптермә, бәхетеңде ситкә сәсәһең", - тигән һабағын иҫкә төшөрәм. Шунан бала саҡта ҡулымды йыуғандан һуң һелкеү түгел, тамсыһын иҙәнгә төшөрмәҫ элек таҫтамалға үрелергә тырышыуымды хәтерләп йылмаям. Ә бит өләсәйемдең был тыйыуы һис тә ниндәйҙер боронғо хөрәфәт түгел, ни бары тәрбиә-тәртип нигеҙҙәренән бер һабаҡ! Уны күптәр белһә, бәлки, йәмәғәт урындарында ҡул йыуған ерҙәр таҙараҡ та булыр ине...

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

✓ Ҡатын-ҡыҙ һәр саҡ матурлыҡҡа ынтыла, уны булдырырға тырыша, гөлдәр һәм сәскәләр үҫтерә. Миндә шулай һәм ниндәйҙер мәлдә сәскә үҫтереүҙе масштаблы итеү, төрлө сәскәләр үҫтереп һатыу тураһында фекерҙәр уянды.



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘ ТОРҺАҢ...

## сәләмәт булырһың

■ Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, "һабан турғай"ҙарының сәләмәтлеге лә нығыраҡ, күңеләҙе лә һомғолороҡ, кәйефе лә яҡшыраҡ була. Белгестәр быны уларҙың иртәрәк уянып, эш көнө башланғанға тиклем күп эштәрен башҡарып өлгөрөүе менән аңлата. Йәғни, шуға ла уларҙың тормошонда депрессияға урын юҡ, сөнки ваҡытында үтәлмәгән эште башҡарыу өсөн хәүефләнергә кәрәкмәй. Йоҡонан һуң тороусылар йыш ҡына депрессияға бирелә, артыҡ ауырлыҡ менән яфалана.

■ Кальций организм өсөн бик файҙалы, әммә был микроэлементҡа бай булған һөт аҙыҡтарын яратмайһығыҙ икән, уның урынына башҡа аҙыҡтар ҡулланырға ғәҙәтләнегеҙ. Мәҫәлән, борсаҡ йәки чечевица ашы, балыҡ консервалары, һөйәкле иттән бешерелгән аш кальцийға бай. Кальций шулай уҡ аҡ фасолдә, сельдерейҙә күп. Хатта ҡайһы бер тәм-томда ла кальций булыуын иҫәпкә алығыҙ. Тундырмаға миндаль сәтләүеге йәки инжир һалып тәҡдим итһәгеҙ, был аҙыҡтан балалар ҙа баш тартмаясаҡ.

■ Һөт аҙыҡтары диабет менән ауырыусыларға ла файҙалы. Америка ғалимдарының ун йыллыҡ тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, аҙнаһына 35 тапҡыр һөт аҙыҡтары ҡулланыу күп ауырыуҙарҙан ҡотҡара, быға һөттәге кальций һәм макронутриттар йәки аҡһым һәм майҙар булышлыҡ итә. Улар организмды диабеттан һаҡлап ҡына ҡалмай, ябығырға ярҙам итә, гипертония һәм йөрәктең ишемик ауырыуҙарын булдырмай.

■ Ғалимдар йөрәк ауырыуы булған 608 кешене тикшереп, омега-3 майлы кислоталары кешене ҡартайыуҙан һаҡлауын билдәләгән. Бындай кислоталар йөрәк өйәнәгенән һуң тиҙерәк һауығыу мөмкинлеге бирә, ҡартая барған һайын хәтер насарайыуы процесын аҡрынайта, күҙ ауырыуҙарын булдырмай. Майлы кислоталарға бай рацион эсәк яман шеше сире барлыҡҡа килеүҙе 40 процентҡа кәметә. Бындай йәшлек эликсирын һәр магазинда ла һатып алып була. Америка ғалимдары фекеренсә, һөмбаш, макрель һәм сардина балыҡтары майлы кислоталарға бай.

■ Кеше ауырыған саҡта бер аҙ ашамай торһа, күпкә файҙалыраҡ, сөнки был ваҡытта организмдың көсө аш һеңдереүгә түгел, ә инфекция менән көрәшеү өсөн йүнәлтелгән булырға тейеш. Ауырыған мәлдә туҡлыҡлы аштарҙы кәметеп, күберәк емешеләк, бигерәк тә әфлисун, мандарин, лимон, сей йәки быҡтырылған йәшелсә, һыуҙа бешерелгән йәки быҡтырылған балыҡ ашарға, һут эсергә кәрәк. Әйткәндәй, киҙеү вирусы әсе мөхитте яратмай, шуға ла нарзан кеүек минераль һыуҙарҙы күберәк эсеү яҡшыраҡ, ул бауырҙан ҡабул ителгән дарыуҙарҙы ла сығарырға ярҙам итә.

■ Маҡсатҡа ынтылып йәшәү - кеше характерының ыңғай сифаты ғына түгел. Тормошта маҡсат булыуы кешенең физик сәләмәтлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Чикаго психологтары һәм физиологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк осрай. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.

ЗАМАНА ШӨҒӨЛӨ

**Эшҡыуарлыҡтың төрлө өлкәһен алып ҡарағанда иң ауыр, ҡатмарлы йүнәлеш - аҙыҡ-түлек һәм сәскәләр менән булышыуҙыр, моғайын. Сөнки беренсеһе тиҙ генә иҫкереп, ә икенсеһе тиҙ генә һулып бара. Ике осраҡта ла әҙер тауарҙы бик йылдам һатып бөтмәһәң, күпме хеҙмәтең, ваҡытың һәм көсөң әрәм була, тиғән һүҙ. Шулай ҙа бындай ауырлыҡтар республика уңғандарын ҡурҡытмай һәм был ике төр эшмәкәрлек менән булыусылар бихисап. Бөгөн ошондай ике уңған ҡатын-ҡыҙ - сәскәләр үҫтереп, донъяны йәмләүгә үҙ өлөшөн индереүсе, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында гөрләтеп донъя көтөүсе ике һылыуҡай Дилбәр РӘХМӘТОВА һәм Лина ҠУЛБУЛДИНА менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# ХӘЙБУЛЛА КИЛЕНДӘРЕ...

## сәскә үҫтерә



**➔ Сәскәләр матур булһалар ҙа, үтә лә нескә, талапсан үҫемлектәр. Әҙер сәскәне хатта вазала тотоу ҙа мәшәҡәт тыуҙыра, ә уны үҫтереү айырыуса ҡыйын икәнлеге һәр кемгә билдәле. Бындай өлкәгә нисек килдегеҙ?**

**Дилбәр:** Аҡъяр егетенә кейәүгә сығып, бында төпләнеүемә алты йыл. Ижад, сәнғәт өлкәһендә эшләнем кейәүгә сыҡҡанға тиклем, ә Аҡъярға килеп йәшәй башлағас, нимә менән шөғөлләнергә белмәйенсә аптырандым. Шунан ирем менән уйлаштыҡ та, эре мал тота башланыҡ. Өйҙә иттән төрлө ярымфабрикаттар эшләнек, шулай уҡ һөттән төрләндереп аҙыҡ-түлек етештерҙек. Беҙҙең һөт, сыр, аҡ һәм һары май Аҡъярҙа ғына түгел, Өфөлә лә үҙ һатып алыусыһын тапты.

Ҡатын-ҡыҙ һәр саҡ матурлыҡҡа ынтыла, уны булдырырға тырыша, өйөндә лә, баҡсаһында ла гөлдәр һәм сәскәләр үҫтерә. Миндә шулай һәм ниндәйҙер мәлдә сәскә үҫтереүҙе масштаблы итеү, төрлө сәскәләр үҫтереп һатыу тураһында фекерҙәр уянды. Ваҡыт үтеү менән был уй мине тулыһынса солғап алды. Иремдең дә уйҙарымды хуплап, дәртләндереп тороуы ҡанатландырҙы һәм аҡса туплап, ҙур партия торф һатып алдым. Тәүҙә петуния гөлөн үҫтереп ҡарарға булдым. 2023 йылдың көҙөндә петунияларҙың әсәлек ҡыуағына сыбыҡса ялғап ҡуйҙым һәм ҡышын фитолампа аҫтында өйҙә үрсетә башланым.

Петуниялар менән булышҡан арала иремдең кәңәше менән ләлә сәскәләренә лә тотондом. Ләлә сәскәләре бик наҙлыҡайҙар, шулай уҡ өйҙә уларҙы үҫтереү өсөн тейешле шарттар ҙа юҡлығы ниәтемдән бер аҙ ситләштерә бирәп, уныңҡа өлгәшә алыуыма бер аҙ ышаныслымды кәметте.

Ләлә сәскәһенең орлоҡтарын ултыртып, әҙер сәскә өҙөп алғанға тиклем 5 ай тирәһе ваҡыт кәрәк. Мин көн һайын уларҙы өшөтмәҫ өсөн мейес яҡтым, температура режимын һәм дымлылыҡ процентын һаҡланым. "Тырышҡан - ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан", тиҙәр, минең миҫалда әйткәндә, "Тырышҡан - ләлә сәскәләрен үҫтергән" була инде. Шулай, биш ай тигәндә март байрамына иҫ киткес матур ләлә сәскәләре үҫтереп, халыҡҡа тәҡдим иттек. Һорауҙың күп булыуы, әлбиттә, мине ҡанатландырҙы. Был эшмәкәрлегемдә тағы ла киңәйтергә иҫәп тотам.

**Лина:** Минең дә һөнәрем сәнғәт, ижад менән бәйле. Сибайҙа янып-көйөп ижад донъяһында эшләп йөрөгән мәлдә тормош иптәшем Азаматты осратып, Хәйбулла яҡтарына килен булып төштөм. Бында ла, әлбиттә, ижад мөхитенә сумдым. Декрет ялына сыҡҡанға тиклем Йомабай Иҫәнбаев исемендәге Аҡъяр балалар музыка мәктәбендә директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары булып эшләнем, байрамдарҙа алып барыусы булдым.

Мин бер ҡасан да тик ултыра белмәйем, һәр саҡ нимәләр уйлап табам, төрлө өлкәлә белемемде камиллаштырам. Шулай уҡ тирә-яғымда матурлыҡ, унайлыҡ булыуын теләйем. Шуға күрә декрет ялына сыҡҡас уҡ үҙемә шөғөл эҙләй башланым. Бала тыуғанға тиклем алып барыусылар курсын тамамлап, был өлкәләге белемемде камиллаштырҙым. Хәҙер күпселек уҡыуҙар онлайн бит инде. Ошо уҡыуҙар барышында даими рәүештә ләлә сәскәләрен ҡышын үҫтереүҙе күрһәткән видеоларға тап булдым. Сәскәләр өсөн унайһыҙ осорҙа, йәғни ҡышын, үҫтереү "выгонка" тип атала, сөнки беҙ уларҙы үҙебеҙгә кәрәкле ваҡытҡа үҫтереп, сәскә аттырырға тырышабыҙ.

Дыуамаллыҡ менән тотонманым, был теманы башынан аҙағына тиклем тулыһынса, ентекле өйрәндем. Әйтергә кәрәк, Азамат башта минең сәскәләр үҫтереү ниәтемде хупламаны. Мин дә ҡаршылашып торманым, ләкин әкрен генә был эшмәкәрлектең бөтә нескәлеген өйрәнә башланым. Ә Голландиянан сәскә үҫентеләрен ебәреү тураһында килешеүемде күреп, ул ҡарарымдың ныҡлығын аңланы.

Сәскә үҫтереү тураһындағы уй-хыялдан башлап, сәскә гөлләмәлләре өҙгәнгә тиклем ике йыл китте. Әлбиттә, ҙур ярҙамсыларым - тормош иптәшем Азамат һәм балалар. Улар һыу һибешә, мин өлгөрмәгән мәлдә тейешле ваҡытта теплицаны еләтә һәм башҡалар.

**➔ Баҡсасылыҡҡа бер тотонған кеше артабан башҡөллә был өлкәгә сума, йәки, киреһенсә, башҡа әйләнеп ҡарамаҫлыҡ була, тиҙәр...**

**Лина:** Минә баҡсасылыҡ, сәскә үҫтереү бик оҡшай. Был эшмәкәрлегемдә тағы ла киңәйтергә, быйыл сәскәләрҙе үҫтереү мәлендә күҙемә бәрелгән төрлө етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә, тигән уйҙар менән йөрөйөм.

Сәскә үҫтереү - енел эш түгел. Уларҙы сәскә итеп алғансы әллә күпме көс түгелә, финанс йәһәттән дә сығымдар етерлек. Мәҫәлән, тейешле һауа температураһын тотоу өсөн йылылыҡ пушкаһы ла ҡулландыҡ, конвектор менән дә йыллыттыҡ - был иһә электр утын әҙ "һөйрәмәй". Тағы ла һәр ваҡыт дымлылыҡты ҡарап торорға кәрәк, сөнки артыҡ дымлылыҡ та зарарлы, кибеп китһә лә сәскәләр ҡорорға мөмкин. Ғөмүмән, үҙенсәлектәре бик күп. Шулай ҙа, әйтеүемсә, был эшебеҙҙе ташларға уйыбыҙҙа юҡ. Улай ғына ла түгел, әлеге мәлдә гортензия сәскәһе, туя һәм зәңгәр шыршы үҫентеләрен дә тәҡдим итәбеҙ. Ә хыялыма минең - төрлө сәскәләр, емеш-еләк ҡыуаҡтары, ағастар тәҡдим итәсәк ғаилә питомнигы булдырыу.

**Дилбәр:** Сәскәләр менән шөғөлләнгән бер нисә йыл дауамында был эшмәкәрлектең ыңғай һәм кире яҡтарын күрҙек, өйрәндек, уларҙы йырып сығыу юлдарын таптыҡ. Һәр төр сәскәнең үҫтереү технологияһы ла төрләсә, уларҙың барыһын да аңларға кәрәк.

Әлеге мәлдә ләлә сәскәләренән тыш башҡа төр сәскәләр үҫтереп һатыуҙы маҡсат итеп ҡуйғанмын. Бының өсөн айырым теплица төҙөнөк, төрлө сорт орлоҡтар һатып алдыҡ. Тағы ла сәскәләр араһында баҡса еләген үҫтерә башланыҡ, үҫентеләрҙе Краснодарҙан яҙҙырып алдыҡ. Мул уңыш йыйырбыҙ, тип өмөт итәм.

Быйылғы миҙгелдә үҙ алдыма ҡуйған маҡсат - ҡырҡып алына торған сәскә сорттары менән яҡшылап танышыу. Урал арьяғы климатын нисек ҡабул итерҙәр, яраҡлашыу барышы нисек булыр, беҙҙең яҡтар уларға оҡшармы, тигәндәй. Әгәр ҙә сәскәләр менән "килешә" алһаҡ, матур-матур сәскәләр менән Аҡъяр, Хәйбулла халҡын, шулай уҡ тирә-яҡ райондарҙы ла таьмин итәсәкбеҙ. Алла бирһә, уйлағандарыбыҙ ҡабул булһын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Матурлыҡ донъяны ҡотҡарыр", тигән бик тә дөрөҫ фекер йәшәй йәмғиәттә. Ә бөгөнгө әңгәмәселәребеҙ кеүек тирә-яҡтарында матурлыҡ булдырыусы, гүзәллек тойғоһона тоғро ҡалыусы гүзәл заттар булғанда, уның мәғәнәһе бермә-бер арта икәнен раҫлай Ырымбур ҡыҙҙары, Хәйбулла килендәре Дилбәр менән Лина.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ РФА-ның Философия институтында минең коллегам, бик шәп ғалим - Илшат Насыров эшләй, ул Зәйнулла Рәсүлев ижадын өйрәнеүсе төп белгес. Мин уның аша Рәсүлевтың ижады менән таныштым.



ЯҢЫ КИТАП

# ЗӘЙНУЛЛА РӘСҮЛЕВ ҺӘМ СУФЫЙСЫЛЫҠ

**Өфө фән һәм технологиялар университетының Тарих һәм дәүләт идараһы институтында "Шәйех Зәйнулла Рәсүлев һәм Евразия халыҡтарының суфыйсылыҡ мәҙәниәте" тигән коллектив монографияның исем туйы булды.**




Ошо ғилми баҫмала Өфө, Мәскәү, Санкт-Петербург, Махачкала һәм Силәбе ҡалаларының университеттарында һәм ғилми ойошмаларында мосолман мәҙәниәтен, философияһын, әҙәбиәтен һәм тарихын өйрәнеүсе ғалимдарҙың мәҡәләләре донъя күрҙе. Авторҙар - 2023 йылдың май айында бөйөк башҡорт шәйехе Зәйнулла Рәсүлевтың тыуыуына 190 йыл тулыу айҡанлы Өфөлә уҙғарылған ғилми-ғәмәли конференцияла сығыш яһаған тикшеренеүселәр. Был сарала Ибн Сина Фонды президенты (Мәскәү) Хәмид Хадавимогаддам, РФА Философия институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре Андрей Лукашев, башҡа ғалимдар, мәҡәлә авторҙары һәм монографияның мөхәррирҙәре, дини һәм йәмғәт ойошмалары вәкилдәре, педагогтар һәм студенттар ҡатнашты.

Зәйнулла Рәсүлев XIX быуат аҙағында - XX быуат башында башҡорттар араһынан сыҡҡан иң күренекле Ислам ғилеме белгесе, мәғрифәтсе, педагог, Нәҡшбәндиә тәриҡәте суфыйҙарының рухи етәксеһе булараҡ танылыу ала. Әлбиттә, баҫмала уның тормош юлы һәм эшмәкәрлегенә арналған мәҡәләләрҙән тыш, ошо дәүерҙәге башҡорт донъяһының рухи торошон, суфыйсылыҡ тәғлимәтенең башҡорт халҡының традицион мәҙәниәтенә йоғонтоһон, Рәсәйҙә Ислам диненең тарихи-мәҙәни яҙмышын, күренекле ориенталист Василий Бартольд "Башҡорт халҡының рухи короле" тип нарыҡлаған Зәйнулла Рәсүлевтың бай рухи мираҫын өйрәнеү мәсьәләләрен сағылдырған ғилми хеҙмәттәр ҙә урын алған.

Өфө фән һәм технологиялар университетының Тарих һәм дәүләт идараһы институты директоры Әминә Уразова, баҫманың исем туйын асып, ошолай тине: "Шәйех Зәйнулла Рәсүлев шәхесенең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Уның йоғонтоһо беҙҙең төбәк мосолмандарына ғына түгел, Себер, Алыҫ Көнсығыш, Урал һәм Волга буйы диндарҙарына ла барып етә. Зәйнулла Рәсүлев эшмәкәрлеген дауам итеүселәрҙән Ризаитдин Фәхретдиновты, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевты, Шәйехзада Бабичты һәм башҡа бик күптәрҙе атарға була. Бөгөн, донъяла деструктив дини ғәмәлдәр таралған бер мәлдә, ғалимдарға, йәмғәт эшмәкәрҙәренә Исламдағы суфыйсылыҡ традициялары хаҡында һүҙ алып барыу мөһим". Ғалимә суфыйсылыҡтың кешеләргә бер-береһен аңлай алыу мөмкинлеген биреүсе, уларҙы берләштереүсе фактор булыуына баҫым яһаны.

Сараның хөрмәтле ҡунағы, Ибн Сина Фонды президенты Хәмид Хадавимогаддам да суфыйсылыҡ традицияларын өйрәнеүҙе мөһим мәсьәләләрҙең береһе тип билдәләне: "Былтыр шәйех Зәйнулла Рәсүлевҡа арналған конференцияла ҡатнашыу беҙгә уникаль мөмкинлек бирҙе. Ошо айҡанлы һеҙҙе монографияның баҫылып сығыуы менән ҡотларға теләйем. Иранда суфыйсылыҡтың ҙур тарихы бар, һәм бөгөн күп кенә тикшеренеүселәр уны өйрәнә. Башҡортостанда суфыйсылыҡты ғилми өйрәнеү уларҙы ҡыҙыҡһындыра. Беҙ Рәсәй һәм Иран тикшеренеүселәре хеҙмәттәшлеген үҫтереүгә шатланып булышлыҡ итәсәкбеҙ, бигерәк тә шәйех Зәйнулла Рәсүлевтың мираҫын өйрәнеү буйынса. Бөгөн, Өфө университеты ректоры менән осрашҡан саҡта, ошо мәсьәләләрҙе тикшерҙек. Ошондай хеҙмәттәшлектең бер йүнәлеше - Өфө фән һәм технологиялар университеты базаһында иранистика үҙәген асыу. Тиҙҙән ул эшләй башлар тигән өмөттәмен".

Хәмид Хадавимогаддам университетҡа уникаль бүләк тапшырҙы - ул билдәле ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн Фаҙлан юлъяҙмаларының һаҡланып ҡалған берҙән-бер данаһының теүәл күсермәһен һәм уның фарсы телендәге тәржемәһен алып килгән. Был Фаҙлан ҡулъяҙмаһының Рәсәйҙәге берҙән-бер тулы күсермәһе, ул X быуат технологияһына ярашлы ҡулдан эшләнгән ҡағыҙға күсерелгән һәм ошо заманда ҡулланылған ҡара менән яҙылған.

Монографияның яуаплы мөхәррире, Өфө фән һәм технологиялар университеты Тарих һәм дәүләт идараһы институтының әйҙәүсе белгесе Искәндәр Сәйетбатталов баҫманы әҙерләүҙә төрлө йүнәлештә тикшеренеүҙәр алып барған белгестәр - тарихсылар, филологтар, философтар, этнографтар, архив белгестәре ҡатнашыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

"Монографияла Зәйнулла Рәсүлевтың биографияһы буйынса яңы материалдар, уның төрлө фән һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, мәҫәлән, Мифтахетдин Аҡмулла менән бәйләнештәре, мосолман мистицизмы вәкилдәренән, суфыйҙарҙың Граждандар һуғышы осоронда һәм Совет власының тәүге йылдарында ижтимағи әүҙемлеге хаҡында мәғлүмәттәр бар. Бында шәйех Зәйнулла Рәсүлевтың ниндәй дини тәғлимәт әһеле булыуы хаҡында бик ҡыҙыҡлы тема сағылдырылған. Суфыйҙар - башҡа кешеләрҙе үҙҙәре өлгөһөндә хаҡ юлға сығарыусылар. Әммә Зәйнулла Рәсүлев йәнә яҙыусы булараҡ та билдәле, тикшеренеүселәр уның бар текстарын да өйрәнеп, мәғәнәләрен асып бөтмәгән әле", - тип билдәләне ғалим.

Мәскәү ҡунағы Андрей Лукашев баш ҡала һәм Башҡортостан ғалимдарының суфыйсылыҡты өйрәнеү өлкәһендәге ғилми хеҙмәттәшлеген билдәләп үтте. "Башинформ" агентлығына биргән интервьюһында ул Ибн Сина Фонды булышлығында Башҡортостандағы суфыйсылыҡ мәсьәләләре сағылдырылған ике китап баҫылып сығыуын иғтибарға алды. "РФА-ның Философия институтында минең коллегам, бик шәп ғалим - Илшат Насыров эшләй, ул Зәйнулла Рәсүлев ижадын өйрәнеүсе төп белгес. Мин уның аша Рәсүлевтың ижады менән таныштым һәм уның идеяларын үҙемдең суфыйсылыҡҡа арналған мәҡәләләремдә ҡулландым. Минең байтаҡ ҡына коллегаларым Зәйнулла Рәсүлевты, Рәсәй суфыйсылығы классиктарының береһе булараҡ, юғары баһалай һәм уның мираҫын өйрәнә", - тине Андрей Лукашев.

ФӘҺЕМ

## БӘХЕТ ҠАНУНДАРЫ



**Тормош - ҙур университет, тик өйрәнергә теләмәгәнгә ул күпте бирмәй.**

Бәхетле булыу - ул унышһыҙлыҡтар һәм борсолоуҙарһыҙ йәшәү генә түгел әле. Һин хатта илаһаң да был бәхетһеҙлекте аңлатмай. Һин хатта түшәктә ятып ҡына тороуға дусар ителһәң дә тулы ҡанлы тормош менән йәшәй алаһың. Сөнки һин хыялланыуҙан туҡтамайһың. Хатта һин яңғыҙлыҡта ла үҙ-үҙең менән аралашып бәхетле була алаһың.

Бәхетле булыу - ул сал сәстәргә ҡарамай йәш була белеү. Бәхетле булыу - ваҡытың булмаһа ла балаларыңа әкиәт һөйләй алыу... Улар һине аңламаһа ла, ата-әсәне яратыу... Бар эштәрең дә тигеҙ генә бармаһа ла, изгелекле булып ҡалыу... Хаталарҙан тормош һабаҡтары табыу... Былар - барыһы ла бәхет.

**Аугусто КЮРИ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



## ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Йышлыҡтарҙы нисек контролләргә

Был уңыш көсәйтеүсе бары тик минең тукланыу тураһындағы аңлатмаларымды тулыландыра ғына. Ғаләмдә бөтә нәмәнен тирбәлеше булғанлыҡтан, һеҙгә тышҡы йоғонтоларҙың энергетик кимәлегеҙгә тәьсирен өйрәнеү менән шөғөлләнергә кәрәк. Әгәр уларҙы энергия менән тулыландыра алмаһағыҙ, энергияғыҙҙы тирә-яҡ мөхит факторҙары һурып алып бөтһә, теләк һәм хыялдарығыҙҙан тотош бер программа төҙөп ҡуйыуҙан ни файҙа.

Мәҫәлән, бер туҡтауһыҙ өс сәғәт телевизор ҡарағандан һуң үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ? Һуты һығып алынған лимон кеүекме? Аптырарлыҡ түгел, сөнки был ҡулайлама сығарған тулҡын йышлығы һеҙҙең энергетик запасығыҙҙы юҡ итергә тырыша.

Музыка - тирә-яғығыҙҙағы бушлыҡты тултырырға ярҙам иткән һәм йышлыҡтарҙы контролдә тоторға өйрәткән яҡшы сара. Уның һөҙөмтәлелегенә инаныу өсөн бер төрлө ике үҫемлекте алығыҙ һәм уларҙы ҡояшлы ике урынға урынлаштырығыҙ. Тәүлектең бер үк ваҡытында һыу һибегеҙ. Һуңынан уларҙың береһенә дүрт сәғәт буйына - Моцартты, икенсеһенә шул уҡ ваҡыт ауыр рок тыңлатығыҙ. Һөҙөмтәләрҙе үҙегеҙ сағыштырығыҙ.

Бынан тыш, төҫтәр гаммаһы менән тәжрибә үткәрегеҙ. Ике сәғәт ҡыҙыл төҫ өҫтөнлөк иткән бүлмәлә 10 минут ултырып ҡарағыҙ һәм көсәргәнештең ни тиклем ҙур икәнен үҙегеҙҙә тойорһоғоҙ. Шуға күрә бер ваҡытта ла энергетик йышлыҡтарҙың тормошоғоҙға тәьсир итеү көсөндә шикләнмәгеҙ.

### Сексуаль трансмутация

Рухи остаздар сексуаль энергияны Ғаләмде хәрәкәткә килтергән фундаменталь көс тип баһалай. Иң ҡыҙығы шунда: был темаға ҡағылһам, күптәр: "Хәҙер нәфсене тыйыу тураһында һөйләй башлар инде. Йәнәһе, әгәр бай рухи тормош тураһында хыялланһам, секс тураһында оноторға тейешмен".

Тыйылып тороу бик файҙалы, әммә уны мжбүр итеп булмай, уға ихтыяж тәбиғи рәүештә тыуа. Бының өсөн барлыҡ энергетик каналдарығыҙ әҙер һәм таҙа булырға тейеш.

Әгәр стаканға бер туҡтауһыҙ һыу ҡойоп торһаң, ул тулып, түгелә. Үҙегеҙҙе көслән тыйып торһағыҙ, һуңынан барлыҡ энергияғыҙҙы эротик төштәргә сарыф итеүҙән ни файҙа?

Энергетик каналдар (нади) тулыһынса таҙармай тороп, сексуаль энергия тотҡарлыҡһыҙ өҫкә күтәрелә алмай. Сексуаль энергия һеҙҙең энергетикағыҙҙың яғыулығы булып тора. Әгәр нимәлер ижад итергә теләһәгеҙ, энергия резервын ҡулланырға кәрәк буласаҡ. Антенналағыҙҙы әүҙемләштерер өсөн уны умыртҡа һөйәге буйынан өҫкә күтәрергә мәжбүр итергә кәрәк.

Барлыҡ нәмәне хәрәкәткә килтереүсе энергияның сексуаль энергия икәнлеген аңлаһағыҙ, сексуаллеккә мөнәсәбәтегеҙҙе үҙгәртәсәкһегеҙ. Сексуаль энергия - тиңһеҙ!

Мин һеҙҙе ябай ғына алымға өйрәтмәксемен. Әйҙә ул скороварканы ҡулланыу инструкцияһын хәтерләтһен. Газды йәки электр плитәһен тоҡандырығыҙ (был сексуаль ҡуҙғыу үҫеше фазаһына тура килә). Ҡапҡасты асмағыҙ (һеҙгә үҙегеҙҙе контролдә тоторға өйрәнергә кәрәк. Бының өсөн тын алыуығыҙҙы файҙаланығыҙ. Тын алыуығыҙҙы йылағыҙ һәм ҡуҙғыуығыҙға умыртҡа һөйәге буйлап күтәрелеү мөмкинлеге бирегеҙ. Кәрәк икән, бер нисә минутҡа пауза яһағыҙ). Ахырҙа "быу" ҡапҡастағы бәләкәй генә тишекте табыр. Ундай тишек һәр кемебеҙҙә бар һәм ул умыртҡа һөйәгенең иң аҫтында урынлашҡан. Энергия уның аша сыға башлаһа, ысын родеоға әҙерләнегеҙ!

**Пьер МОРАНСИ.**



## 3 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Раневская". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Пушкин". "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Космические истории". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Триггеры". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Жизнь замечательных". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Легкие деньги". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Галка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**10.45 Ҡурай даны. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус.яз.). [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз.).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Этно-краса. [6+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00, 3.15 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**21.00 Наши годы. [12+]**
**22.00, 3.45 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.15 Спектакль "Море мечты". [12+]**
**4.15 Телецентр. [12+]**
**5.15 Счастливый час. [12+]**

## 4 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Раневская". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Пушкин". "Свидетели Эйзенштейна". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Легкие деньги". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Спроси Суркову". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. "20 лет спустя". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Анекдоты". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Драгоценные истории". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Галка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Ете егет. [12+]**
**10.45 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**11.00 Автограф. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45, 13.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Ат уйнатып. Битва командиров. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Бай. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [12+]**
**18.00 Письма солдатам. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**21.00 Наши годы. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.15 Бәхетнамә. [12+]**
**1.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**1.45 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**3.45 Күстәнәс. [12+]**
**4.15 Телецентр. [12+]**
**5.15 Счастливый час. [12+]**

## 5 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Раневская". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Пушкин". "Жизнь замечательных". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Триггеры". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Не лыком шиты". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Космические истории". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Летописи конца времен". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Обман веществ". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Галка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**11.00, 3.45 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 КультУра. [6+]**
**15.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**16.00, 3.15 Автограф. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**1.30 Спектакль "Ой, кто там лежит?" [12+]**
**4.15 Телецентр. [12+]**
**5.15 Счастливый час. [12+]**

## 6 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Раневская". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Пушкин". "Собрались с мыслями". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Кот Шрёдингера". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Баден-Баден". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. "20 лет спустя". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Психика". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Отражения. Концерт к юбилею А.С. Пушкина. Прямая трансляция из Болдино.
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Ҡурай даны. [12+]**
**10.15, 4.00 История одного села. [12+]**
**10.30 Дорога к храму. [6+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45, 13.45, 17.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Дознание. [12+]**
**16.15 Патриот РФ. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 История признания. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**4.15 Телецентр. [12+]**
**5.15 Счастливый час. [12+]**

## 7 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 17.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Х/ф "Русский бунт". К юбилею Александра Сергеевича Пушкина. [16+]
0.10 "Матадор". [16+]
1.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Пушкин". "Не лыком шиты". [16+]
1.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Неформат". [16+]
2.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Триггеры". [16+]
3.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Баден-Баден". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. "20 лет спустя". [16+]
4.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Жизнь замечательных". [16+]
5.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Свидетели Эйзенштейна". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 9.30 Утро России.
9.00, 14.30, 21.15 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Поймай меня, если сможешь". [12+]
23.25 "Истории Большой Страны". [12+]
0.25 Х/ф "Пока смерть не разлучит нас". [12+]
3.50 Т/с "Версия". [16+]
4.40 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 18.00 "Йома". Нравственные ценности Ислама. [6+]**
**10.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.15, 22.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Лит-ра. [6+]**
**15.45 Этно-краса. [6+]**
**16.00 Хазина. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45, 6.00 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**21.00 Наши годы. [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**23.45 Концерт "С песней по жизни". [12+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**4.00 Спектакль "Похищение девушки". [12+]**

## 8 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Сказка о царе Салтане". К юбилею Александра Сергеевича Пушкина. [0+]
14.00 Х/ф "Станционный смотритель". [0+]
15.20 Х/ф "Метель". [0+]
16.50 Премьера. "Я люблю мою страну". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Эксклюзив". [16+]
19.10 "Михаил Задорнов: вся жизнь". [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 Х/ф "Камон Камон". [16+]
1.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Пушкин". "Драгоценные истории". [16+]
2.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Триггеры". [16+]
3.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Легкие деньги". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Свидетели Эйзенштейна". [16+]
4.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Психика". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Вести. Местное время.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "В кругу друзей".
12.50 "Доктор Мясников". [12+]
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Милая соседка". [16+]
0.40 Х/ф "Любовь по найму". [12+]
4.10 Х/ф "Пять лет и один день". [12+]
5.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Ҡурай даны. [12+]**
**8.00 Бай. [12+]**
**8.30 Ете егет. [12+]**
**9.15, 19.00 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 Детей много не бывает. [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Ат уйнатып. Битва командиров. [6+]**
**11.45 Апчхи. [6+]**
**12.00 Сулпылар. Финалисты-2023. [6+]**
**12.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00 Уроки жизни. [12+]**
**13.30, 3.00 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00, 3.30 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.15 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.15, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Ҡурай-шоу. [12+]**
**0.15 Спектакль "Сваха". [12+]**
**2.15 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**5.30 Тормош. [12+]**
**6.00 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**

## 9 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Берёзка". Красота по-русски". [12+]
13.30 "Видели видео?" [0+]
15.05 Большая история. [16+]
17.05 Д/ф Премьера. "Русский летчик Ярошенко. "Гудбай, Америка!" [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Пушкин". "Театральный подкаст". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Собрались с мыслями". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Обман веществ". [16+]
2.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Баден-Баден". [16+]
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Не лыком шиты". [16+]
3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. "Триггеры". [16+]

### РОССИЯ 1

6.00, 1.05 Х/ф "Девушка в приличную семью". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.00 Х/ф "Виражи судьбы". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Йома. [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00, 18.45, 5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**15.15, 5.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.45 Честно говоря. [12+]**
**16.30 Спектакль "Аҡ ҡалфаҡ". [12+]**
**18.00 Дорогу осилит идущий. [12+]**
**19.00 Патриот РФ. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [6+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**21.00 Дознание. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 3.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Юбилейный вечер Назифы Кадыровой. [12+]**
**1.15 Спектакль "Последние". [12+]**
**3.45, 6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**
**4.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**5.30 История одного села. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлҡағиҙә - Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (26) дүшәмбе | 2:43 | 4:46 | 13:30 | 18:55 | 21:42 | 23:46 |
| 4 (27) шишәмбе | 2:43 | 4:46 | 13:30 | 18:56 | 21:43 | 23:47 |
| 5 (28) шаршамбы | 2:42 | 4:45 | 13:30 | 18:57 | 21:44 | 23:48 |
| 6 (29) кесе йома | 2:42 | 4:44 | 13:30 | 18:57 | 21:45 | 23:48 |
| 7 (1) йома | 2:41 | 4:43 | 13:30 | 18:58 | 21:46 | 23:49 |
| 8 (2) шәмбе | 2:41 | 4:43 | 13:30 | 18:59 | 21:47 | 23:50 |
| 9 (3) йәкшәмбе | 2:41 | 4:42 | 13:30 | 19:00 | 21:48 | 23:50 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

АФАРИН!

# ТЕЛЕФОНЫН ОНОТТОРОРЛОҠ...

## ниндәй спектакль уйлап табырға?



**Быйылғы май айының йәмен тағы ла арттырыр бик күп мәҙәни саралар баш ҡала халҡын көн һайын яңы бер мауыҡтырғыс сәйәхәткә әйҙәп, өйөрөлттө генә. Шулар араһында 16-23 май көндәрендә үткән "Туғанлыҡ" Халыҡ-ара милли театрҙар фестивале лә бар. Ул өфөләргә Рәсәйҙең генә түгел, Ҡаҙағстан, Абхазия, Ҡырғыҙстан театрҙарының сихри донъяһына байҡау яһарға, ижади үҫешен баһаларға ярҙам итте.**

Биш йылға туҡталып торған "Туғанлыҡ" фестивале, ниһайәт, кире тергеҙелде һәм 1991 йылдан алған матур йолаларына тағы ла йәм өҫтәп, офоҡтарын киңәйтте: хәҙер фестиваль төрки телле театрҙарҙы ғына түгел, ә барлыҡ милли театрҙарҙы берләштерә. Фестивалдең шарттарын шулай үҙгәртеүҙәренә ойоштороусылар ғына түгел, тамашасылар ҙа шатланып туя алманы. Сөнки был сара иң яҡшы спектаклдәрҙе сәхнәлә уйнау ғына булманы, ә матур бер тел һәм рух байрамына әүерелде: баш ҡала сәхнәләрендә ҡаҙаҡ, тыва, мари, сыуаш, татар, урыҫ, башҡорт, ҡумыҡ, абхаз, ҡалмыҡ, ҡырғыҙ, осетин телдәре яңғыраны. Барлығы 15 спектакль күрһәтелеп, шуларҙың икәүһе - М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының Н. Асанбаев пьесаһы буйынса ҡуйылған "Ҡыҙыл паша" менән А. Пушкин исемендәге Псков академия драма театрының (Рәсәй милли драма театрының филиалы) М. Булгаковтың әҫәре буйынса "Морфий" спектаклдәре конкурстан тыш уйналды. Шулай уҡ күптән түгел премьераһы үткән "Бөйрәкәй" спектакле төндә күрһәтелде.

Фестивалдең конкурс өлөшөн В. Кок-оола исемендәге Тыва милли музыкаль-драма театры асып ебәрҙе. Улар Өфө тамашасыһына һәм ҡунаҡтарға Федерико Лорканың "Бернарда Альба йорто" спектаклен тәҡдим итте. Тамашасылар Әлмәт татар дәүләт драма театрының Муса Йәлилдең либреттоһына таянып ижад ителгән "Алтынсәс. Мираҫ" һәм Ғ. Камал исемендәге Татар дәүләт академия театрының "Көл" спектаклдәрен айырыуса йылы ҡабул итте. Ә бына С. Чанба исемендәге Абхазия дәүләт драма театры бөйөк рус яҙыусыһы Федор Достоевскийҙың "Ярлы кешеләр" романы буйынса ҡуйылған "Ловелас" спектаклен уйнаһа, Ҡалмыҡстандан килгән Б. Басангов исемендәге Милли драма театры Александр Грибоедовтың "Горе от ума" шиғри комедияһына мөрәжәғәт иткән. Сыңғыҙ Айытматовтың әҫәрҙәре лә актуаллеген юғалтмай: А. Салауатов исемендәге Дағстан дәүләт ҡумыҡ музыкаль-драма театры артистары "Диңгеҙ буйын иңләй ала эт" һәм К. Жантошев исемендәге Ыҫыҡкүл өлкә музыкаль драма театры "Аҡ пароход" спектаклдәрен алып килгән. **Әйткәндәй, һуңғыһы фестивалдең иң юғары баһаһына лайыҡ булды һәм спектаклдең ҡуйыусы режиссеры Уланмырҙа Ҡарыпбаев "Иң яҡшы режиссер эше" тигән номинацияла билдәләнде. Шулай уҡ был спектаклдә Бекей ролен оҫта башҡарған Света Әбдеҡәдирова "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында бүләкләнде.** "Ыҫыҡкүл театрының спектакле геройҙарҙың көсө, ғәйрәте, эскерһеҙлеге, асыҡ йөҙҙәре менән арбаны. Был спектаклде 28 йәшлек режиссер Уланмырҙа Ҡарыпбаев студенттары менән сәхнәләштергән. Шуға ла унан йәшлек көсө, халыҡсанлыҡ урғып тора. Уны ҡарағанда тамашасының күңелһеҙләнеп, телефонына үрелергә бер генә лә минут ваҡыты булманы. Ә йөрәк гел генә һулҡылдап торҙо, спектакль күңелдең иң нескә ҡылдарына ҡағылды" , - тине "Аҡ пароход" тураһында һөйләп З. Исмәғилев исемендәге ӨДСИ доценты, театр тәнҡитсеһе Айһылыу Сәғитова.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

ПРЕМЬЕРА!

# МӨХӘББӘТКӘ ЯҢЫ ҠАРАШ




**Баш ҡалабыҙҙың театр донъяһында тағы ла бер матур яңылыҡ - М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһендә "Мөхәббәт хаҡы" тигән яңы спектакль күрһәтелде. Уны Валентин Афониндың "Шекспирға репетиция яһайбыҙ" тигән пьесаһы буйынса театрҙың башҡорт труппаһы баш режиссеры Рөстәм Хәкимов сәхнәләштерҙе.**

Спектаклдә һүҙ Уильям Шекспирҙың "Ромео һәм Джульетта" әҫәрен сәхнәләштерергә йыйынған театр бүлеге студенттары тураһында бара. Улар ошо трагедияла һүрәтләнгән ваҡиғаларҙы, хис-тойғоларҙы сәхнәлә генә түгел, ә үҙ тормоштарында ла кисерә. XIV быуатта йәшәгән геройҙар менән XXI быуат кешеһенең айырмалары һәм оҡшаш яҡтары ниндәй? Замандаш геройҙарыбыҙ яҙмыштарын үҙ ҡулдарына алырмы, әллә мәңгелек мөхәббәт тарихтары менән халыҡ хәтерендә ҡалған парҙың юлын ҡабатлармы? Бына ниндәй һорауҙар тыуҙыра спектакль тәүге минуттарҙан уҡ. "Шекспирҙың әҫәре барыһына ла таныш, унда ике ырыу дошманлаша һәм был ике йәш йөрәкте бәхетһеҙ итә. Ошо пьесаны уйнарға йыйынған театр факультеты студенттары Асҡар, Динә, Йондоҙ Шекспир геройҙарының кисерештәре, уй-теләктәре менән яна. Күреүегеҙсә, Валентин Афониндың төп нөсхәләге геройҙарының исемдәрен башҡортсаға үҙгәрттек, шулай уҡ Өфө урамдары атамалары ла яңғырай. Был тамашасыны ошо хәл-ваҡиғаларға яҡыныраҡ итә. Спектакль буйынса эш башлауыбыҙға 2 ай тирәһе ваҡыт үтте. Валентин Афониндың пьесаһы мине йәштәр темаһына арналыуы, улар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡтыртыуы менән йәлеп итте. Үҙ-үҙең булып ҡала белеү мөһимлеген, йәмғиәттәге ниндәйҙер ҡаршылыҡлы ҡағиҙәләрҙе емерергә ҡурҡмау, мөхәббәт барыһын да еңеүсе көс булыуын театрыбыҙ тамашасыһына ла еткергебеҙ килде", - тине спектаклдең ҡуйыусы режиссеры Рөстәм Хәкимов.

Журналистар менән осрашыу ваҡытында ҡуйыусы рәссамдар Екатерина Сомова һәм Денис Черепанов (яҡтылыҡ буйынса ла ул эшләгән), төп ролдәрҙе башҡарыусы актерҙарҙан Динислам Сафин, Гөлсәсәк Зарипова, Венер Камалов, Рәмзил Сәлмәнов та һөйләшеүҙә ҡатнашты. Спектаклдең сәхнә биҙәлеше бик үҙенсәлекле: тамашасыға Шекспир үҙе быуаттар аша замандаштарыбыҙ артынан күҙәтеп торғандай тойола. Ҡуйыусы рәссамдар Екатерина Сомова һәм Денис Черепанов әйтеүенсә, бында боронғо һәм бөгөнгө берләшә, сәхнә уртаһындағы шаҡмаҡ портал ошо ике донъяға илткән ишекте сағылдыра. Ошо ишек аша "Мөхәббәт хаҡы" спектакле кешелекте борсоған мәңгелек һорауҙарға яуаптар эҙләшә. Уны тамаша ҡылған йәштәр һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн дә бик күп серҙәр сиселер, спектаклдән тормошҡа ҡараштарҙы үҙгәртерлек фәһем алыныр һәм саф мөхәббәт хисенең көсөнә инаныстар артыр, тип өмөт итә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының ижади коллективы. "Мин Ромеоны уйнаған Асҡар тигән студент егет ролен башҡарам. Геройым кеүек үк, театр факультетында уҡыған кеше булараҡ, шулай уҡ ҡыҙҙар һәм атай-әсәйҙәр менән мөнәсәбәттәребеҙ ҡайһы осраҡтарҙа оҡшаш булып китеүен күрәм. Шуға Асҡарҙың кисерештәрен аңлайым, яҡын ҡабул итәм. Әммә сәхнәлә үҙемде түгел, ниндәйҙер икенсе образ тыуҙырыу маҡсатын алдыма ҡуйҙым һәм әле лә эҙләнеүҙәремде дауам итәм", - ти актер Динислам Сафин.

Әйткәндәй, 30 майҙа тәүге тапҡыр тамашасы хөкөмөнә сығарылған "Мөхәббәт хаҡы" спектаклен күреп өлгөрмәгәндәр өсөн матур яңылыҡ: театрҙың киләһе ижад миҙгеле сентябрь айында тап ошо әҫәр менән асыласаҡ.

**Айгөл ҒАБДИНОВА.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2-9 июндә** Өфөлә Рәсәйҙең бөләкәй ҡалалары театрҙары фестивале уҙа.

**4 июнь "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 11.00 6+

**5 июнь "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), провинциаль проза. 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**4, 5, 7 июнь "Ҡурсаҡ театрына сәйәхәт"**. 11.00 6+

**4, 5, 7 июнь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 11.00 6+

**7 июнь "Чем пахнут одуванчики?"** (В. Щербакова). 16.00 0+

**8 июнь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12.00, 15.00 6+

**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 июнь "Барокконан рокка ҡәҙәр"** концерт. 6+

**6 июнь "Йәйге джаз"** концерт. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**3, 4, 7 июнь Премьера! "Маугли. Книга джунглей"** (Р. Киплинг, Р. Ғәйнуллина), әкиәт. 11.00 6+

**6 июнь "Три поросенка"** (З. Сөләймәнов), музыкаль әкиәт. 11.00 0+

**8 июнь "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А. Пушкин, Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

### БР Милли музейы

**5 июнь "Кеше ҡулы теймәгән донъя"** Эколог көнөнә арналған мәҙәни-ағартыу сараһы. 6+

**9 июнь "Селтәр бәйләү оҫтаһы"** оҫталыҡ дәресе. 12+

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ПОЕЗҒА ТАШЛАМА...



**Башҡортостан уҡыусылары йәйге каникул ваҡытында "Рәсәй тимер юлдары" билеттарына 50 процентлыҡ ташлама алырға мөмкин.**

Билетты кассала, ойошманың рәсми сайты һәм "Рәсәй тимер юлдары. Пассажирҙарға" мобиль ҡушымтаһы аша һатып алырға мөмкин. Балалар тураһында мәғлүмәтте индереп һәм "Тулы" тигән тарифты күрһәткәс, балалар билеты автоматик рәүештә иҫәпләнә. Ташлама 10 йәштән 17 йәшкә тиклемге балаларға: тиҙ йөрөшлө һәм алыҫ араларға йөрөүсе пассажир поездарының (шул иҫәптән фирма поездарының) дөйөм һәм плацкарт вагондарына; Рәсәй биләмәһе буйлап (РФ станциялары араһында) хәрәкәт иткәндә "ФПК" акционерҙар ойошмаһы поездарындағы моторвагон хәрәкәтсән составының (алыҫ араларға йөрөүсе электропоездың) 2-се һәм 3-сө класлы вагондарына билет алғанда бирелә. Шулай уҡ пассажир һәм тиҙ йөрөшлө поездар (шул иҫәптән фирма поездары) составындағы дүрт урынлы купелары булған ике ҡатлы пассажир вагондарында йөрөгәндә 50 процент ташлама ҡулланыла.

*Һәр тамашасы ҡулында телефон, шунда уҡ фото-видео төшөрәләр. Кеше телефондарын һәм социаль селтәрҙәрен онотторлоҡ спектаклде нисек уйлап табырға? Бына ниндәй һорау тора бөгөн театрҙар алдында.*



АФАРИН!

# ТЕЛЕФОНЫН ОНОТТОРОРЛОҠ...

## ниндәй спектакль уйлап табырға?




(Башы 15-се биттә).

**"Иң яҡшы ир-егет роле" С. Сәйфуллин исемендәге Ҡарағанда өлкә академия ҡаҙаҡ драма театрының актеры Бауржан Нурмагамбетовҡа бирелде. Ә бына "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" һәм "Иң яҡшы икенсе пландағы ир-егет роле" номинацияларын В. Тхапсаев исемендәге Төньяҡ Осетия дәүләт академия театрының "Король Лир"ҙа уйнаған актерҙары Әминә Агкацева менән Аслан Тигиев яуланы.** Әйткәндәй, уларҙың Уильям Шекспир тарафынан 17-се быуатта уҡ ижад ителгән трагедияһы заманса яңғыраш алып, тамашасыға айырым кешенең генә түгел, тотош дәүләттең ҡотолғоһоҙ үҙгәрештәргә дусар булғандағы "кисерештәрен" сағылдырҙы. "Улар был әҫәрҙе икенсе жанрға әйләндергән һымаҡ: гүйә Шекспир трагедия түгел, ә тарихи хроника ижад иткән. Йәғни, баҫым айырым кешеләр һәм уларҙың күңел үҫешенә, трагик геройға, уның трагик ғәйебенә яһалмай һәм беҙ үҙебеҙҙе уға тиңләп, спектакль аҙағында катарсис кисерә алмайбыҙ. Был Лирҙың трагедияһы ла, ғаләм трагедияһы ла түгел, ә дәүләтселек трагедияһы, катастрофа", - ти был турала философия фәндәре докторы, сәнғәтте өйрәнеү кандидаты, профессор һәм белгестәр советы ағзаһы Галина Вербицкая.

**Башҡортостан театрҙарының данын яҡлау Салауат башҡорт драма театры иңенә ятты. Улар фестивалгә Мостай Кәрим повесы буйынса режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев сәхнәләштергән "Ярлыҡау" спектаклен тәҡдим иткәйне. Коллектив "Милли классиканың заманса сиселеше" номинацияһында билдәләнде.**

Барлыҡ тамашасыларҙы хайран иткән спектаклдәр араһында иң ялҡынлы алҡыштар Ғ. Мөсирәпов исемендәге Ҡаҙаҡ дәүләт академия балалар һәм үҫмерҙәр театры актерҙарына бағышланды, тиһәк тә хата булмаҫ. **Сөнки Алматы ҡалаһынан килгән театрҙың Ильяс Йәнсоғоров поэмаһы буйынса режиссер Фәрхәт Молдағәли сәхнәләштергән "Ҡола айғыр" драмаһы барыһын да тәржемәһеҙ ҙә арбаны.** Төп герой Аҡан Серэ һәм уның елдәй елер Ҡола айғырының яҙмышы берелһен дә битараф ҡалдыра ла алмай ине, сөнки улар - үткән быуатта бер ғәйепһеҙгә хөкөм ителгән миллионлаған сәйәси золом ҡорбандарын һәм уларҙың яҡындарын кәүҙәләндергән образдар. Бәйгелә еңеүгә яҡынлашып килгән Ҡола айғырҙы халыҡ араһында торған берәү атып йыҡҡас, һауанан ҡойолоп төшкән йөҙләгән ҡыҙыл дағалар залдағы һәр кемгә халҡының шулай ҡапыл ауған терәктәрен, арҙаҡлы шәхестәрен хәтерҙәренә төшөрҙө. Был ижади коллектив үҙенең йөрәктәрҙе өҙгөс йырмоңо, төрлө тәбиғәт тауыштарын оҫта яңғыратыуы һәм спектаклде музыкаль, визуаль яҡтан матур биҙәүе менән дә арбаны.

Үткән быуаттың 30-сы йылдарында ҡылынған яман эштәр, аяныслы яҙмыштар темаһы фестивалдә бер тапҡыр ғына яңғыраманы. Мәҫәлән, **М. Шкетан исемендәге Мари милли драма театры "Йыван Кырла. Путевка в жизнь" спектакль-киноһында шулай уҡ үҙҙәренең билдәле шәхесе, тәүге тауышлы совет киноһында төп ролде башҡарған мари кешеһе Кирилл Иванов яҙмышына мөрәжәғәт иткән. Сценарий авторы һәм режиссер Степан Пектеев бик үҙенсәлекле алым ҡулланған: сәхнәләге һәр күренеш кино таҫмаһындағы кеүек күҙ алдынан үтә. Уның эшен фестивалдең жюри ағзалары ла юғары баһаланы һәм "Иң яҡшы режиссер эше" номинацияһында билдәләнә.**

М. Сеспель исемендәге Сыуаш дәүләт йәш тамашасы театры "Кәкүктең күҙ йәштәре" тигән спектакль алып килде. Михаил Юхма романы буйынса Михаил Башкиров инсценировкаһында режиссер Борис Манджиев сәхнәләштергән әҫәрҙә илһөйәрлек, телһөйәрлек, мөхәббәт, һуғыш ҡыйған яҙмыштар темалары асыҡ сағыла. Тамашасы ағай-эненең бер-береһенә ҡорал күтәреп сығыуы, милләт-ара никахтарҙың әҙемтәләре, тыуған иленә ҡайта алмаған кешенең яҙмышы тураһында актерҙар менән бергә уйланды. Кешенең бәхете һәм бәхетһеҙлеге нигеҙендә ниҙәр ятыуын төшөндө.

- Фестиваль уңышлы барып сыҡты, унан сағыу тәьҫораттар алдыҡ. Сөнки афиша бик етди, ул милли театр нимә менән йәшәүен генә түгел, Рәсәй һәм донъя театрының бөгөнгөһөн дә сағылдыра. Таланттар күп булыуы һоҡландырҙы. Һәр коллективта тәүбәгә килгән кеүек яңғыраған тарихтар бар, актерҙарҙың һәм режиссерҙарҙың ҡыҙыҡлы, матур эше, фекере күҙәтелә. Иҫ киткес күренештәр уйлап тапҡан йәш актерҙарҙың күплеге хайран итте. Биш йыл үткәндән һуң тергеҙелгән "Туғанлыҡ" бөтөнләй яңы кимәлгә күтәрелеүен күреп шатландым. Киләсәктә тағы ла ҡатнашырға насип булыр, тигән өмөттә ҡалам, - тине фестивалдең белгестәр советы ағзаһы, Мәскәүҙән театр тәнҡитсеһе, педагог Екатерина Морозова.

Фестивалгә йомғаҡтар яһаған кисәлә ҡатнашыусыларҙы Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова тәбрикләне һәм һәр театрҙың етәкселегенә Рәхмәт хаттары тапшырҙы, республика етәксеһе Радий Хәбиров ҡарарына ярашлы өс йылға бер тапҡыр үткәрелеп торасаҡ киләһе осрашыуҙарҙы көтөп аласағы тураһында әйтте. "Туғанлыҡ" фестиваленең белгестәр советы етәксеһе, М. Ғафури исемендәге БАДТ-ның баш режиссеры Айрат Абушахманов та саранан ҡәнәғәт ҡалыуы, һәр ҡатнашыусы театрҙың юғары кимәлдә сығыш яһауын һәм бөгөнгө милли театрҙарҙың ижады донъя театрҙары менән ауаздаш булыуын билдәләне.

**Һүҙ аҙағында философия фәндәре докторы, сәнғәтте өйрәнеү кандидаты, профессор һәм белгестәр советы ағзаһы Галина Вербицкаяның заман театрына нимә йоғонто яһауы тураһындағы фекеренә ҡолаҡ һалайыҡ:** "Заман театрына визуаль цивилизация ҙур йоғонто яһай. Рәссам да хәҙер рәссам түгел, ә видеограф. Сценография түгел, ә спектаклдең визуаль сиселеше. Ни өсөн шулай һуң? Сөнки вербаль цивилизация урынына визуаль цивилизация килде. Йәғни, кеше һүҙгә, ишеткәненә түгел, күҙе менән күргәнгә иғтибар итә. Был яҡшы ла, насар ҙа түгел, әммә факт. Һәм ул кешегә ентекләп күҙәтергә, тәрән фекер йөрөтөргә, ҡайһылыр урында тын ҡалып уйланырға ҡамасаулай. Һәр тамашасы ҡулында телефон, шунда уҡ фото-видео төшөрәләр. Кеше телефондарын һәм социаль селтәрҙәрен онотторлоҡ спектаклде нисек уйлап табырға? Бына ниндәй һорау тора бөгөн театрҙар алдында", - ти Галина Яковлевна.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺҮҘЕНӘН ҠАЙТҠАН...

## ир түгел

Ҡайта сапҡан буҙ яман, ҡайтып килгән ҡыҙ яман.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ суфый уҡытыусы уҡыусыларына ҡарап былай тигән:**

**- Мин ярлы һәм көсһөҙмөн, ғүмерем ахыры етеүен дә тоям. Мин һеҙҙе күп нәмәгә өйрәттем, ә һеҙҙең бурыс - минең ҡартлығымды тәьмин итерлек аҡса табыу...**

**- Беҙгә нимә эшләргә һуң, уҡытыусыбыҙ? - тигән уҡыусылары. - Был ҡалалағы халыҡ бик һаран, күмәкләп хәйер йыйырға сығып китһәк тә, етерлек сумманы йыя алмаясаҡбыҙ...**

**- Ә бит аҡса табыуҙың бер ниндәй мәшәҡәтһеҙ ысулдары ла бар, - тигән уҡытыусы, - уны аҡсаһы күп булғандарҙан тартып алырға ла мөмкин. Беҙ ул аҡсаға лайыҡлы түгелме ни? Тик минең үҙемдең урларға һәм таларға ҡулымдан килмәй, мин көсһөҙмөн һәм ҡартмын...**

**- Беҙ һеҙҙең өсөн барыһын да эшләргә әҙербеҙ, - тип яуап бирә уҡыусылар, - беҙ йәшбеҙ һәм көслөбөҙ. Тик беҙгә ни эшләргә икәнен генә әйт...**

**- Ҡараңғы төшкәс, урамға сығып, берәү ҙә күрмәй торған бер аулаҡ урын табып, шунда йәшеренеп тороғоҙ һәм затлы кейенгән кеше күрһәгеҙ, уның ҡулынан аҡсаһын тартып алығыҙ. Тик физик көс ҡуллана күрмәгеҙ... - ти уҡытыусы.**

**Уҡыусылар бүлмәнән бүлмәгә сабышып, йыйына, шаулаша башлай. Тик бер уҡыусы ғына башын күтәреп тә ҡарамайынса, бер урында баҫып тороуын дауам итә.**

**- Күрҙеңме, миңә ярҙам итергә тигәс, ҡалай күҙҙәре янып китте уҡыусыларымдың. Ә һин ни эшләп тораһың? Һинең дә миңә ярҙам иткең килмәйме ни?- ти уға уҡытыусы.**

**- Ғәфү ит мине, уҡытыусым, - ти уҡыусы. - Минең һеҙгә ярҙам иткем килә, тик һеҙ тәҡдим иткән нәмәне ҡабул итә алмайым...**

**- Ни өсөн?**

**- Был ерҙә беҙҙе берәү ҙә күрмәгән урын юҡ. Хатта мин үҙем генә ҡалһам да, мин үҙемде үҙем күрәм бит. Юҡ, уҡытыусым, мин донъя буйлап хәйер һорап сығып китһәм китәм, әммә үҙемде бур итеп күрергә теләмәйем...**

**Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, уҡытыусының йөҙө нурланып китә. Ул уҡыусыһын ҡосаҡлап ала һәм: "Мин бәхетле, мин оҙаҡ йылдар буйы өйрәткән аҡылды бер генә уҡыусым булһа ла аңлаған!"- тип ҡысҡырып ебәрә. Бына шунда уның ҡалған уҡыусылары был һынау ғына булғанын аңлай. Был эҙһеҙ үтмәй. Ошонан һуң уҡыусылар ниндәйҙер ярамаған ғәмәл ҡылырға ниәтләгәндә гел генә әлеге уҡыусының "Мин бит үҙемде үҙем күрәм" тигән һүҙен иҫенә төшөрә һәм тыйылыр булған. Был уларҙы тамам камиллашыуға алып килгән".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24021

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
30 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 111958